Рәмил Йәнбәк

# БӨРКӨТ САҢҠЫУЫ





Рәмил Йәнбәк

# БӨРКӨТ САҢҠЫУЫ

*Шиғырҙар, поэма*

КИТАП

ӨФӨ · 2002

УДК 894.343-93
ББК 84 (2 Рәс-Баш)-5
Й 5

«Федеральная целевая программа «Культура России»
(подпрограмма «Поддержка полиграфии
и книгоиздания России»)

**Йәнбәк Р.**
Й 5 Бөркөт саңҡыуы. Шиғырҙар, поэма. — Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2002. — 240 бит.

ISBN 5-295-02896-8

Рәмил Йәнбәктең шиғриәте күңелдең иң нескә ҡылдарын сыңлатып ебәрә, тормош ҡанундарына икенсе төрлөрәк ҡарарға мәжбүр итә. Өҫкә ауып килгән ҡышҡы күктә лә йәйғор балҡый алыуына инандыра.

ФП-2002
ISBN 5-295-02896-8

УДК 894.343-93
ББК 84 (2 Рәс-Баш)-5

© Йәнбәков Рәмил, 2002
© Талхина Линда һүрәттәре, 2002

## БӨРКӨТ БУЛЫП САҢҠЫР САҒЫҢ

Хөрмәтле уҡыусы! Хөрмәтле шиғриәт һөйөүсе! Бына һин шағир Рәмил Йәнбәктең өр-яңы китабын ҡулыңа алдың. Был йыйынтыҡтан һин, бәлки, үҙеңә яҙмыш ҡуйған һорауҙарға яуап табырға тырышаһыңдыр; бәлки, күңелең болоҡһоп торалыр, бәлки, яңғыҙлыҡтан, сараһыҙлыҡтан үҙеңә моңдаш эҙләйһеңдер... Беҙҙең ҡатмарлы, болғансыҡ был заман кеше яҙмыштарын аяуһыҙ өйөрөлтә-сөйөрөлтә. Рухы һынғандар ҙа бихисап. Көслөләр, үҙендә халҡы, Тыуған иле, тыуған ере, ғаиләһе өсөн яуаплылыҡ тойғандар ғына еңеп сыға.

Хөрмәтле уҡыусы! Шағир Рәмил Йәнбәктең «Бөркөт саңҡыуы» тигән китабын ҡулыңа алып бик дөрөҫ эшләнең, тип тә өҫтәмәксемен. Йыйынтыҡ ябай китап түгел, ундағы әҫәрҙәрҙе уҡып сыҡһаң, ысынлап та, шағир йөрәгенең бөркөт булып саңҡыуын ишетерһең һин. Ишетерһең дә был саңҡыу-тетрәнеүҙәрҙе, илаһи һағыш, донъяға ихлас мөхәббәт хистәрен үҙеңә иш итерһең. Һиңә мәғлүм бит: бөркөттәр ҡаяларҙы, күктәрҙе генә тиңһенә. Шағир ҙа китабына «Бөркөт саңҡыуы» тип юҡҡа ҡушмаған: ул, милләтебеҙ балаһы, замана ауырлыҡтарын, халҡыбыҙ яҙмышына

төшкән һынауҙарҙы башҡортҡа хас булғанса бөркөт саялығы менән тура бәреп, хәләл көсө менән хәл итергә ынтыла. Аяҡ-ҡулын ауырлыҡтар бығаулағанда ла, йәне ҡанһырағанда ла, шағир юғарылыҡҡа, бейеклеккә ынтыла — бөтә халәте, илһамы уны осошҡа саҡыра. Ысын шиғриәттең маҡсаты ла шул бит инде: кеше күңелен азатлыҡҡа, яҡтылыҡҡа әйҙәү.

Хөрмәтле уҡыусы! Әле генә һин уҡыған һүҙҙәрҙе әйтергә һинең алда хоҡуғым бар, тип уйлайым. Сөнки, Рәмил Йәнбәк — минең замандашым, ҡәләмдәшем генә түгел, күңелдәшем, рухташым да. Беҙ уның менән бергә Башҡорт дәүләт университетында алтмышынсы йылдар аҙағында — етмешенсе йылдар башында бер осорҙа уҡыныҡ. Уҡытыусыларыбыҙға рәхмәт: улар белем биреп кенә ҡалманы, донъяға, халҡыбыҙҙың бөйөк тә, аяныслы ла яҙмышына күҙебеҙҙе асты. Беҙ, Бөйөк Ватан һуғышында ҡан түгеп еңеп ҡайтҡан яугирҙәрҙең балалары, тамағыбыҙ ашҡа туймаһа ла, өҫтөбөҙҙән бер күлдәк төшмәһә лә, аңбелемгә ихлас ынтылдыҡ. Үҙебеҙгә милләтебеҙҙең тарихын асып, башҡорт әҙәбиәте тигән ҙур донъяның оло ҡаһармандарының яҙмышынан тетрәнеп тәүге әҫәрҙәребеҙҙе яҙҙыҡ. Шуға күрә лә әҙәби ижад түңәрәгебеҙҙе лә «Шоңҡар» тип исемләнек. Рәмил Йәнбәктең 50 йәшенә бағышланған китабының «Бөркөт саңҡыуы» тип аталыуы — ана шул шоңҡарлыҡҡа тоғролоҡтоң бер билдәһе ул.

Уҡыу йылдарында беҙ, ихлас ижад итеү менән бергә, йәмәғәт эштәрендә лә дәррәү ҡатнаша инек. Беҙ үткәргән шиғыр кисәләрендә, халыҡ залға һый-

май, әҫәрҙәребеҙҙе коридорҙа булһа ла баҫып тыңлай торғайны. Ул кисәләрҙе даими алып барыусы сибәр егет Рәмил Йәнбәк ине. Ә сәхнәнең түрендә Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рәми Ғарипов, Әнғәм Атнабай, Рауил Бикбаев, Хәсән Назар, Тимер Йосопов, Сафуан Әлибай, Әнисә Таһирова кеүек беҙҙең кумирҙарыбыҙ булыр ине. Улар, әлбиттә, шиғыр һөйләп кенә ҡалмай, беҙҙең тәүге әҫәрҙәребеҙҙе уҡып ижадҡа илһамландырҙы, остаздарыбыҙға әйләнде, шулай итеп әҙәбиәттең киләсәген хәстәрләне. Ким Әхмәтйәнов, Марат Минһажетдинов, Әнүр Вахитов, Роберт Байымов, Тимерғәле Килмөхәмәтов кеүек арҙаҡлы ғалимдар ҙа иғтибарынан ситтә ҡалдырманы, беҙҙең ҡәләмебеҙгә ышанды. Шуға күрә Рәмил Йәнбәк үҙ аллы тормош юлында баҙап ҡалманы: «Башҡортостан пионеры» (хәҙерге «Йәншишмә») гәзитендә ең һыҙғанып эш башланы, унының мөхәррире булыу дәрәжәһенә етте. Журналистикала һәм әҙәбиәттә уңышлы эшләгән егетте «Китап» нәшриәтенең директоры итеп үрләттеләр. Аҙаҡ ул «Ватандаш» журналын ойоштороусыларҙың береһе булды. Хәҙерге көндә «Ағиҙел» журналында баш мөхәррир урынбаҫары булып йөктө төптән тарта. Хәҙер инде үҙе йәш ҡәләмдәштәренә — остаз, уларға ҡулынан килгән тиклем ярҙам итә.

Ә хәҙер, хөрмәтле уҡыусы, һиңә үҙеңә кәрәкле шиғырҙарҙы һайларға ярҙам итеү йөҙөнән, мин Рәмил Йәнбәктең китабына сәйәхәт ҡылып, шиғырҙары тураһында ла һөйләп китмәксемен.

Шағир «Оҙон яҙ», «Билдәһеҙ һағыш», «Тик һиңә табынам», «Аҙашҡан хыял» китаптарын ташҡа баҫтырып сығарҙы. «Цветы во сне» тигәне рус телендә лә донъя күрҙе. Был шиғри йыйынтыҡтары менән Рәмил Йәнбәк «Мөхәббәт йырсыһы» тигән дан алды. Үҙенең Ләйләһенә мәҙхиә яҙған Мәжнүн менән дә сағыштырҙы уны хатта Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәким. Уның был фекерен күренекле бүтән әҙәбиәтселәребеҙ ҙә күтәреп алды, маҡтау-хуплау һүҙҙәре әйтте. Рәмил Йәнбәктең ҙур, яуаплы вазифалар башҡарғанда ла романтик рухлы шағир булып ҡалыуы тураһында һөйләй ине уның алда телгә алынған китаптары. Шуға күрә уның байтаҡ ҡына шиғырҙарына композиторҙарыбыҙҙың йырҙар ижад итеүе лә — тәбиғи күренеш. Улар Башҡортостан телевидениеһы һәм радиоһынан яңғырап тора. Мәҫәлән, «Юғалтыу» тигән йырҙағы:

*Бер ни һиҙмәйем,*
*Бер ни күрмәйем,*
*Һиңә ихластан*
*Бәхет теләйем,*
*Һинһеҙ йәшәргә*
*Генә белмәйем,*

— тигән үҙәк өҙгөс иңрәү йырсы Сәйҙә Фәйзиева башҡарыуында тетрәтә, һиҫкәндерә, һағышландыра.

Рәмил Йәнбәк яңы йыйынтығында ла үҙенең «Мөхәббәт йырсыһы» тигән данына тоғро: һөйөү хистәрен ҙурлаған шиғырҙары, ысынлап та, ҙур их-

ласлыҡ менән яҙылған һәм улар китаптың ҙур ғына өлөшөн алып тора. Шул ихласлыҡтың өлгөһө — «Яратам!» тигән шиғырҙыр, моғайын. Ҡатынына өндәшеп, «Мин, әсәһе, тағы ғашиҡ булдым!» тип башлай был әҫәрен шағир, һәм ошо юлдарҙа — күпме самимилыҡ, шағирса бер ҡатлылыҡ, сафлыҡ, сабыйлыҡ. (Әйткәндәй, Рәмил йәмәғәте Зилә менән ғорурланырлыҡ бер ул, ике ҡыҙ үҫтерҙе!)

*Мин, әсәһе, изге фәрештәне*
*Яратмаҫҡа көстәр тапманым.*
*Кисер, тиеп, һиңә әйтеү ҡыйын,*
*Намыҫымды әммә һатманым.*

Әлбиттә, былай итеп ир-ат шағир ғына яҙа ала: ул ҡатынына яратып «әсәһе» тип өндәшә, шул уҡ ваҡытта, бала булып, үҙ әсәһенә өндәшкәндәй ялбара.

«Ун өсөнсө апрель» шиғыры ла шундай ҡыҙыҡлы дөйөмләштереүҙәргә ҡоролған: ун өсөнсө апрель түгел, шайтаным булмағайы, донъя, яҙмыш шағирға һөйгәнен тапҡан көндән башлана ла баһа!

Рәмил Йәнбәктең китабында йәштәр ҙә, өлкәнерәк быуын кешеләре лә үҙҙәренең хистәренә ауаздаш ана шундай мөкәддәс мөхәббәт лирикаһын табып ҡыуаныр йә йыуаныр, моғайын.

Шағирҙың, бөйөк Паганини кеүек, бер ҡылда уйнауы — үҙенең мөхәббәтен ғүмер буйы данлауы ла ихтимал, әлбиттә. Әммә китаптың «Бөркөт саңҡыуы» тип аталыуын да онотмайыҡ әле. Башҡорт әҙәбиәтен-

дә бөркөт — Салауаттан алып бөгөнгө көнгә тиклем батырлыҡ символы. Инде илле йәшен тултырған шағир булараҡ, Рәмил Йәнбәктең ижад офоҡтары киңәйгәндән-киңәйә, күңел күҙе бөркөттөкө кеүек үткер. Ул был донъяға фәйләсүф булып ҡарарлыҡ тормош һәм ижад тәжрибәһе туплаған. Йыйынтыҡта фәлсәфәүи шиғырҙар ҙур урын алып тора.

*Һаҡламағыҙ мине, туғандарым,*
*Ҡурсаламағыҙсы, яҡындар:*
*Мин тыуғанмын тик бер балҡыр өсөн,*
*Мин тыуғанмын уттан, ялҡындан!*

*Сикһеҙ күккә күпме ынтылһаҡ та,*
*Беҙ барыбер бары Ерҙеке.*

*(«Донъялыҡ»).*

Рәмил Йәнбәктең йәшәйеш, донъялыҡ тураһындағы шиғырҙары ла мөхәббәт лирикаһы кеүек ихлас. Ул, ғәҙәти нәмәләрҙе ҡатмарландырып, кеше күңеленә ятмаҫ яһалма образлылыҡҡа ынтылмай, киреһенсә, тормоштоң үҙе кеүек ябай шиғырҙарында йөрәккә үтерлек фекерҙәр әйтә. Ә ул фекерҙең тәрәнлеген һәм серен, ҡәҙерле уҡыусы, һин үҙең төшөнөргә, үҙеңсә ҡабул итергә тейешһең инде. Ябай хәл-күреш, ваҡиғаларҙан дөйөмләштереүҙәр яһау маһирлығын Рәмил Йәнбәк айырыуса һуңғы йылдарҙа ижад иткән әҫәрҙәрендә күрһәтте. «Иң ышаныр дуҫтарға ла

донъя...», «Тарих», «Юҡ, етте!», «Юлаусы», «Кемгәлер», «Аксиома», «Ни мәғәнә?», «Донъя хәле», «Атайҙы һағыныу» һәм башҡа әҫәрҙәре нәҡ шундайҙар.

*Кеше араһында көйө*
*Үҙеңде юғалтҡанда;*
*Тәҡәттәрең ҡороп бөтөп,*
*Үҙеңде һынатҡанда;*
*Рәнйеү йәки ғәҙелһеҙлек*
*Ахмалға төшөргәндә;*
*Тормош тигәненән биҙеп,*
*Күңелең өшөгәндә —*
*Йылынырға усаҡ кәрәк,*
*Һыйынырға ҡосаҡ кәрәк.*

*(«Аксиома»).*

«Аксиома» шиғырының көнсығыш шиғриәтенә яҡынлығын үҙең дә тойомлағанһыңдыр, хөрмәтле уҡыусы. Был — аҙ һүҙ һөйләп, тос фекер әйтеү тигән һүҙ.

Ил, халыҡ яҙмышы тураһындағы әҫәрҙәре лә шағирҙың үҙ тормошо аша, үҙ уй-кисерештәре аша сағылғанлыҡтан айырыуса минең кеүек йәштәштәренә ҡәҙерле һәм яҡын. Шул уҡ атайһыҙ үткән бала саҡ, шул уҡ әсәй ҡосағында үҫеп буйға етеү, донъялағы иң ғәзизенде — әсәңде ерләп, уны юҡһынып йәшәү. Ябай ғына итеп теҙеп сыҡһам да, шағирҙың тыуған йорто

аша һуғыш һәм башҡа ғәрәсәттәре менән заман үҙе үткән бит. Беҙгә, тыуған тупраҡтан йәшәргә һәм ижад итергә көс алған кешеләргә, иң аяныслыһы, әлбиттә, — тыуған нигеҙҙең ҡороуы. Башҡорт өсөн шунан да ҙур фажиғәнең булыуы мөмкинме һуң?

*Бала саҡ ауылын эҙләһәм дә,*
*Юҡ, мәңге лә хәҙер тапмамдыр.*
*Ә шулай ҙа уны йөрәгемдә*
*Күҙем йомолғансы һаҡлармын.*

*(«Юғалған ауыл»).*

Эйе, шағир Күгәрсен районындағы тыуған ауылы Дауыт-Ҡайыпты атай нигеҙе, әсәй наҙы итеп юҡһына; ауыр саҡтарында хыялында ғына булһа ла уға ҡайтып урай.

Рәмил Йәнбәктең «Ике икең», «Асырғаныу», «Рәмигә хат», «Капитализмға барышлай», «Яңы паспорт», «Кем ҡотҡарыр?», «Мәңге балҡы!» һәм башҡа шиғырҙарында инде заман ҡатмарлыҡтары публицистик рухта сағылдырыла. Был — шағирҙың тематик диапазоны киңлегенең генә күрһәткесе түгел, ә шәхес булараҡ донъяға мөнәсәбәтенең сағылышы, яралы бөркөттөң саңҡыуы. Шағирмын тигән шағирға, Хәсән Назар әйтмешләй, халыҡтың рух һаҡсыһы, рух илсеһе булыу бурысы ла йөкмәтелгән бит әле.

Рәмил Йәнбәктең китабында мине шатландырған тағы ла бер яңылыҡ — уның «Исем» тигән поэмаһы.

Башта уҡ шуны әйтәйем: уңышлы поэма! Йөкмәткеһе менән дә, художестволы эшләнеше менән дә ижади үҫешенең бер күрһәткесе! Ҙурыраҡ күләмле был әҫәрендә шағир шиғырҙарындағы тыуған ер һәм милләт яҙмышы тураһындағы борсолоулы уйҙарын дауам итә. Әҫәрҙең сюжеты шунан ғибәрәт: лирик герой поезда китеп барғанда афған һуғышынан ҡайтып килгән Коля исемле егетте осрата. Николай үҙен «урыҫ» тип таныштыра. «Һин бит «национал»ға оҡшағанһың» тигәнгә хатта ғауға ҡуптара. Детдом малайы икән ул. «Их, минең дә ауылым булһа икән... Бәлки, барҙыр? Бәлки, барҙыр ҙа...» — ти ул яңы танышы, йәғни лирик геройҙың тыуған ауылы барлығына, әсәһе иҫән булғанына күҙе ҡыҙып. Артабан автор үҙенең ауылындағы ваҡиғаларҙы бәйән итә. Ниндәй ваҡиғаларҙы? Уларын уҡыуҙы инде мин һинең үҙеңә тапшырам, хөрмәтле уҡыусы! Поэма жанрына хас булғанса, әҫәр көсөргәнешле тамамлана: Коля лирик геройҙың ауылдашы Нәғим булып сыға.

*Аръяҡтағы ситән өй урыны*
*Шаңҡытҡандыр Нәғим-Коляны:*
*Үҙе тәпәй баҫыр уләндә ул*
*Тәгәрәп ятып уkһеп иланы.*

Автор һығымталар яһарға ашыҡмай, бары ваҡиғаларҙы тасуирлай, картиналар тыуҙыра. Совет идеологияһының кешене ниндәй хәлгә төшөргәнен үҙеңә уйларға ҡалдыра шағир, хөрмәтле уҡыусы!

Һүҙемде Йәнбәктең «Тыуған көн» шиғыры менән тамамлағым килә.

*Ун меңенсе йәшем тула бөгөн,*
*Ҡотлаусы юҡ — һис кем белмәйҙер,*
*Шағир йәше — әҙәм йәше түгел,*
*Күптәр быны, хәйер, һиҙмәйҙер.*

Эйе, быуаттарҙы һыйҙыра ала шағирҙың күңел биографияһы. Ул кешеләргә шундай булыуы менән ҡәҙерле лә. Фани донъяларҙа иһә Рәмил Йәнбәк атлы шағир 50 йәшен туйлай. Билен бишкә быуып ижад итер, халҡына арымай-талмай хеҙмәт күрһәтер сағы уның. Бәркәт булып осор, саңҡыр сағы! Иншалла, шулай булһын! Яңы ижади үрҙәр насип булһын һиңә, ҡәләмдәшем!

*Фәкиһә Туғыҙбаева,*
*Салауат Юлаев исемендәге*
*дәүләт премияһы лауреаты*



*Ҡарт тарих өп-өр яңынан*
*Башлана бөгөн...*

## ИКЕ АРАЛА УЙЛАНЫУ

Тотош быуат уҙҙы Ер йөҙөндә,
Күпме ваҡиғалар кисертеп.
Оло Йыһан иһә был араны
Тик бер мәлдә сыҡты һикереп.
Тарих шаһит: әҙәм балалары
Дусар булды аҙмы һынауға!
Шанлы, ҡанлы хәлдең һәр береһе
Лайыҡлылыр шәхсән йырлауға.
Ваҡытынан алда шәһит китте
Һәр халыҡтың күп ҡыҙ, улдары.
Хаҡлы — хаҡһыҙ, тиеп хөкөм итер
Хаҡ Тәғәлә генә уларҙы.
Шатлыҡ-хәсрәт тулы һынауҙарҙы
Барламайыҡ: аныҡ билдәле.
Кеше атлы заттың әйтеү кәрәк
Үҙ-үҙенә дошман икәнде.
Йөҙәр, меңәр, миллион йылдар буйы
Бер үк ҡанун йәшәй донъяла:
Тамаҡ өсөн, байлыҡ өсөн кеше
Ҡан талаша, үсәй, ҡон ала.
Тамғаланған тәүге быуат менән

Егерменсе быуат араһы —
Үҙгәрҙеме бәндә асылдары,
Тәбиғәте, йөҙө, сараһы?
Замандаштар!
Бәлки, беҙҙең быуат
Киләсәктә бөйөк аталыр.
Беҙгә аныҡ — техник һикерештең
Нигеҙендә нимә ятҡаны:
Атты алмаштырып ракетаға,
Сикһеҙ етеҙ хәҙер сабабыҙ.
Бер һуғышта ғына, ыһ та итмәй,
Миллиондарҙы ҡырып һалабыҙ.
Ябай әҙәм һаман бер сифатта:
Һыныҡ икмәк өсөн бил бөгә;
Ә һанаулы «бөйөк зат» ҡулында —
Ботә донъя, бөтә дилбегә.
Теләһәләр, ошо «ҙур бәндәләр»
Ҙур боролош яһай бөгөндән.
Халыҡ ҡорбан була был саҡтарҙа —
Уның биле мәңге бөгөлгән.
Донъя малы, байлыҡ — батшаларҙа,
Ҡолдар ҡолай эштә, һуғышта.
Шул ҡанунды аңлау йән әрнетә,
Туҡтап ҡала төҫлө һулыштар.
Күсенәбеҙ яңы быуатҡа беҙ,
Яңы мең йыллыҡҡа инәбеҙ.
Ожмах ҡына көтмәҫ ул дәүерҙә,
Йәнә еңел булмаҫ — һиҙәбеҙ.
...Яҡшы батша килһен һәр илгә лә,

Икмәк бирһен иң тәү халҡына.
Күрше шаһтар менән татыулашһын
Ҙур Ер, Кеше, Алла хаҡына.
Нәфсегә баш булып, ҡолаҡ һалһын
Сәсәндәре әйткән һүҙҙәргә.
Беҙҙең батшаларҙың ғәзеллеген
Күрше Ғаләм килһен күҙләргә.
Яңы быуат килә Ер йөҙөнә —
Ниндәй ваҡиғалар кисертер...
Оло Йыһан ғына был араны
Тик бер аҙым итеп һикерер.

## ТЫУҒАН КӨН

Ун меңенсе йәшем тула бөгөн,
Ҡотлаусы юҡ — һис кем белмәйҙер.
Шағир йәше — әҙәм йәше түгел,
Күптәр быны, хәйер, һиҙмәйҙер.
Тап йөҙ быуат элек, хәтеремдә,
Мин ут булып ерҙә яралдым.
Ҡырағай кешеләрҙең йөрәгенә
Иң тәүге хисте бит мин һалдым.
Һәм бүлендем алһыу сәскә булып,
Ярты йәнем ҡалды ялҡында.
Сүллектә мин шишмә инем бер саҡ,
Йылы ҡыуыш булдым һалҡында.
Ҡара көстәр илгә ябырылғас,
Изге яуға сапҡан батыр мин.

Кәрәк булһа, бөгөн мин яңынан
Ошо сифатыма ҡайтырмын.
Ғашиҡтарҙың моңһоулығын күреп,
Йәнем күсеп китте былбылға.
Шуғалыр ҙа мин — мәңгелек Мәжнүн,
Ғашиҡ булам әле быйыл да.
Быуат һайын мин яңынан тыуам,
Йәнем бөткән меңгә бүленеп.
Һәр үләндә минең һутым аға,
Йырсы ҡошта һайрай күңелем.

## МӘҢГЕ БАЛҠЫ, БАШҠОРТОСТАН!

Моңдарымдың моңо һиңә,
Башҡортостан — төйәгем һин.
Һиндә тыуып, һиндә үҫтем,
Берҙән-берем, йөрәгем һин.
Һулап туймаҫ — һауаларың,
Йомарт ерең — иҫ китмәле!
Байлығыңды һанар өсөн
Белеп торам һүҙ етмәҫен.
Баҫыуҙарың, диңгеҙ төҫлө,
Иҫкән елгә тулҡын һирпә.
Башын эйгән башаҡтарҙа
Бөртөк-бөртөк йәшәү тиртә.
Хазинаға, Башҡортостан,
Һәр тарафың һинең тулы.
Ҡабынғанһың Уралымдың

Күкрәгендә йондоҙ булып.
Уйымда һин, ҡанымда һин,
Башҡортостан — ғәзиз әсәм.
Халҡыңа көс-ҡеүәт биреп,
Мәңге балҡы, мәңге йәшә!

## ЯҘҒЫ ЕРГӘ МӘҘХИӘ

Йомарт ҡояш беҙгә быйыл йәнә
Өр-яңы бер яҙын килтерҙе.
Ер әлегә быуын бөркөп ята,
Йыш тын алған йәш ҡыҙ шикелле.
Күҙләргә тип килгән егеттәрҙәй,
Етеҙ елдәр йөрөй ҡаңғырып.
Ҡупшылана урман, ялан, үҙән —
Тағы туйҙар булыр, ахыры.
Ыҙандары ырап, төшкәс орлоҡ,
Олпатланыр ерем, йәмләнер.
Ирендәре — йәшел үләндәре
Һутлы таттар кереп тәмләнер.
Балаһына имсәк биргән инә —
Ерем түше тиртер уңыштан.
Биҙрәмәһен ерем ҡарғыштарҙан,
Ҡурсалайыҡ йәбер, ыҙғыштан.
...Көн оҙоно ҡояш һоҡланыуҙан
Еремдең дә тәне талғандыр.
Бындай сифаттарҙы, юҡ, ер түгел,
Ҡатын-ҡыҙҙар унан алғандыр.

## ҠАРТ УҘАМАНДЫҢ ӘЙТКӘНЕ

Ҡара ҡашлы, һылыу һылыу!
Милләтемдең,
Башҡортомдоң,
Халҡымдың һин —
Киләсәге.
Ҡарт башыма нишләп әле
Һине шулай
Әүрәтәмсе?!
Муйыл күҙле, һүҙсән һылыу!
Күҙҙәреңдә,
Һүҙҙәреңдә,
Йөрәгеңдә —
Уҙғандар ул.
Боронғоно көҫәгәнгә
Йөрәгем дә
Ҡуҙғалған ул.
Үҙе шаян, моңһоу һылыу!
Хәсрәтте лә,
Хәстәрҙе лә
Таратаһың.
Үткәнде һәм киләсәкте
Һиндә ҡуша
Яратамын.
Толом сәсле, йәп-йәш һылыу!
Милләтемдең,
Башҡортомдоң,
Халҡымдың һин —
Киләсәге.

Фатихалап доға ҡылам,
Иртәгәһе
Ил әсәһе!

## МИН КЕМ?

Йыһан өсөн — саң бөртөгө,
Ерҙә — ябай бер әҙәм.
Донъя йәмле булһын тиеп,
Һүҙ-ынйынан йыр теҙәм.
Тик йырыма һағыш тула —
Тормош үҙе һағышлы.
Шат көйҙәремде томалай
Ҡайғылылар тауышы.
Сәнсеп-сәнсеп ала йөрәк,
Теҙләтмәксе ҡанундар.
Буйһонмаҫҡа ҡанундарға —
Сәм-ут яна ҡанымда!
Мөхәббәткә табынғанға,
Көнөм үтмәй көйөүһеҙ.
Һөйөү бәхетһеҙ булһа ла,
Бәхет булмай һөйөүһеҙ.

## ҺУҒЫШ ЯРАЛАРЫ

Яуҙар тынып, нисә йылдар уҙҙы,
Әммә бөтмәй һуғыш яралары.
Үҙҙәре лә һиҙмәй юғалтыуҙы —

Олатайһыҙ үҫә балаларым.
Бер олатай түгел — икеһен дә
Гүргә тыҡты һуғыш яралары.
Ҡорбандары арта үткән яуҙың,
Алыҫлашҡан һайын аралары.
Дары еҫкәмәгән йәштәргә лә
Тейә икән һуғыш яралары.
Беҙ атайһыҙ үҫтек.
Инде килеп
Олатайһыҙ үҫә балаларым...

## ӘРМЕ ЯҘЫ

Уландарҙың ҡайтыр яҙы етә —
Имен генә булһын донъяһы.
Ҡара янмаһындар атайҙары,
Әсәйҙәре күҙ йәш ҡоймаһын.
Уландарҙың ҡайтыр яҙы етә —
Сабыр ғына көтһөн йәш ҡыҙҙар.
Леп-леп килһен, әйҙә, йөрәктәре —
Һөйөү-һағыныуға кем сыҙар?!
Уландарҙың ҡайтыр яҙы етә...
Юлҡайҙарын таштар быуมаһын!
Егеттәрҙең әрме йәше етә —
Имен генә торһон донъяһы...

## МӨХӘББӘТҺЕҘ ШИҒЫР

Донъя, эйе, — ҡуласа,
Әйләндерә лә баҫа:
Изге эшкә — сауабы,
Яуызлыҡҡа — хаҡ яза.
Эй кешем, барла эшең:
Нимәгә китә көсөң?
Бәндәләр күҙ йәшенән
Инмәйме һиңә төшөм?
Океан аръяғында
Мөртәттәр байығанда,
Илем әле бармы, тип
Бер уйла, айнығанда.
Кемгә кәрәк ҡыйралыш,
«Ирек» тигән уйнамыш?
Кем тирмәне әйләнә?
Һәр һорауым — һынамыш.
Ниңә һуң бай ағайҙар
Шундай һөйөп ҡарайҙар
Һинең тыуған Уралға?
Хикмәт юҡмы? Ай-һай ҙа...
Нисәмә быуаттарҙан
Өҙлөкһөҙ өҙгөс бара
Мал өсөн, донъя өсөн —
Мәкерһеҙ булып ҡара!
Бар күҙҙәр томалана,
Тапалып иман ҡала.
Мөхәббәт данлар шиғыр
Һөйөүһеҙ тамамлана.

## ЯҢЫ ПАСПОРТ

Кем сығарған уны уйлап:
паспорт?
Ә шулай ҙа кем милләтең? —
Башҡорт!
Кемгә кәрәк ул ҡағыҙға
яҙған?
Әҙәмдәрҙең аҙғынлығы
аҙған:
«Милләт» һүҙен һыҙып ташлау —
ялған!
Аҙ халыҡтар милләтһеҙ ҙә
ҡалған...
«Россиянмын!» — түшеңде ҡаҡ,
халыҡ!
Илле йылдан килер әсе
хаҡлыҡ:
Барыбыҙ ҙа ул ваҡытҡа —
вива! —
Ырыу-затын иҫтән юйған
Иван...

## ЯҘҒЫ ЙЫР

Аҡ ҡайындар, ап-аҡ ҡайындар,
Туҙғынағыҙ ниҙән ҡайылған?!
Һеҙ — теҙмәһе иң саф хистәрҙең,

Әллә шуға күңел нескәрҙе...
Нескә генә билле һылыуҙар,
Һындарығыҙ һутҡа тулырҙар:
Һоратырға яҙғы ел килгән,
Туй күлдәге инде тегелгән.
Тере йәнгә — илһам иле һеҙ:
Һоҡланыуҙан мин — бер тилегеҙ —
Кәләштәргә һеҙҙе оҡшаттым,
Никах уҡып, туйға оҙаттым.
Оҙаҡламай һөйөү емеше,
Ғашиҡ йөрәктәрҙең тибеше —
Йәш япраҡтар күҙҙе наҙларҙар.
Әлдә генә ерҙә яҙҙар бар!

* * *

Аҡ ҡарҙарҙы яҙҙар ала инде,
Миҙгелдәрҙе тыйып булмай шул.
Мөхәббәтем ятҡа ҡала инде —
Өҙгөләнеп йөрәк тулай шул.
Үҙ-үҙенә әҙәм ҡанундарҙан
БыҒау һалған — өҙөп булмай шул.
Бер өҙләкһеҙ әрнеп яныуҙарҙан
Көлгә ҡалыр йөрәк. Тынмай шул.
Нисә айҙар үтеп, ҡара ерҙе
Ап-аҡ ҡарҙар барыбер ябыр ул.
Йырып сығайыҡсы ҡанундарҙы —
Булдыра алһаң, йөрәк, сабыр бул.

## БАТШАЛАР

Халыҡ, тиҙәр, хужа үҙ иленә,
Халыҡ, түҙмәй, тиҙәр яманға.
Ә минеңсә, илгә — батша хужа,
Батша ғына хужа заманға.
17-лә йығып Николайҙы,
Кем булды һуң илдең хужаһы?
Ябай кеше ирек алдымы ла,
Бөттө мәллә уның нужаһы?
Йылы елгә артыҡ иреп китеп,
Сталинды аттыҡ тарихҡа.
Дилбегәһе илдең бушаманы —
Эләкте ул яңы вариҫҡа.
Һанамайыҡ бөтә батшаларҙы,
Аталһа ла улар төрләнеп.
Ҡайһы генсек беҙгә бәхет бирҙе?
Президентта илме гөрләне?
Иҫке батша төшөп, яңы менһә,
Эй маҡтайбыҙ быны, талмайбыҙ.
Беҙ батшаһыҙ, ахыры, бер генә көн,
Бер сәғәт тә йәшәй алмайбыҙ.

## БӨРКӨТ САҢҠЫУЫ

*Дуҫым Жәүәт Ғайсинға*

Санҡ-саңҡ итеп бөркөт саңҡығанын
Төштәремдә бөгөн тыңланым.
Бер әрнеткес оран, өндәү һымаҡ
Йөрәгемдә шул өн сыңланы.

Ниңә шулай өҙә үҙәгемде,
Үтә таныш ниңә был саңҡыу?
Минең ойоп ятҡан башҡортлоғом
Уяна бит.
Өмөт-ут балҡый.

Шул саңҡыуҙа, гүйә, ишеттем мин
Салауаттың шиғри йор һүҙен.
Ғәзиз халҡы өсөн яу сабыуын,
Һыҡтағанын ярҙа бер үҙе.

Нисә быуат буйы ҡырһалар ҙа,
Баш эймәгән ғорур башҡорттоң
Йөрәге бит миндә. Ә ниңә һуң
Өн-һүҙем юҡ?..
Хас та таш йоттом...

Яҙмыштарҙан, имеш, уҙмыштар юҡ —
Бөркөтмө һуң шуға ышаныр?
Башҡорт илен күмеп өмөттәргә,
Бөркөт саңҡый, күктән төшә нур.

Вәлиди ҙә кеүек ғәййәр ирҙәр
Тыуыр әле, тиеп көтмәйбеҙ.
Бөркөт саңҡый икән, әй башҡортом,
Беҙ бөтмәйбеҙ!
Мәңге бөтмәйбеҙ!

## ЙӘШЕН АЛДАН ЙӘШНӘЙ

*Тик алданма арзан дан-шөһрәткә*
*Осҡан саҡта ғүмер юлынан:*
*Йәшен балҡый тәүҙә,*
*күк күкрәүе*
*Ишетелә бары һуңынан!*

Р. Ғарипов

Ямғыр ҡоя ерҙе кинәндереп,
Йәшен ата, ялтлай ялағай.
Ә уйҙарым, йәшендәрҙе йырып,
Ҡәберенә һинең баралар.
Берсә бағам ҡәбер таштарына,
Берсә — тулҡынына Иҙелдең.
Таш һалҡыны өҙә үҙәктәрҙе,
Ағиҙелем баҫа күңелде.
Һылыу Ағиҙелдең аҡ һыуылай,
Күңелкәйең шундай саф ине.
Йөрәгеңә хыял бөйөклөгө,
Изге хистәр генә хас ине.
...Ямғыр ҡоя, ҡара буръяҡ яһап
Ағиҙелкәйҙәрҙең аҡ һыуын.
Йәшен уйнай, гүйә, осҡон сәсә
Йөрәккәйҙәреңдең ярһыуы.
Ағиҙелкәйҙәрҙең аҡ сафлығын
Ямғыр ғына һыуы буярмы!
Ялтлап китеп йәшен йәшенләһә,
Күк күкрәмәйенсә ҡуярмы?

Бар донъяны күмеп ал нурҙарға,
Һыу өҫтөнән таҫма һуҙыла.
Йәшен йәшнәү, эйе, алдан була,
Күк күкрәүе унын — һуңынан!

## КҮГӘРСЕНЕМ — ҒӘЗИЗ ЕРЕМ

Ағиҙел һәм Эйек уртаһында
Йәйрәп ята тыуған ергенәм.
Күгәрсенем — изге илем минең,
Иң яҡыным, берҙән-бергенәм.
Ил батыры Шәһит тыуған һиндә,
Күгәрсенем — изге илгенәм.
Яҙмыш еле ҡайҙа илткәндә лә,
Мин бит гелән һиңә елкенәм.
Ил инәһе Зәйнәб апай бында
Рухҡайына ҡеүәт туплаған.
Бәрәкәтле ерем, гүзәл халҡым, —
Ғүмер буйы һеҙгә һоҡланам.
Ил ағаһы Мортазаның иле —
Күгәрсенем — ғәзиз еркәйем.
Мәңгелек бер Мәккә итеп һине
Йөрәк түркәйемә теркәйем.
Ағиҙел һәм Эйек уртаһында
Йәйрәп ята тыуған ергенәм.
Күгәрсенем — изге илем минең,
Иң яҡыным, берҙән-бергенәм.

## ҠАБЫРҒАЙТАУҘЫ ДАНЛАУ

Бөйөк Мостай әйткән фекерҙәсә
(Беҙ ҡурҡабыҙ «бөйөк» һүҙенән),
Мәрмәр таштарға мин баҫҡаным бар,
Йөрөгәнем бар таштар йөҙөнән.
Кавказ ҡаяһының текәһенән
Мин упҡынға баҡтым ҡалтырап.
Түбәләрҙә мәңге ҡарҙар ятһа,
Төбөндә боҙ мәңге ялтырай.
Шул ваҡытта ябай ғына тау бар —
Ҡабырғайтау Башҡортостанда.
Ҡабырғайтау битен ҡабырғалап
Ауылым бөркөттәре осҡандар.
Мин дә остом Ҡабырғайтау битләп —
Бүтән донъяларҙы күрергә.
Бала сағым, тәүге мөхәббәтем —
Ошо тауға ҡуша үрелгән.
Ҡабырғайтау — ауылым ҡапҡаһы һин,
Һинән сығып бәхет тапҡаным.
Тыуған ергә минең һөйөүемде
Бер һин генә тоғро һаҡланың.

Мин ҡайҙарҙа бөгөн йөрөһәм дә,
Кендегем бит һиндә, Ҡабырғай!
Һине данлап, ошо шиғырымды
Ҡабырғаңа ине яҙырға!!!

## ЕРГӘ ҺЫҘЕМ

Быйыл ерем никтер
Наҙлана:
Апрель үтеп, матур
Майҙа ла
Һаман сисеп бөтмәй
Ҡар тунын.
Күңел көтә наҙлы
Яҙ туйын.
Бар тереклек көтә:
Уянсы!
Һоҡланайыҡ һиңә
Туйғансы!
Тартынаһың: «Тәнем
Яланғас»?!
Йылы өрөп ҡояш
Йылмайғас,
Тун кейҙерер Хоҙай
Йәшелдән,
Ләйсән балҡыр, уйнар
Йәшендәр.
Орлоҡ тотоп Кешең
Көткәндә —
Ас күҙенде. Йоҡоң
Бөткәндер.
Байрам түгел — сәсеү
Еткәндер.

## КЕМ ҠОТҠАРЫР?

Бер илсеһе булып мин Тәңренең
Ерҙә килә иман тараткым.
Хыялдарым нисек яҡын икән,
Еремде лә шулай яраттым!
Яраттым да... Нисек беркетергә
Йыһан бөйөклөгөн Ер менән?
Көндәр үткән һайын, Күгем яҡын,
Йылдар үтеп, Ергә ерегәм.
Ергенәм һин, минең йөрәккенәм, —
Әҙәм балаһының төйәге.
Юҡтан беҙҙе бар тип яратҡанһың,
Ә әҙәмең һине һөйәме?
Һөйәме һуң һине был кешеләр?
Ала, йолҡа, талай үҙеңде.
Бар әсәләр кеүек, йомартһың һин,
Наҙлыһың һин, ҡалай түҙемле!
Түҙемдең дә сиге бер булалыр —
Өҫтөңдә бит тағы ут, һуғыш;
Үткәндәрең менән ғорурланам,
Киләсәгең уйлау ҡурҡыныс.
Берсә ҡурҡам, берсә өмөтләнәм:
Кешеләрҙең кәмей иманы;
Ҡанға туҙып улар мал бүлешә,
Күҙҙәрендә — байлыҡ томаны.
Шул томанды таратаһы ине
Һәм хыялға ине төрәһе
Бөтә халайыҡты. Ә байлыҡты
Ер йөҙөнән ине һөрәһе.

Ер йөҙөнә ҡабат иман ҡайтһын,
Әҙәп ҡайтһын һәммә әҙәмгә!
Олуғ Йыһандың бер йән яркаһы —
Ер сыҡмаһын юҡҡа, хәрәмгә!
Шундай матур илем — Башҡортостан,
Шундай гүзәл бөтә Ер шары!
Ҡөҙрәтең бир, Тәңре! Илсең яһа,
Беҙҙе ҡотҡарырһың — һин бары!

## БЕҘ ҮҘЕБЕҘ

Башты ярып, ҡашты йыртмайынса,
Һаулыҡ ҡәҙерҙәрен һанламайбыҙ.
Кеше хаталары һабаҡ түгел аслан, —
Беҙ үҙебеҙ янмай аңламайбыҙ.
Шыйыҡланып бөтһә бөтә мейе,
Аҡыл өйрәткәнде алыу ҡайҙа?!
Бәхет килеп янға ятыр төҫлө,
Яҙмыш теҙгендәре ул — Хоҙайҙа.
Алма төшөр, бешеп, ауыҙҙарға,
Кем байыған, тибеҙ, эшләһә лә.
Ҡырын тейәп, төтөн бөркә-бөркә,
Фырт баҫабыҙ, башта — эшләпәләр.
Һәр кем үҙен тоя фәрештәләй,
«Гонаһлы»ға аяу көтәһе юҡ:
Арабыҙҙан уны ырғытырға! —
Тыңлаусандар мәңге бөтәһе юҡ.

Баш бирмәҫтәр, айыҡ аҡыллылар
Күптән инде күҙҙән төшкәндәре.
Донъялыҡта күкрәк ҡаға халыҡ —
Ишелергә тора түшәмдәре.

## КҮҢЕЛ РӘНЙЕГӘНДӘ

Йәш тай ине күңелкәйем,
Ҡороҡ ташлап туҡтаттылар.
Менеп алғас ауыҙлыҡлап,
Елгән ерҙән — атлаттылар.
Тау шишмәһе кеүек таҙа,
Сап-саф ине күңелдәрем.
Ғәйбәт менән мәкер ҡушҡас,
Элеккеләй түгел тәме.
Күңелемдең ишектәре
Һәр кемгә бит асыҡ ине.
Ихласлыҡҡа ҡуштанланып,
Унан көнсөл хаслыҡ инде.
Төбәлгәйне күңел күҙем
Хыялдай киң зәңгәр күккә.
Ни арала тирә-йүнде
Сырмап алған зәһәрлектәр.
Ебәрмәйсә күңелемә
Ул йәберен, ул хурлығын,
Текә ҡая төҫлө баҫҡан
Сая һаҡсым — ғорурлығым.

## ШИФАХАНАЛА «БӘЛӘКӘЙ ВЕРА» ФИЛЬМЫН ҠАРАҒАС

Экран һүнде. Таралыша халыҡ.
Күктән текләп ҡарай йондоҙҙар.
Юҡ! Кешеләр бында күптән парлы,
Тик йондоҙҙар ғына яңғыҙҙар.
Мин дә яңғыҙ.
Бөтә шифахана
Аҡ ҡарғалай итеп күрһә лә.
Кем булырмын, арзан мөхәббәткә
Арзан хистәр менән түләһәм?!
Ә түләйҙәр... Ябай тауар төҫлө,
Бер төн өсөн бында түләйҙәр.
Шифаханаларҙа һөйөү төҫһөҙ —
Мөхәббәттән янып көймәйҙәр.
Төҫһөҙ мөхәббәттең шаһиттары —
Йыһандағы һанһыҙ йондоҙҙар.
Таңға саҡлым һүнмәй улар күктә:
Бында «мөхәббәт»кә ҡомһоҙҙар.
Бик ҡомһоҙҙар. Гүйә, тормоштағы
Бөтә бәләләргә үсләшеп,
Ирле ҡатын ҡатынлы ир менән
Ғишыҡ тота. Һис юҡ көсләшеү.
Ялдар тамам. Ғишыҡтар ҙа тамам.
Барыһы ла ябай, ҡәҙимге.
Йә, кемегеҙ ысын һөйөү тапты,
Йә, кемегеҙ кемгә ҡәҙерле?..
Ҡәҙер ҙә юҡ, иман күптән бөткән —
Их, йөрәгем бушҡа ҡотора:

Бөтәһе лә кескәй Вераларын
Гел тәртиптә генә тоторға
Таралырҙар төрлө тарафтарға
Һәм һөйләрҙәр фильм хаҡында:
Фильмдағы Вера ғына алйот,
Аталары, тиеп, алтындай.
Алтын... Алтын... Ҡайҙа алтын намыҫ?
Бөтә донъя мәллә намыҫһыҙ?
Ах, кешеләр! Һеҙгә һис үпкәм юҡ,
Тормошта бит бары — ҡамыт һеҙ.
Шул ҡамыттан ҡотолорға теләп
Аҙ ваҡытҡа ғына булһа ла,
Ярайһы уҡ ирҙәр, гүзәл заттар
Дежур мөхәббәткә сумалар.
Мин дә сумам. Сумам тәрән уйға:
Ҡайҙа бара халҡым, илгенәм?
...Мөхәббәткә «һыуһап» йөрөгәндә,
Шифаханаларға кил генә...

## Ә ШУЛАЙ ҘА...

Юҡ, кешеләр йәштән ғәмһеҙ булмай,
Ғәмһеҙләнә йылдар һуңында.
Бөтәһе лә — яҙмыш тәҡдиренән,
Кем тап була ғүмер юлында.
Ҙур өмөттәр, оло маҡсат менән
Тормош һуҡмағынан атланым.
Иң гүзәл ил — беҙҙең ил, тип үҫтем,
Ленин бабай һүҙен ятланым.

Ысынлап та, гүзәл ине илем,
Гүзәллеге ине — дуҫлыҡта.
Йәнем әрней хәҙер яндарымда
Шул саҡтағы дуҫтар юҡлыҡҡа.
Нимә генә тиеп сәйнәнһендәр, —
Мәскәү булды дуҫлыҡ ҡалаһы.
Һәммә милләт уны яҡын күрҙе,
Үҙ ҡалаһы итеп һананы.
Юҡ, үткәндәр гөлдәй, тимәйем мин,
Ә шулай ҙа йөрәк һыҙлана.
Юл — маяҡһыҙ, ил күрсөктө үткән —
Боҙлана шул йөрәк, боҙлана.
Ышанысым кәмей кешеләргә:
Болғанышты бәндә күңеле.
Күңел менән нәфсе алышында
Шул нәфсенән күңел еңелде.
Ғәмһеҙлек һәм вайымһыҙлыҡ бөгөн
Итәлер ҙә шуға тантана.
Ә шулай ҙа йөрәк ниҙер көтә,
Ә шулай ҙа өмөт һаҡлана.

## ОРАН

«Кемгә кәрәк минең йырым?» тиеп
Күп шағирҙар ниңә яҙған һуң?
Үҙем ниңә яҙам? Кешеләр бит
Хәҙер шиғыр һөймәй — йөрәк туң!?
Туңдыралар кеше йөрәктәрен
Ҙур ҡыйралыш —
илдә барғаны!

Бәндә йәне һиҙмәй була тиме
Яҙмыштары кемгә ҡалғанын?!
Ҡалды инде йәнде үлсәтергә
Сит-ят ҡағыҙында — долларҙа,
Рух киңлеге — күпме шапыртһындар! —
Булманы һәм булмаç уларҙа!
Улар ҡоллоғона төшкән саҡта
Кешеләме — шиғыр ҡайғыһы?
Беҙ бит бөгөн — меçкен, фәҡир тәнбеҙ:
Ялғанмағас айға айлығы.
Айлап түгел, — аҙна, көнләп — Йәнде
Тән аçырар өсөн һатабыҙ.
Дингә лә бит инде ҡайтабыҙ ҙа...
Нисек түҙә Әҙәм атабыҙ?
Ата-бабаларҙың ҡайҙа зирәклеге?
Саялығы ҡайҙа халҡымдың?!?
Иңрәү генә килә төçлө күктән...
Яңғыҙ шағир ғына ҡалҡынды.
Нурын һыҙып, йондоҙ атылды...
Илдең — рухы, йыры халҡымдың
ҡайҙа-а-а-ау-й???

## АПТЫРАШТА — ЮРАМЫШ

Һөрт йәшеңде! Әй, кешем!
Тыйсы аһ-зарың.
Батша нимә? Хас ҡуштан
Урай диуарын.
Ата-бабаң, әй, бәндәм! —

Өмөт иткән бит.
Изге батша килерен
Түҙеп көткән бит.
Шайтан тиер: көн ҡара! —
Донъяң сәселер;
Араҡы эсеп сараһыҙ,
Йәнең йәнселер.
Ышан илгә! Әй, кешем!
Күңел тулмаһын!
Көткән батша бер шәүлә
Булып ҡуймаһын...
Ҡуштан ҡасып, ихластар
Уны ураһын!
Шуны юраным...

## БОРОНҒО ЙЫР

Ҡайғыларың ҡабат, ай, яңырыр,
Уҙған юлдарыңды буйлама.
Бәндә ғүмерҙәре — бер тотам еп,
Башҡайыңды баҫып уйлама.
Иҫән-һауҙа донъя, ай, мәңге лә,
Ни көткәнен берәү әйтерме?
Фанилыҡта шатлыҡ мандытманы,
Гүргә кергәс, йәннәт тәтерме?
Үткән генә ғүмер, ай, йәл түгел,
Түккән генә йәштәр ҡәҙерле.
Үлемдәрҙән ҡурҡыр ир мин түгел, —
Үҙһенмәйем һалҡын ҡәберҙе.

## ӘГӘР ҘӘ МӘГӘР...

Был донъяны әрләп кенә
Үҙгәртеп булһа әгәр,
Туҡтауһыҙ лаф орор инем
Иртәнән таңға ҡәҙәр.
Яңы батша һайлағандан
Бәҫеме артһа илдең,
Шаһиншаһты Ер шарынан
Мин эҙләп табам, тимен.
Аллабыҙҙан үтенгәнгә
Бәхеттәр төшһә күктән,
Һәр бәндәне бөтөр инем
Бәхетле итеп күптән.
Күктәр беҙгә хаким икән,
Бер һүҙем генә барһын:
Байлыҡ, бәхет — һорамайбыҙ,
Нәфсене йолҡоп алһын!

## ҠАБАТЛАУ

Был тормоштоң мәғәнәһе ниҙә,
Ниҙә икән уның асылы?
Алдан белеп, күреп булмайҙыр шул —
Китап һымаҡ ятмай асылып.
Берәү уйлай: ҡулдан килгән сакта
Йәшәп ҡалыу кәрәк типтереп.
Икенселәр донъя малын ҡыуа,
Бөтә тәнен, йәнен киптереп.

Ҡайһылары көн-төн күкрәк ҡаға,
Тик йылдары уҙа әрәмгә.
...Донъя тулы тыштан ялтыр булып,
Эстән ҡалтыраған әҙәмдәр...
Бик күптәрҙең һүҙен ҡабатлауҙыр —
Миңә ҡалһа, маҡсат-теләк бер:
Ғәзиздән дә ғәзиз халҡым өсөн
Балҡып-янып үтһен был ғүмер.

## ҠУРҠАҠЛЫҠ

Тотҡан юлым минең —
Ул хаҡлыҡ.
Шуға таныш түгел
Ҡурҡаҡлыҡ.
Бүтән әммә хәҙер
Замана:
Хаҡлыҡ менән әхлаҡ
Ямала.
Шиктәр төшкән шуға
Күңелгә.
Уйға хәтәр хәүеф
Күмелгән.
Яңғыҙ ҡалып бара
Ҙур Хаҡлыҡ.
Шуға таныш, таныш
Ҡурҡаҡлыҡ.

Ҡурҡам илдең алғы
Көнөнән.
Өмөт итеп йөрәк
Төңөлгән.
Көс бир мәхшәр-золом
Тыйырлыҡ!
Шунда ҡабат ҡайтыр
Ҡыйыулыҡ.

## МИЛЛӘТКӘ КӘЛИМӘ ҺҮҘЕМ

Эй башҡортом, милләтем!
Бауырым, йөрәк итем.
Һиңә ярҙам италмауҙан
Буҙарып яна битем.
Беҙ бөтәбеҙ түгелме?
Беҙ етәбеҙ түгелме
Вайымһыҙлыҡ сиктәренә?
Ни көтәбеҙ түгелме?!
Уңға ҡараһаң да юҡ,
Һулға ҡараһаң да юҡ
Көрсөктән сығыу юлдары —
Аунап илаһаң да юҡ.
Белеме лә бар беҙҙә,
Ғилеме лә бар беҙҙә.
Милләтте нурға күмерҙәй
Фекер әллә тар беҙҙә.

Мәҫәлдәге байғоштар:
Ҡыҫала, суртан, аҡҡоштай,
Нәфсе, мәкер һәм көнсөллөк
Төрлө яҡлап йолҡкослай.
Күңелегеҙ аңлайым,
Уйығыҙҙы һанлайым.
Күҙмә-күҙ бер һөйләшергә
Һүҙемде мин яйлайым.
Көттөк, хөрлөк килә, тип,
Бәхет үҙе елә, тип.
Күҙ шәмәртеп ултырабыҙ,
Илебеҙ бит бөлә, тип.
Һин көтәһең аптырап,
Мин көтәмен ҡалтырап:
Алма ҡасан ауыҙҙарға
Килеп төшөр ялтырап?
Ата-баба үткәне,
Тарих ҡарғап һүккәне
Аслан һабаҡ булһын беҙгә —
Сыҙарбыҙ һуң күпкәме?
Ҡорал алыр саҡ түгел.
Өңгә боҫор саҡ түгел.
Беҙгә кәрәк айыҡ баш һәм
Намыҫ менән саф күңел.
Саф күңеллек бар беҙҙә,
Намыҫ та юҡ түгел дә...
Ни эшләрбеҙ, донъябыҙ
Эскелеккә күмелһә??!

Мин — аҡтан аҡ, тимәйем,
Һин — пактан пак, тимәйем.
Ошо һаҙлыҡ һурыуынан
Сығырға бик теләйем.
Көлкө лә булғаным бар,
Зиңке лә булғаным бар;
Бер йотомлоҡ хәмер өсөн
Төлкө лә булғаным бар.
Мин бөгөндән башлайым:
Шарап, хәмер ташлайым.
Вәғәҙә-антым боҙолһа,
Бар донъяға фашлайым.
Инде һүҙ көтәм һинән,
Үрнәк ал, ҡәрҙәш, минән.
Йәшәр мәңге милләтебеҙ —
Уҙаман башҡорт тигән!

## МЕНГӘН АТЫҢ...

Өшәнгән ат ҡыуыу менән
Юртып бармаç.
Үшәндәргә дәрт һалам тип,
Түҙем ҡалмаç.

Арғымаҡҡа сыбыртҡының
Кәрәге юҡ.
Ир-егеттең илдән башҡа
Терәге юҡ.

Толпар аттар бәйгеләрҙә
Һыналалыр.
Ирҙәр халҡы, намыҫ, тиеп
Сынығалыр.

Алыҫ юлда ышаныслы
Атың булһын.
Хаҡ эштәрҙән тыуған ергә
Даның тулһын.

...Толпар микән менгән атың —
Егет, ҡара!
Яңы быуын ир ҡорона
Инеп бара.

## ТАРИХ

Һәр кемгә тарих үҙенән
Башлана кеүек.
Хыялы уның тормошҡа
Аша ла кеүек.
Теләһә, донъя нигеҙен
Аҡтарыр һымаҡ.
Баш етмәҫ оло эштәрҙе
Атҡарыр һымаҡ.
Төшөнмәй шуға йәш кеше:
Бик ҡарт ул донъя.
Ҡыҙығы бөтөр ине шул,
Ул быны тойһа.

Ҡартайған һайын, зиһене
Асыла барыр.
Йомғағы фани ғүмерҙең
Тартыла барыр.
Быуаттар менән быуаттар
Алмаша бөгөн.
Ҡарт тарих өп-өр яңынан
Башлана бөгөн.

## КАПИТАЛИЗМҒА БАРЫШЛАЙ

Большевиктар алмаҫ нығытма юҡ.
Ә беҙ иһә улар балаһы:
Вата-емерә ҡойған ҡоймаларҙы,
Капитализмға барабыҙ.
Коммунизмдың яҡты таңдарынан
Йырағайҙы инде арабыҙ.
Алтын ҡояш нуры сағыуыраҡ —
Капитализмға барабыҙ.
Тиҙерәк аҡса, байлыҡ юҫығына
Осрашҡанда һүҙҙе борабыҙ.
Йөҙ дуҫтың да хәҙер кәрәге юҡ —
Капитализмға барабыҙ.
Әүәлгесә йәшәп буламы ни:
Беребеҙ байбыҙ, беребеҙ ҡарабыҙ.
Атайҙарҙан ҡалған мал бүлешеп,
Капитализмға барабыҙ.

Сыбырткылап кыуғас, ул хөрләккә
Кермәйенсә юктыр сарабыҙ.
Эшләмәйсә ашап ятып кына
Капитализмға барабыҙ.
Яңы якты таңға етер өсөн
«Даёшь!» тиеп тамак ярабыҙ.
Байыуын да, бәлки, бер байырбыҙ —
Иптәшлекте әммә,
Күңелдәрҙе,
Алтын төҫлө изге, саф хистәрҙе,
Үҙебеҙҙе кайҙа ябабыҙ?!
...Капитализмға барабыҙ.

## АСЫРҒАНЫУ

Көн аралаш гәзит биттәрендә,
Кара һыҙыктарға уралып,
Шомло хәбәр, хәтәр хәбәр сыға —
Йөрәк кала кыркка туралып.
Ил ағаһы булыр ағайҙарым
Шулай ук та кәмеп барамы?
Эскәйемде бер уй әсендерә:
Ә мин үҙем нигә яраным?
Халкым миктәп, ерем етемһерәй —
Дәртләндерер кайҙа ораным?
Ялпыларҙы яклап һүҙ әйттемме?
Бер мәшәүме эллә торғаным?

Иңрәп-һыҡрап ошо һорауҙарҙан,
Уҙған ғүмеремде ураным.
Ситкә этеп һалған хәмереңде,
Һин дә уйлан әле, туғаным:
Дер һелкетеп донъя көтөр саҡта,
Күкрәк кирер саҡта шатлыҡтан —
Нишләп һуң беҙ ҡалдыҡ меҫкенләнеп,
Ниңә көлдөрәбеҙ башҡорттан?
Ҡайҙа беҙҙә милләт ғорурлығы,
Бабаларҙан ҡалған аманат?
Һиңә, миңә, уға һоҡланһындар,
Сығармайыҡ ҡабат яманат.
Ят ҡылыҡтар, юлдан яҙлығыуҙар
Етер инде. Һабаҡ алайыҡ...
Асырғанып,
Ҡайтып асылдарға,
Әҙәм булып, әйҙә, ҡалайыҡ!
Ҡотолоу юлҡайҙарын табайыҡ!

## БУТАЛЫШ

Дуҫ тигәнем, дошман булмаһа ла,
Ауыр саҡта яурын ҡуйманы.
Барыбер ҙә йөрәк — изгелекте,
Өмөттәрен күңел юйманы.
Дошман тигән, дуҫ уҡ булмаһа ла,
Ярҙам ҡулы һуҙҙы ҡыйында.

Шуғалыр ҙа моңһоу ҡыуаныстан
Күҙҙәремә йәштәр йыйылған.
Йылдар үткән һайын, дуҫ, дошманды
Бутап ҡуям никтер һаман да.
Хәйер, мин генәме?!
Буталған ил.
Буталышып бөткән замандар.

## ҠОТ ҠОЙОУ

Ҡот ҡоялар ирекһеҙҙән
Ҡото осҡан балаға.
Йәшәһен имсе әбейҙәр! —
Сама килә самаға.
Ил халҡының ҡото осҡан
Ирекһеҙләп алдауҙан.
Илем тиеп бил бөккәйне —
Тороп ҡалды ҡалдауҙа.
Әбейҙәрҙең име генә
Булыр бында самалы.
Ҡотҡарам тип ауыр сирҙән
Вәғәҙәләр ҡаманы.
Ҡамауҙарҙа һөйөклө ил:
Ул иҡтисад, сәйәсәт...
Ил баштары юлдар эҙләй —
Көнбайышҡа сәйәхәт.
Өшкөртөлгән бетеү таҡһаҡ
Әләменә илемдең,

Ҡасҡан ҡото ҡайтыр, бәлкем,
Теймәҫ күҙе золомдоң.
Ил бетеүен, илдең ҡотон
Кемдәр генә урлаған?
Тотош илгә ҡот ҡойорлоҡ
Имсе әле тыумаған.

## ИРЕК

Ҡапыл өҙҙөм ҡанун сынйырҙарын,
Ҡоршауҙарҙы бәреп емерҙем.
Бары бер мәл, бары бер мәлгә мин
Ирек тәмен татып өлгөрҙөм.
Донъялар, һай, шундай күркәм икән,
Ҡояш сығыуҙары бүтәнсә.
Азат булып тыуғас, азат булып
Йөрөйөмсө ғүмер бөткәнсә.
Ҡабат ҡыуып мине индерҙеләр
Таш зинданға, тимер ҡоршауға.
Аяҡ-ҡулдар бығау кеймәһә лә,
Йәнем менән күңел тышауҙа.
Йөрәк ҡаны менән йыуып күмдем
Көс-ғәйрәтле, ғорур ирлекте.
Мин тик ошо ҡоршауҙарҙа ятып
Тонсоғорға ғына ирекле.

## ӨЙРӘНЕҮ

Көлгәнемдә, ниндәй ҡыҙыҡ был, тип,
Өйрәттеләр тешем ҡыҫырға.
Ҡыуанғанда, ниндәй шатлыҡ был, тип,
Өйрәттеләр йәшем һығырға.
Хәсрәтемдә, йөрәк әрнеһә лә,
Ауыҙ йырып, йөҙөм балҡыттым.
Рәнйегәндә, әмер ҡушҡанынса,
Өндәшмәнем.
Тамам ялҡытты.
Был тормошта юлым түтә микән,
Ниндәй кеше булдым — белмәйем.
Илар саҡта хәҙер иламайым,
Көлөр саҡта ләкин... көлмәйем.

* * *

Ҡайтам, ҡайтам!
Ауылыма ҡайтам.
Урмандарым мине көтәлер.
Ҡабырғайтыу, һине күргем килә,
Һағындым мин ерҙе — бөтәһен.
Ҡайтам, ҡайтам!
Йәшлегемә ҡайтам.
Тәүге мөхәббәтем көтәлер.
Моңайғанда уның йөрәген дә
Һыҙылдырып һағыш өтәлер.

Ҡайтам, ҡайтам!
Үткәндәргә ҡайтам.
Хыялдарым унда көтәлер.
...Тере йәндәр фани донъяларҙан
Үкенестәр йөкмәп китәлер.

## ОС ҺӘНӘГЕ

Бөгөнгөләй хәтеремдә әле
Байрам һымаҡ бесән өҫтәре,
Шау-гөр килгән Төбәк баҫыуҙары,
Шыптырлаған бакуй еҫтәре.
Иркенәйә ине киҫкә табан
Ҡурпыланып ятҡан туғайҙар.
Эшебеҙгә баһа биргән һымаҡ,
Сырҡылдашыр ине турғайҙар.
Беҙ, малайҙар өсөн киҫкә табан
Иң һоҡланғыс, гүзәл мәл етә:
Кәбән ослағанда ос һәнәген
Ағайҙар бит — нисек бейетә!
Яңы ғына һыуҙан сыҡҡан төҫлө,
Тәндәренән шыбыр тир аға.
Тотош күбә һелтәй ағайҙарым
Кәбән осо тиклем араға.
Улар ял иткәндә ос һәнәген
Тотоп-тотоп беҙ ҙә ҡараныҡ.
Ул саҡтағы бесән байрамында
Ат башына ғына яраныҡ.

Етеҙ йылдар инде үҙебеҙҙе
Кәбән һалыр ирҙәр яһаны.
Әммә беҙҙең ағас ос һәнәген
Алмаштырҙы мотор заманы.
Ҡартайҙылар тотош күбәләрҙе
Һауаларға сөйгән ағайҙар.
Бесән ваҡытында яландарҙа
Ат ҡыумайҙар хәҙер малайҙар.
Ос һәнәген белмәй малайҙар...

## ОСАР ҠОШТАР ҠАЙТА

Осар ҡоштар көҙөн китәләр ҙә
Яҙын ҡайта кире әйләнеп.
Яҙмышымды, ер кешеһе көйө,
Ҡала менән юкка бәйләнем.
Ярмаланып ятҡан баҫыуҙарҙа
Бер ғүмер бит — һабан һөрөүе,
Йөрәк йылың өҫтәп, һалҡын ергә
Изге орлоҡ сәсеп йөрөүе.
Мин китеүҙән ауыл бөләме ни —
Гөрләп тора тормош шауынан.
Элеккесә таңдан көтөү китә,
Ҡояш сыға Сыбар тауынан.
Бары минең генә тар бүлмәлә
Әтәстәрһеҙ ата таңдарым.
Күңелемдең ергә ереккәнен
Үтә һуңлап, ахыры, аңланым.

Ғүмер һуҡмаҡтары, ҡош юлындай,
Тыуған яҡҡа табан илтмәй шул.
Яҙмыштарҙы кире үҙгәртергә
Осоп үткән йылдар етмәй шул.
...Ялыҡтырҙы йөрөп таш урамда,
Ауылымды ҡайтып күрәйем.
Ғүмеремдең бер саҡ һуңы етһә,
Яланында ятып үләйем.

## ЯМҒЫР НИМӘ ШЫБЫРЛАЙ?

Шыбыр-шыбыр, шыбыр-шыбыр —
Ямғыр нимә шыбырлай?
Ергә төшә лә тупылдап,
Тамсылары шыңғырлай.
Сыңғыр-сыңғыр, сыңғыр-сыңғыр —
Көйҙәрен ситтә турғай,
Сафланып ҡалған болонға
Үҙенсә йырын йырлай.
Шыптыр-шыптыр, шыптыр-шыптыр —
Үләндәр ни шыптырлай?
Шыптырлаҡ үлән остарын
Көмөш ысыҡтар һырлай.
Ҡыштыр-ҡыштыр, ҡыштыр-ҡыштыр —
Ашлыҡтар ниңә шаулай?
Һут тулышҡан башаҡтарҙа
Тормош уяна шулай.

## ҺАЙ, БЫЛ ҒҮМЕР!

Тимер ҡоршау ситлек юлын быуғастин,
Һайрамай шул һандуғас ҡош балаһы.
Фани донъяларға, һай, бер тыуғастин,
Ир-азамат булып йәшәп ҡалаһы.

Тыуған иле — иркенлектер
Ҡош-ҡорттоң.
Мәңге азат, ирекле бул,
Башҡортом!

Күк ҡаялар илен төйәк иткәстин,
Сиктин ашыу ғорур бөркөт — ҡот ҡошо.
Сәхрәһенән яҙып, ер-һыу киткәстин,
Теҙ сүгер ҙә микән Урал башҡорто?!

Тыуған иле — иркенлектер
Ҡош-ҡорттоң.
Мәңге азат, ирекле бул,
Башҡортом!

Яңғыҙлыҡта үткән кәкүк ғүмерен
Аһ-зар, һағыш ҡына, ай-һай, үлсәрме?
Илгенәһен һөйгән егет күңелен
Ир намыҫы сағып, сәме үртәрме?!!

Тыуған иле — иркенлектер
Ҡош-ҡорттоң.
Мәңге азат, ирекле бул,
Башҡортом!

## ИКЕ ТАРИХ

Керһеҙ бала сағым! Ғәмһеҙ йәшлек!
Һеҙгә һис тә ғәйеп таҡмайым.
Оҙаҡ йылдар уҙып, күҙ асылғас,
Халҡым тарихын мин яҡлайым.
Имеш, башҡорт ише кәм халыҡтың
Тарихымы — мәңге булмаған!
Һуңғы башҡорт тиҙҙән ҡурай тартыр, —
«Оло ағай» шулай юраған.
Беҙҙең меңәр йыллыҡ үткәндәрҙе
Ҡайсы менән киҫкән Октябрь.
Шуға күнеккәнгә ғәрлектәре
Йөрәк итен иҙә аҡтарып.
Тәрбиәлек менән белем ҡайҙа?!
Ҡырағай, имеш, башҡорт электән.
Биргән бәхет өсөн рәхмәт уҡыу
Үтте лә һуң, ай-һай, елеккә.
Пәрҙә асыу — үҙе ҡыуаныс та,
Үҙгәрерме «Үҙәк» бер ҡасан?
Ҡалыр мәллә һаман «аҙ һанлылар»
Бөйөк Рәсәйҙә — хөрәсән?
Ахры, тарих ике төрлө була:
Береһенә шаһит — Хоҙайҙыр;
Икенсеһен, хаким ҡушҡанынса,
Түбән йәндәр бесеп ҡорайҙыр.

## ЙЫР ТЫҢЛАҒАНДА

*Әхмәр Үтәбайға*

Һарһылтып та һуҙҙың «Буранбай»ҙы,
Аҙап ҡалдым уны тыңлағанда.
Тән земберҙәп, йөрәк дарҫлап тибә
Үҙебеҙҙең башҡорт йырлағанда.
Ошондай ҙа ҡанлы аһ-зарҙарҙы
Кем еткергән һиңә быуаттарҙан?
Донъялары әллә кире китте —
Кем моңайһын тормош сыуаҡтарҙа?!
Буранбайҙың табаҡ-табаҡ хатын
Уҡыһындар ине халайыҡтар.
Илле көйө — илһеҙ, телле — телһеҙ,
Алғы көндә ниҙәр ҡылайыҡтар?!
Кейем ҡойто, әммә тамаҡ туҡ, тип
Шөкөр итәйекме, рәхмәт уҡып?!
Атҡаҙанған данлы депутаттар
Беҙгә бәхет эҙләй, рәхәт йотоп.
Буранбай ир кеүек, иркебеҙгә
Әллә инде быҒау кейҙерелгән?
Күтәрмәҫлек итеп, әйтерһең дә,
Халҡым башы ергә эйҙерелгән?
Һарһылт әле йәнә «Буранбай»ҙы,
Иңрәй-һыҡрай уны тыңлаһындар.
Уйылып та китер шул уйҙарҙы
Ағай-энеләр ҙә уйлаһындар.

# АУЫЛ ЕГЕТТӘРЕ ЙЫРЫ

*Ҡарабаш турғай*
*Ҡарындыҡты ҡуймай,*
*Һин дә — егет, мин дә — егет,*
*Кәләш алып булмай.*

Халыҡ йырынан

Ғәзиз илде һаҡлап, алыҫтарҙан
Ҡайтып төштөк тыуған яҡтарға.
Һағындырған ҡара тупраҡ еҫе —
Ҡабат мендек ҡорос аттарға.
Эшләп үҫкән малайҙарға ни ул —
Емертәбеҙ генә, бүҫәбеҙ!
Тик кистәрҙе үткәреүе ауыр:
Бөтәбеҙ ҙә буйҙаҡ, бисәһеҙ.
«Көтәм, — тиеп, — һинең ҡайтҡаныңды»
Беҙгә хаттар яҙған сибәрҙәр
Ҡалаларҙа «рәхәт йәшәй» хәҙер,
Беҙҙе инде ситкә тибәләр.
Кәләш наҙлап, бала һөйә алмай
Утыҙҙы ла сыҡтыҡ артылып.
Ниңә, ҡыҙҙар, һеҙҙең күңелегеҙ
Шул ҡалаға тора тартылып?
Беҙ бит һеҙҙең йылы ҡараштарға
Йөрәгәндә сарсап, тилмереп,
Таш ҡаланың тынсыу ятағында
Ятаһығыҙ йоҡо һимертеп.

Мал-тыуарҙар тулы — ихатабыҙ,
Яңы бура ҡуйҙыҡ күтәреп.
Ҡайтығыҙ һеҙ, ҡыҙҙар, йөрөмәгеҙ
Ғүмерегеҙ зая үткәреп.

* * *

Боронғола күпме серлелек бар:
Һис кем аса алмаҫ хәкиҡәт!
Тик бер мәлгә шунда күҙ һалһамсы,
Ысын сығып бөгөн әкиәт.
Күрер-белер инем үткәндәрҙе,
Ата-бабаларҙың кемлеген.
Мөмкин түгел пәрҙәләрҙе асыу,
Бороп булмай Ерҙең кендеген.
Күҙ һалаһы ине киләсәккә,
Күрһәң ине бары бер тапҡыр.
Үткәндәргә үтеп булмағандай,
Алғыға ла юлдар йыраҡтыр.
Алыҫ бабам менән алыҫ бүләм
Осрамаһалар ҙа юлымда,
Уҙған менән йыраҡ киләсәкте
Мин тотҡанмын ике ҡулымда.

## БЕР ҺҮҘ

Әкрен генә баҫып, һаҡ ҡына
Атлап киләм иҫке урамдан.
Бөтә ерҙе бында сүп баҫҡан,
Бөтә нәмә бында ҡыйралған.

Дегәнәкле анау ҡалҡыуҙа
Бер саҡ балҡып оло йорт торған.
Ал сәскәләр үҫкән баҡсала
Инде алабута ҡоторған.
Йылғалағы яңғыҙ маяҡтай,
Оҙон ҡолға елгә һелкенә.
Сыйырсыҡҡа ҡуйған ояла
Тик сәпсектәр генә елкенә.
Ҡасандыр бер йәмле был ерҙе
Төйәк иткән зирәк уҙаман.
Ә ниңә һуң киткән нәҫеле? —
Хас дошман бит килеп ҡыумаған?!
«Киләсәкһеҙ» тигән тик бер һүҙ
Төптән киҫкән ауыл тамырын.
Киткән халыҡ, гәрсә белмәйсә
Сит ерҙәрҙә бәхет табырын.
Шаулап торған ауыл булғаны
Хәҙер инде бары төш һымаҡ.
Оҙон ҡолға тора һерәйеп,
Ҡарт ауыҙында серек теш һымаҡ.

## ҠАЙЫП ҠАМҒАҒЫ

«Ҡайтҡым» түгел, «ҡайтып килгем» килә
Ауылыма, тыуған еремә:
Өҙөлөп оҫкан бер ҡамғағы булғас,
Тамырланмам инде киренән.
Машинала һәм... күмәкләп түгел —
Япа-яңғыҙ килә йөрөгөм.

Тубылғытөп, Ҡужый, Сағылдарҙы,
Сыбар тауҙы килә бер күргем.
Мин әле лә тоям тупраҡ тынын,
Күрә беләм үлән үҫкәнен.
Ҡолас ташлап һаман бесән сабам,
Элеккесә — урман киҫкәнем.
Ер хужаһы була алыр инем!
Һәм дә ҡоло ошо тупраҡтың!
...Ергә хисем иләҫ-миләҫ саҡта —
Мин ҡалаға китеп олаҡтым.
Ерем еҫе төштәремә керҙе,
Ауылҡайым, һине һағындым —
Шағир булдым шулай таш ҡалала.
...Тик өҙөлдө һеҙҙән тамырым.
Ана шуға йәнем толҡа тапмай:
Ҡамғаҡ булып оса ил буйлап:
Ҡырҙарыма ҡайтһам — шау-шыу кәрәк,
Ә ҡалала күңел — һил уйлай.
«Ҡайып ҡамғағы» — мин булам инде.
«Ҡайтып килгем килә» — шунлыҡтан.
Юҡ, юҡ, шыңшымайым!
Быны яҙҙым —
Сараһыҙҙан, сабыр юҡлыҡтан.

* * *

Ауылым яланы,
Һине һағындым.
Төшөмдә күргәнгә,
Һағыш яғылды.

Һаман да өçтөндә
Шуҡ ел иçәме?
Үҙеңдә ҡайылып
Ашлыҡ үçәме?
Һиндә тәү татыным
Хеҙмәт шатлығын.
Әле лә күңелем
Тора талпынып.
Мин һалған бураҙна,
Бәлки, ҡалғандыр?
Өçтөндә йоҡларға
Ҡабат яҙғандыр?
Ситеңдә шаулаған
Ҡайын үçкәнме?
Берәйһе утынға
Әллә киçкәнме?
Сәләмлә ҡайынды
Минең өсөн дә.
Ҡабатлап күрермен
Һеҙҙе төшөмдә.

## ҠАЙТЫРМЫН

Ауылымдан сығып киткәнемдә
Мәңге ҡайтмаçымды белмәнем.
Сыбар тауы, Ҡужый, Сатраларҙы
Һағынып үтер ғүмер, тимәнем.

Һағындыра, әммә йылдан-йылға
Һағыныуҙар кәмей баралар.
Уҙған тормош, яҙған яҙмыш һәм дә
Ҡала ята беҙҙең арала.
Хәҙер инде кире ҡайтҡанда ла
Мин ауылса йәшәй алмам шул.
Йөрөрмөн дә бала саҡты иҫләп,
Бөтөнләйгә ләкин ҡалмам шул.
Күберәген ҡала кешеһемен,
Таш урамдар яҡын күңелгә.
Тыуған яҡтар һирәк керә төшкә,
Һағыш йәшем һирәк түгелә.
Тыуған яғым, үпкәләмә миңә.
Юҡ, мин һиңә хыянат итмәнем.
Ер һөрөргә хәҙер ҡулдан килмәҫ —
Хәйерлелер шуға киткәнем.
Күҙҙәр күргән, йөрәк типкән саҡта
Мин Өфөмдә йәшәп ятырмын.
Фанилыҡтан күскәс, ауылҡайым,
Мәңгелеккә һиңә ҡайтырмын...

## БАШҠОРТ ЙЫРЫ

Тармыт-тармыт Урал тауы илдең
Билкәйҙәрен ята уралтып.
Ярым ярты булмай уны һөйөп,
Уралымды булмай юғалтып.

Шундай бөйөк, шундай ғәзиз
Башҡорт ере.
Уралымдай бейекһең һин,
Башҡорт йыры.
Ағиҙелдең, Һаҡмар, Йүрүҙәндең
Тулҡындарын быуат буйламай.
Бер көн түгел, бер мәл мөмкин түгел
Тыуған илкәйҙәрҙе уйламай.
Шундай татлы, шундай затлы
Башҡорт ере.
Һыуҙарыңдай тәрәнһең һин,
Башҡорт йыры.
Тере һыны булып уҙғандарҙың
Тик йыр ғына ҡала бөгөнгә.
Тарих шаңдауҙары һыҙландырып
Һеңеп ҡала беҙҙең күңелгә.
Шундай моңло, шундай уйлы
Башҡорт ере.
Сал тарихтай серлеһең һин,
Башҡорт йыры.

## КЕМГӘЛЕР

Ишегемде аслан бикләмәйем,
Шаҡымайса кил дә кер һин.
Йөрәгемде өйкәй сараһыҙлыҡ,
Мин сарсаным наҙға — бел һин.

Тәҙрәне лә астым — йәнем яна —
Баҫһын уны ингән һалҡын.

Ошо елгә ҡушлап керсе осоп,
Бер йыһазһыҙ бүлмәм балҡыр.

Осоп әйлән янда, әйлән йөҙөп —
Сабырһыҙлыҡ баштан ашты.
Ҡанаттарың елпеп, ташла һелкеп
Йөрәктәге ҡара ташты.

...Тәҙрәм бикләп, тағы ишек ябам,
Хистәремде тыямын да.
Илаһи йән!
Яҡлар бул фәрештәм
Хәсрәт ҡатыш хыялымда.

## ДОН ЖУАН ҮЛЕМЕНӘ

Түгелеп тә илай бер ҡатын,
Берсә йомшап китә, бер ҡатып.
Өҙгөләнмәҫ кеше улай ҙа —
Ҡайғылары, ахры, бик ҡаты.

Күкрәк-түшкәйҙәре киренке,
Фани донъя, тиеп, минеке,
Йөрөп яткан аҫыл һөйәк зат
Бөгөн булған икән гүрҙеке.

Ханымдың да килгән уңғыһы —
Мөхәббәттә янып-туңғыһы.
Башың күтәр: унын ҡосаҡта
Һин булдың бит иң-иң һуңғыһы.



*Һағындыра һеҙҙе, бергә үҫкән*
*Тақыр башлы ихлас малайҙар...*

## СӘХӘР СӘЙЕ

Рәнйемәһен әсәйемдең
Яҡты рухы, хәтеркәйе:
Мәңге иҫтә балалыҡтан
Матур бер мәл — сәхәр сәйе.
Төн ауышып, тәүге әтәс
Йоҡо ҡатыш һаташҡанда,
Мин йылмайып күҙҙе асам —
Әсәй көйләп ятҡанға:
— Әйҙә, улым, тороп ултыр
Сәхәр сәйе — изге ашҡа.
...Бындай саҡта инәлтеү юҡ,
Бындай аштың урыны башҡа.
Өҫтәл тулы — бирһен Хоҙай! —
Ризыҡтарҙың татлылары:
Ул бәлеше, ул ҡоймағы,
Йомғаҡ муйыл, һары майы...
Бар әтәстәр уяныуға,
Самауыр ҙа ҡайнап киткән.
Доғаларын уҡый-уҡый,
Күрше инәй килеп еткән.
Бесәй менән икебеҙгә

Һый эләгә иң элгәре.
Был табында хәбәрҙәрҙең
Һөйләнә тик изгеләре.

Ураҙаһын тотмаһам да,
Мин дә сауап алғанмындыр:
Олоғайып еткәндә лә
Бала булып ҡалғанмындыр.
Таң алдынан уянғанда,
Йоҡо алмай уйланғанда,
Бик һағынып хәтерләйем
Әсәйемдең сәхәр сәйен.

## АТАЙ БУЛҺА...

Атай булһа, ете йәштән
Етемлек алмаҫ ине.
Атайҙың йөҙөн-һынын да
Мин белмәй ҡалмаҫ инем.

Атай булһа, уйнар саҡта
Мин урман йыҡмаҫ инем.
Рәнйеткәндә атайлылар,
Балауыҙ һыҡмаҫ инем.

Атай булһа, кейемдең дә
Еллеһен кейер инем.
Сабый мәлдең, йәшлектең дә
Ҡәҙерен белер инем.

Атай булһа, юл сатында
Мин оҙаҡ тормаҫ инем.
Яңғыҙлыҡта бүрек менән
Кәңәш тә ҡормаҫ инем.

Атай булһа, был тормошта
Дөлдөлдәй елер инем.
Үҙем дә атай булырға
Бик аныҡ белер инем.

Атай булһа, зарланырға,
Моғайын, баҙмаҫ инем.
Күңел йәшем ҡоя-ҡоя
Шиғыр ҙа яҙмаҫ инем.

## МАЛАЙҘАРҒА

Һеҙ төрлөгөҙ хәҙер төрлө яҡта,
Бергә үҫкән алсаҡ малайҙар.
Эх, малайҙар, арты ҡалайҙар, —
Йәндәремде һағыш ялмай ҙа,

Эй, ултырам шунан иҫәнгерәп.
Яңғыҙ яңғыҙлыҡтан ауыр юҡ,
Күңел баҫырлыҡ та бауыр юҡ,
Инде йөрәктә лә дауыл юҡ.

Һеҙҙең хәлдәр нисек был донъяла?
Бик ҡыҫмаймы тормош ҡамыты?
Моңайыу ҙа күптән ялҡытты.
Ҡыҙыҡ бөттө — шуға арытты.

Һағындыра һеҙҙе, бергә үҫкән
Таҡыр башлы ихлас малайҙар.
Тормош, әллә, алға бармай ҙа...
Һеҙҙең һәйбәт булһа ярай ҙа!?

Сыңлап торған саф саҡ — бала саҡты
Буҙйылғабыҙ иҫләй, еребеҙ.
Килеп сыҡһа, йәсе, берегеҙ —
Йәнем ҡалыр ине терелеп...

Беҙ төрләбөҙ хәҙер төрлө яҡта.
Төрлөсәлер тормош-көнөбөҙ.
Беребеҙҙең сыҡмай өнөбөҙ.
...Аҙаҡ... тормош баҫты, тиербеҙ...

## ДИҢГЕҘ ҺӘМ ЙӨРӘК

Ҡапыл тынды дауыл. Шымды диңгеҙ —
Ярһыуына килмәй ышанғы.
Әммә һаман ҡара буръяҡ төҫө.
Йә, нимәгә шулай ҡыландың?!

Зәңгәр күккә — йыраҡ хыялыңа
Ынтылдыңмы шулай шашынып?
Әллә инде сафланырға уйың —
Яр башына ҡом, ләм ташының?

Юҡ, моғайын, емермәксе инең
Ҡоршап тотҡан ҡая-бығауҙы.
Эй ғорур йән! Онотаһың, ахыры,
«Тәҡдир ҡушҡас» тигән йырауҙы.

Тәҡдир ҡушҡас, буйһонаһың икән:
Һин дә хәлдән тайҙың, арының...
Күкрәк ситлегемдә йөрәк дулай —
Диңгеҙ сиренәме тарыны?!

Зәңгәр хыялдағы ишен эҙләп,
Ете ҡат күкте ул гиҙмәксе,
Үкенестәр, ҡанун, тыйыуҙарҙың
Сынйырҙарын, гүйә, өҙмәксе.

Ғәрлегенән башын ташҡа бәреп,
Диңгеҙ үкһей, диңгеҙ шомлана.
Шул даръяны еңгән ҡанундарға
Йөрәкме һуң ҡаршы торала?!
Ни эшләрмен — һаман тынмаһа...

## ШӘҮЛӘ

«Юҡ, алданмам», — тиеп күпме ҡабат
Үҙ-үҙемә һүҙҙәр бирмәнем.
Бала күреп, тағы алданылар,
Вәғәҙәләре — бер тел тирмәне.
Шул тирмәндә тартып иләнгәндер
Һөйөү һүҙе — хәбәр теҙмәһе.

Нимә өсөн йөрәктәрем яна —
Ҡайғы-хәсрәт етер иҙгәне!
Иҙҙеләр ҙә, һыҡтылар ҙа инде
Бәп-бәләкәс кенә йөрәкте.
Ҡая-терәк эҙләп юлланғайным
Һәм етерлек таптым «терәк»те!
Терәктәрҙе — изге теләктәрҙе
Тормош шытырлатып һындыра.
Вәғәҙә-анттар — моңһоу күндәремдә
Шәүлә төҫлө бушлыҡ, һын ғына.

## АЗАТЛЫҠ

Нисә йылдар мин тотҡоно булдым
Һин ҡоршаған һөйөү-алдаҡтың.
Юҡ, берәү ҙә көсләп индермәне —
Тотҡонлоҡто үҙем яраттым.
Татлы ине миңә был тотҡонлоҡ,
Мин ойоном һинең арбауҙан.
Үҙемсә бит күк-йыһанда йөҙҙөм —
Ә ятҡанмын зиндан-һарайҙа.
Ҡараштарың, йылан күҙҙәреләй,
Зиһенемде икән әүрәткән.
Тик барыбер һиңә ҡарғышым юҡ —
Һиндәй арбаусылар һирәктәр.
Мәле етте: мин уяна барам
Ялған, эммә тәмле төшөмдән.
Ҡайҙа йылынырмын, әгәр йәнем
Тормош һалҡынында өшөһә?

Өшөһәм дә, инде кире инмәм
Һарайына ялтыр һөйөүҙең.
Мин — иректә, азат бөркөт төҫлө,
Шәүлә түгел, хәҙер мин — Үҙем!

## ХАКИМҒА

Бурҙай эттәй һин олорһоң —
Ҡуша өрмәҫ шағир.
Бөгөнгөлә соҡсонорһоң —
Ул алғыға бағыр.
Ысын шағир булмаҫ шағир —
Табан ялағанда.
Әҙәм бутап, һүҙ һөйләмә,
Йәлләмә һин —
Шағир ҡолағанда.

## КҮРЕП СЫҒАМ ӘЛЕ

Эшем ташлап, һелтәп ҡулды донъяһына,
Туғандарҙы күреп сығам әле.
Кистән һалам күстәнәстәр. Таң һарыһы —
Мосафирҙың юлға сығыр мәле.

Кемдә — шатлыҡ, кемдә ауыр ҡайғылар бар —
Дуҫтарымдың хәлен белешәйем.
Күңелдәге йылы саҡтыларҙы йыйып,
Барсаһына өмөт өләшәйем.

Нәфрәттәре кәмеп ҡуймағанмы икән —
Дошмандарға кәрәк күренәһе!
Яуыздарһыҙ аңлап булмай изгелекте,
Йөкһөҙ көйө нисек үр менәһең?..

Мин яратҡан, мине наҙлап һөйгәндәрҙең
Тормоштарын күптән белгем килә.
Кемеһенә һағыш, кемеһенә наҙҙар —
Йөрәгемде бүлеп биргем килә.

Эшем ташлап, таңдан юлға сығайымсы,
Ҡуй, ҡалмаһын йөрәгемдә көмер!
Фани донъяларҙа сауап алайымсы —
Бирәүҙә лә мәңге түгел ғүмер.

## ТЫНМАҪ КҮҢЕЛ

Йөрәк һулҡылдай, йөрәгем илай:
Ни кәрәк уға, ни һуң ул теләй?

Илайым йәшһеҙ. Һис бер теләкһеҙ
Йәшәүе ҡыйын. Ҡыйын терәкһеҙ.

Терәгем бәрәү: ул бит — мөхәббәт!
Ғүмерлек сирем — мәңгелек зәхмәт!

Зәхмәткә сихәт табылмаҫ инде,
Йөҙөмә аҡ нур яғылмаҫ инде.

Яҙылмаҫ, ахыры, маңлай һырҙарым,
Моң-һағыш тулы ҡалыр йырҙарым.

Ирҙәр эшеме — тормоштан биҙеү,
Гелән зар илап, хыялда йөҙөү?!

Юҡ, йөҙәм әле. Хыялһыҙ — үлем!
Үҙ ишен тапмай тынмаҫ күңелем!

**ҺЫНАМЫШ**

Әрһеҙ елдәр эйелеп үбә торғас,
Ер ҡарайҙы инде, оялып.
Ҡышҡы йәре — аҡ ҡарҙары менән
Түгелеп-түгелеп ҡуша иланы.
Яҙ еткәнгә, ерем, бик ҡайғырма,
Йән һөйгәнең — йәшел йәриәң
Күп көттөрмәҫ, алыр ҡосағына.
Үҙеңә лә, ана, йәм инә.
Мин көнләшәм һинән, еркәйгенәм:
Һәр миҙгелдә — үҙең ғашиҡ йән.
Бары минән яҙҙар хистәремде
Йыраҡ оҙатырға ашыҡҡан.
Тоймайым мин шуға яҙҙың еҫен,
Тал бөрөһө һалмай уттарға.
Ус аяһы ерҙә шыҡҡан үлән
Күңелемдә шатлыҡ ҡуптармай.
Тып-тын үтәм боҙло һуҡмаҡтарҙан,

Ҡарғаларҙы — моңһоу күҙәтәм.
Ғүмер буйы юлдаш — шул яңғыҙлыҡ,
Яңғыҙлыҡтар үтте үҙәккә.
Ҡаның уйнап, йөрәк ярһынмағас,
Ни матурлыҡ яҙҙың йәменән?!
Бөтә донъя гөрләп уянғанда,
Айырылырмын кеүек йәнемдән...

## ЯҢЫ ЙЫЛ БАЛҠЫШЫ

Ҡалдырып үткәндә
Бер мәлен яҙмыштың,
Һынауҙар әҙерләй
Йылдарҙың ағышы.
Ҡалдырып үткәндә
Яманын, яҡшыһын,
Өр-яңы өмөткә
Һәр кемдең барышы.
Ҡалдырып үткәндә
Үкенес, яңылышты,
Шатлыҡҡа юл яра
Көндәрҙең ағышы.
Ҡалдырып үткәндә
Хәсрәтте, һағышты,
Бәхеттәр юрай бит
Яңы йыл балҡышы!

## САПТАР ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТ

Ҡайҙа, ҡасан, ниңә, тиеп
Һорашыу кәрәк түгел.
Булған унда, беҙҙә, һеҙҙә...
Һыҙлана әммә күңел.
...Ап-аҡ яллы саптар юрға —
Әкиәттәге дөлдөл!
Менеп елһәң, ишетерһең
Илауын артта елдең.
Һабантуймы, ҡышҡы һунар —
Саптар ат алын бирмәй.
Алда ниҙәр көткәнлеген,
Мал түгел, әҙәм белмәй.
«Яңғыҙ булмай донъя көтөп,
Уртаҡ хәҙер бөтәһе!» —
Батшалар оран ташлағас,
Башты ҡайҙа итәһең?..
Уҙған тарих һөйләп, ниңә
Күңел ярам аҡтарҙым?
...Яҙғы һабан. Көҙгө һабан... —
Яндыралар саптарҙы.
Яндыралар саптарҙы!??

* * *

Юҡ, мин һиңә ауыр һүҙҙәр әйтмәм.
Төшөнәмен: күңелең башҡала.
Аһтар ормам, көнләп дау күтәрмәм,
Йөрәгемдә рәнйеү ятһа ла.

Рәнйеүҙәрем — бары яҙмышымдан,
Юғалтыуым һине — үҙемдән.
Һиңә лә бит, беләм, еңел түгел:
Моңло һағыш күрәм күҙеңдә.
Күҙҙәреңде минән йәшермәсе —
Һалған бығауҙарым асамын.
Һин — ирекле! Тиҙ ос бәхетеңә!
Төп күтәрәм ғазап касаһын.
Асы булмай гелән ғазаптар ҙа:
Бәхет килһә һиңә — ул татлы.
Нинә әле беҙҙең замандарҙа
Ысын ирлек йыраҡ олаҡты?!
Мин ир-егет булып ҡалғым килә,
Рәнйеү-әрнеүҙәр ҙә юҡ һымаҡ.
Һаубуллашып эстән илағанда,
Көнөм генә, булсы, бул тымыҡ...

## ТОҒРОЛОҠ

Ҡанаттарың юғын белмәйенсә,
Мин күктәргә һине күтәрҙем.
Ер өҫтөнән ҡабат шыуышаһың —
Үкенесте инде үткәрҙем.
Яңғыҙ осам хыял киңлегендә,
Ҡанаттарым талды — ҡолармын.
Йәнһеҙ кәүҙәм ҡосоп шул мәл, бәлки,
Һауаларҙы ҡарғап иларһың.

Ләғнәт миңә: күкте яратамын,
Ә һин һаман тоғро ереңә.
Ғүмер уҙа, ара йырағая —
Әммә юл юҡ, юҡ шул кирегә...

## БӘХЕТ КӨТКӘНДӘ

Бәхет, бәхет!
Ниңә ялтланың да
Ҡапыл ғына ниңә юғалдың?
Яҙмыш тағы һалды ғазаптарға,
Хистәремде ҡабат туғарҙы.
Туғарылдым тағы. Юғалырмы
Ҡурпыланып килгән өмөтөм?
Бер килмәһәң, бер килерһең, тиеп,
Һине, бәхет, күпме мин көттөм!
Көтөүҙәре әллә ни түгел дә,
Көтөк булыуҙары ауыр шул.
Бер килерһең! Ләкин ул ваҡытта
Сәстәремә ҡарҙар яуыр шул.
Ҡарҙар яуыр йылы тойғоларға,
Йөрәккә лә һалҡын боҙ ятыр.
Ул ваҡытта мин кемдәргә хәжәт?
Ул ваҡытта кем һуң яратыр?
Ваҡытында килә һөйөләһе
Үҙем һөйгән ғәзиз йәремдән.
Интектермә, бәхет, тейәрен бир —
Иман юҡмы әллә йәнеңдә?
Эх, йәнең дә юҡтыр, моғайын.
Йәшһеҙ генә түгелеп илайым...

## БӘХЕТ КИЛГӘНДӘ

Ә һин, бәхет, хәйләкәр ҙә икән:
Килеп индең тынһыҙ, тауышһыҙ.
Һинең менән генә түгел шул төн —
Бөтә донъя менән ҡауыштым!
Ҡауыштым мин йылға, тауҙар менән,
Ҡарҙар менән инем бер бөтөн.
Аҡ ҡарҙан да ялҡын бәреп торҙо,
Фәрештәләр булды бер көтөү.
Көтөп алдым бөтә ғүмер буйы
Тормошомдоң бөйөк был мәлен.
Нисек һинһеҙ ерҙә йәшәгәнмен,
Барлығынды нисек белмәнем?!
Белендермәй генә, бәхет, миңә
Һин үҙеңде бирҙең бүләккә.
Юлды таптың! Инде онотмайса,
Килеп тор һин шулай һирәкләп.
...Ә һин, бәхет, шундай татлы икән,
Ҡатлы икән килер юлдарың.
Килмәһәң дә, тәмең бер татығас,
Һине инде үҙем юллармын!

* * *

Күңел әҙләнмәй —
Һүнгән усағы.
Йөрәктең әрнеп
Һыҡранған сағы.

Өмөт юҡ алда,
Үткәнем — томан.
Ҡыҙыҡһыҙ донъя:
Инде күп тормам.
Ҡайҙа аҙашып
Ҡалған хыялдар?
Яралы йәнде
Ары тыялмам.
Хистәрем әрәм,
Наҙҙарым әрәм.
Ҡасан тынырмын —
Ниндәй мин әҙәм?!

## ҠАР ЯУҒАНДА

Ҡар һыуҙары, уңған ҡыҙҙай,
Йыуып алғас ер өҫтөн,
Күңелемдә йәшел үлән —
Өмөт ҡалҡты, кер бөттө.
Тәбиғәттә гел яҙ түгел:
Йәйе бар, моңһоу көҙө.
Көҙгө япраҡ төҫлө яна
Хәсрәттән һары йөҙөм.
Бар донъяға аҡ ҡар яуа —
Ер һағышын ағарта.
Ҡаралыҡты йәшерә ул —
Күңелемде алдата.

## СУМАМ ТӘРӘН КҮЛДӘРГӘ...

Сумам инде, сумам инде,
Сумам тәрән күлдәргә.
Түҙмәнем түгел, күп түҙҙем,
Түҙҙем әсе елдәргә.
Күл һыуҙары төпһөҙ икән,
Сумһам, сыҡмам — күрерһең.
Һағынғанда ҡамышынан
Таҫма яһап үрерһең.
Сумам күлгә, түҙмәйенсә
Йөрәктәге ялҡынға.
Киләсәгем — сикһеҙ йыраҡ,
Үткәндәрем — яҡында.

## ОНОТМАҒЫҘ МИНЕ

Һеҙ, кешеләр, онотмағыҙ мине:
Бер ғашиҡ йән инем донъяла.
Матурлыҡты һөйөп туҡтаманым,
Күҙ туйманы, күңел туйһа ла.
Һеҙ, кешеләр, онотмағыҙ мине:
Бер хыялый булдым тормошта.
Икмәк-һыу һәм йырға разый ҡалдым,
Зат-зиннәтле, ана, тырыштар.
Һеҙ, кешеләр, онотмағыҙ мине:
Мөхәббәткә генә теҙләндем,
Тапмаһам да, күрмәһәм дә үҙен,
Мәңге яндым, мәңге эҙләндем.

## ТОЛ ҠАТЫН АУЫҘЫНАН

Эх, өҙҙөрөп уйна әле гармун,
Бер йөҙҙөрөп бейеп ҡалайым,
Йөрәккәйем болоҡһоноп тора,
Күңелдәрем асып алайым.
Аш самаһын ашағандар белмәй,
Белә уны бары тураған.
Нишләп һуң һеҙ барығыҙ ҙа парлы,
Мин яңғыҙмын — кемдәр юраған?
Юрамаған һис кем. Яҙмышымдан
Уҙмыш юҡтыр, ахыры, — шул ғына.
Яҙмышымдың тәмен һөйләмәйем,
Толдоң хәлен аңлар тол ғына.
Яңғыҙлығым баҫам һеҙҙең менән,
Һеҙҙең алда ғына мин алсаҡ.
Үҙәккәйем бара бит өҙөлөп,
Шуға ғына мин бит шаталаҡ.
Эх, өҙҙөрөп уйна әле гармун,
Бер баҫайым — осҡон сәселһен!
Сәнселеп тә китһен был донъяһы,
Йөрәк, әйҙә, тағы йәнселһен!

...Май ҡояшы кеүек, ут балҡытып,
Ойотоп та баҫа йәш ҡатын.
Оноткан ул, гүйә, әрнеүҙәрен —
Керпегендә ҡалған йәш ҡатып.

## ЙӘШЛЕК ХАҠЫНДА НӘСИХӘТ

Йәшлек уҙа, тиеп зарланмайыҡ,
Уҙғандарҙы ғына барламайыҡ.
Ә һин тот та уны уҙҙырма,
Ғүмереңде юҡҡа туҙҙырма.
Ана, йәшлек бара йәнәшәңдә —
Бер хикмәт юҡ минең кәңәшемдә:
Һин йәшлекте алға сығарма,
Ҡыҙыу атла, тырыш сыҙарға.
Атлап етешмәһәң, йүгереп бар,
Һыңар аяғыңда һикереп бар —
Йәшлек гелән булһын эргәңдә,
Тормош тигән юлдан елгәндә.
Тының бөтөп, хәлдән тайҙың икән,
Дарман етмәй, бешеп-яндың икән —
Үҙ-үҙеңде йәлләп заң һалма,
Йәшлек уҙҙы, тиеп зарланма.
Йәшлек менән һөйөү — ике ҡанат,
Йәш булайым тиһәң, янып ярат.
Мөхәббәттән генә яҙма һин —
Йәшлегең дә мәңге һаҡланыр!

## ҒҮМЕР АРАҺЫ

Табыштар һәм юғалтыуҙар —
Бөтә ғүмер араһы.
Ошо ике һүҙгә һыйған
Үткән йылдар баһаһы.

Таңғы ысыҡ балҡышылай
Шатлыҡ һәм ҡыуанысы.
Төштә генә ҡала улар —
Шунда бар йыуанысың.
Үкенестәр, үкенестәр...
Үҙәкте өҙә генә.
Аптырарһың ошоларға
Йөрәктең түҙгәненә.
Һағыштарға бирешмәҫкә
Табылһасы сараһы.
Тик бер мәллек бәхет өсөн
Киләсәккә бараһы.

## МИН ҮЛГӘНДӘ...

Эшләнәһе эштәр эшләнһә лә,
Эшләнәһе тағы эш ҡалыр.
Төшөнәһе — күпме төшөнөлһөн,
Төшөнәһе тағы төш ҡалыр.
Әйтеләһе һүҙҙәр әйтелһә лә,
Әйтеләһе тағы һүҙ ҡалыр.
Һөйөләһе йәрҙәр һөйөлһә лә,
Мин һөйәһе тағы ҡыҙ ҡалыр.

## МИН ДӘ ЕЛӘМ...

Спортсылар старт һыҙығынан
Уҡтай осоп алға ырғыла.
Тик еңеүҙе уйлай һәр береһе,
Һәр береһе шуға ынтыла.

Бэйгеләрҙең ҡаты көрәшендә
Кемдер еңә, кемдер еңелә.
Иң көслөләр, иң етеҙҙәр бары
Финиш һыҙығында беленә.
Ә кешеләр тормош бәйгеһендә
Ҡасан баҫа икән стартҡа?
Ҡайҙан белеп, нисек күреп була:
Кемдәр алдан елә, кем — артта?
Финишҡа ла юлдың оҙонлоғон,
Йәшәгәндә, ҡыйын үлсәүе.
Ахырыһы, ул юҡ бөтөнләйгә,
Барған һайын, әллә күсәме?
Тотош бәйге — кеше ғүмерҙәре,
Сәмле көрәш — баштан аҙаҡҡа.
Ҡанатланып, ярһып мин дә еләм —
Әллә аҙға, әллә оҙаҡҡа.

## ЙОМРО-ЙОМРО ЙОМҒАҒЫМ...

Был донъяның серҙәренә
Төшөнөргә ине.
Йәшәйештең төпкөлөнә
Бер төшөргә ине.
Сикһеҙ ғаләм даръяларын
Йөҙөп гиҙһәң ине.
Унан оло ни барлығын
Үҙең һиҙһәң ине.

Молекула, атомдан да
Ваҕы бармы икән?
Уларға беҙ — алла булып,
Ваҡыт тармы икән?
Унда-бында тере йәндәр
Йәнә булмай булмаç.
Галактика балалары
Әл дә тыумай булмаç.
Оло йыһан Мәңгелектә —
Сисмәç йомаҡ бары.
Беҙ төшөнгән, асҡан серҙәр —
Бөтмәç йомғаҡ бары.

## ШАЯРЫУ ҠАТЫШ

Ҡанатһыҙ осорҙай булам,
Донъяны ҡосорҙай булам.
Йонсоуҙа — ҡояшты күрәм,
Хыялдан — таяныс үрәм.
Һәр ҡыҙға ғашиҡ мин бөгөн,
Йөҙөктөң ҡашы мин бөгөн.
...Бешкән еләктең тәме юҡ,
Сағыу донъяның йәме юҡ.
Әрней йөрәгем һәр һүҙгә,
Тулып эркелә йәш күҙгә.
Бушҡа ла бошонған сағым,
Юҡтан да хушһынған сағым —
Шиғырҙан бушанған сағым.

## КӨТӨҮСЕ

Аҡлан ябып көтөү утлап йөрөй,
Ә көтөүсе әле тын тора.
Малдарын ул барлай күңеленән,
Тоғро дуҫы — этен саҡыра.
Ер өҫтөнә төшә киске эңер,
Малды кәрәк бергә тупларға;
Һәр береһен теүәл генә көйө
Таратырға кәрәк йорттарға.
Иң кинәнгес мәле көтөүсенең:
Көр тауышы — аҡлан өҫтөндә,
Ҡыуаныстан эте лаулап өрә,
Ихлас арыу балҡый төҫөндә.
...Юҡ мәшәҡәт, ығы-зығы менән
Үтеп китте, шөкөр, көндөҙөм.
Шиғри юлдарымдың — малдарымдың
Көтөүсеһе хәҙер мин үҙем.
Тоғро дуҫым — ҡәләм алдымда,
Бөтә йәнем, тәнем ялҡында.

## ЯҢҒЫҘЛЫҠ

Мең-мең ғәфү һеҙгә, туғандарым,
Кисерегеҙ, яҡын күргәндәр;
Һантый ине тере сағында, тип,
Ҡарғамағыҙ мине үлгәндә.

Һантыймын шул: барса әҙәм төҫлө,
Йәшәһәмсе тыныс, шауламай;
Һиҙмәмешкә бороп ғәйептәрҙе,
Һәр урында хаҡлыҡ дауламай...
Даулай торғас, ҡалып барам, ахры,
Бер ғәскәрһеҙ башлыҡ шикелле.
Араларға башта ел өргәйне,
Араларға хәҙер шик керҙе.
Шиктәр кергәс, һалҡын елдәр өргәс,
Көттөрмәҫтер инде дауылы...
Иң ҙур ғазап, иң ҙур яза миңә —
Яҡындарһыҙ тороп ҡалыуы.
Яңғыҙ ҡалһам, йөрәгем дә шартлар...
Дөрөҫлөкһөҙ ҡалһам, түҙәрме?
Һантый шағир һеҙгә яҡын түгел,
Һеҙгә яҡын ялған һүҙҙәрме?
Ялған һүҙҙәр аша бөтәгеҙгә
Мин яҡшы ла, бәлки, булырмын.
Юҡ, юҡ, дуҫтар! Мин, моғайын, шағир,
Теҙгенһеҙ бер шағир сүрәтендә
Япа-яңғыҙ көйө һулырмын...

## ШАҒИРҘАР

Шағирҙарҙың йәше сыҡмай,
Шағирҙар була ғорур.
Кем уларҙың хәлен аңлап,
Яйына ғына торор?

Шағирҙарҙа күңелдәр киң,
Ғәфү итә бөтәһен.
Үҙҙәрен тик һаҡлай белмәй,
Белмәйҙәр ни көтәһен.
Шағирҙарҙы аҡыл түгел,
Етәкләй хис, тойғолар.
Уларҙы бәхет иш итмәй,
Яҡын күрә ҡайғылар.
Шағирҙарҙың алтыны юҡ,
Юҡ нәфсеһе, башҡаһы.
Әммә улар — сикһеҙ байҙар:
Улар — Йыһан батшаһы!
Шағирҙарҙың дошманы күп,
Дуҫтары була һирәк.
Үҙҙәре яңғыҙ ҡалһа ла,
Башҡаға улар терәк.
Шағирҙар көлөп йәшәйҙәр,
Ут йотһа ла эсенән.
Тик көлмәгеҙ шағирҙарҙан,
Шағирҙарҙың хисенән.

## ТӨНДӨ МАҠТАУ

Йәнә төн, төн етә! Тормош китә,
Мин яңынан — яңғыҙ хыялый.
Шатлығымдан шашып тибә йөрәк,
Хыялдарым кемдәр тыя алыр?!
Үткән ғүмер — бары бер төш кенә,
Ә киләсәк шаян күҙ ҡыҫа.

Күкте иңләп бәхет осоп йөрөй,
Һәм билдәһеҙ йәндәр һүҙ ҡуша.
Һүҙ ҡушалар миңә боронғонан,
Улар менән китәм яуҙарға.
Үлсәм юҡҡа сыҡҡан. Гүйә, кемдер
Ер күсәрен кире ауҙарған.
Киләсәгем менән үткән көндәр
Ошо төндә, гүйә, ҡауыша.
Мин ҡабаттан ҡайтам малайлыҡҡа,
Кинәт йәшем йөҙҙән ауыша.
Ауышамын берсә нурлы илгә,
Берсә баҫа һағыш, ғазаптар.
Төн ҡашында таша күпме һорау!
Күпме һорауҙарға яуап бар!
Яуап тотмайым мин һис берәүгә,
Мин азатмын, азат төндәрҙә!
Ары торһон йоҡлар йоҡоларым,
Йылы юрған, йомшаҡ мендәрҙәр!
Үтә төнөм, оса хыялдарым —
Мин тормошҡа ҡабат ҡайтамын.
Ҡыҙын көткән йәш егеттәй көтәм
Төн пәрҙәһе ерҙе япҡанын.

## БЕР ИЛАРҒА ИНЕ

Их, ҡысҡырып бер иларға ине
Әсәйемдең ятып ҡулына.
Ул йөрәге менән аңлар ине —
Ниндәй ҡайғы төшкән улына.

Илап булмай,
Йылға ташы һымаҡ,
Юшҡындарҙан күнел ҡатҡанға.
Йыйнай алмай оҙон уйҙарымды,
Уяу ятам таңдар атҡанда.
Йөрәк тырнап торған шиктәремде,
Һағыштарым кемгә һөйләйем?
Тамырҙарға ҡаным һыймағанда,
Ҡайһы көйҙө икән көйләйем?
Дуҫ-иш яҡын — донъя малы барҙа,
Һибелә икән ҡайғы килгәндә.
Кем күрһәтер йырып сығыр юлды —
Шик-шөбһәле һаҙлыҡ тирәмдә.
Әсәкәйем минең, берҙән-берем,
Алтындарҙан алтын әсәйем,
Ниңә шундай хисле йөрәк бирҙең —
Моң-һағыштарымдан сәсәйем!
Их, ҡысҡырып бер иларға ине
Әсәйемдең ятып ҡулына.
Ул йөрәге менән аңлар ине —
Ниндәй ҡайғы төшкән улына.

* * *

Яр ситендә — ҡая ташта үҫкән
Ҡарағайға кем һуң һоҡланмаҫ!
Шунда үрләп, ошо баһадирға
Һөйәлергә кем һуң уҡталмаҫ!

Мәңге торор төçлө ғорур ағас,
Күкрәк киреп һәммә тарафҡа.
Атмаç кеүек йәшен, теймәç балта —
Шулай һымаҡ тәүге ҡарашҡа...
Йәшен атмаһа ла, елдәр уның
Һут-елеген көн-төн һуралар.
Балта теймәһә лә, тамырҙарын
Әкрен-әкрен ямғыр йыуа ла!..
Яҡын дуçы — ярһыу йылғаһы ла
Ярын ашай, өңөп, яҙ һайын.
Фани донъяларҙа кемдәр белһен
Кемгә, нигә нимә яҙғанын.
Бер мәл гөрçләп ауыр был ҡарағай —
Ниңә әле алдан юрайым?!
Йәлләп уны, бәрә-бәрә башты,
Төптәрендә, гүйә, илайым...

## ҠАБЫРҒАЙ ШИШМӘҺЕ

Ҡабырғай ҙа тауҙы ҡабырғалап
Килеп ингән саҡта ауылға,
Көтөп тора теш сатнатыр шишмә —
Гүйә, үҙе аға ауыҙға.
Ҡәҙерле ул: яҡын ҡунаҡ итеп
Һәр юлсыны ҡаршы алғанға,
Бала саҡтың һүнмәç хәтирәһе
Шишмә буйҙарында ҡалғанға.

Ҡабырғайтау битен ҡабырғалап
Ауылыма ҡайттым тағы ла.
...Һалҡын шишмә саңлы устарыма
Ҡайнар күҙ йәш булып яғыла.

## ДУҪЛЫҠ ХАҠЫНДА

*Риф Ғәбитовҡа*

Бокал тотоп,
Һөйләп матур һүҙҙәр,
Танышманыҡ өҫтәл артында.
Ҡул да бирешмәнек, анттар итеп
Ташламаҫҡа ауыр сағында.
Беҙ малайҙар инек. Күңелдәр ҙә
Тулы ине хыял-өмөткә.
Тормош даръяһында ҡайнай-ҡайнай,
Күп һынауҙар төштө өлөшкә.
Яҙмыш ҡаяһына хыялдарҙың
Һуғылғаны булды күп тапҡыр.
Хаталарҙан шул саҡ араларға
Бер-беребеҙ өсөн көс таптыҡ.
Йылдар уҙған һайын дуҫтар кәмей —
Яңыларын ҡайҙан алаһың?
Шуға хәҙер дуҫлыҡ ҡәҙерлерәк,
Артығыраҡ уның баһаһы.

## ҒҮМЕР ЯҘЫ

Ҡарлы марттан ҡапыл юлыҡтым мин
Йәшел донъя, сәскә иленә.
Атлап барам ожмах һуҡмағынан,
Битте ҡуйып диңгеҙ еленә.
Көньяҡ яҙы тулҡын булып ҡаға,
Аҡсарлаҡтар булып кәйелә,
Гөл еҫтәре менән хисләндерә,
Йәшел балаҫ булып йәйелә.
Уралымда әле — аҡман-тоҡман,
Ә Кавказда күптән май еткән.
Самолетта осҡан сәғәттәрҙә,
Әйтерһең дә, нисә ай үткән.
Ҡайтҡас, үҙ яғымда ҡаршы алыр,
Бөрөләрен асып, ҡайындар.
Туң ҡыртышын тишеп, яҙғы гөлдәр
Биҙәктәргә ерҙе ҡайырҙар.
Яҙҙарымдың оҙон булыуына,
Эй, ҡыуанам быйыл, ҡыуанам.
Йәшлекте лә оҙонайтмаҡ итеп,
Хыялдарға сумып йыуанам.
Мөмкин икән,
Мөмкин мөғжизәләр —
Арттырыуы миҙгел наҙҙарын.
...Ерҙең яҙын күпме оҙайтһаң да,
Оҙонаймай ғүмер яҙҙары.

## ТУЛҠЫНДАР

Диңгеҙ тулҡындары юлаҡ-юлаҡ,
Төрлө төҫтәр һеңгән уларға.
Тәбиғәттең ярһыу бер балаһы —
Тотонор ҙа кеүек дуларға.
Тормош тулҡындары юлаҡ-юлаҡ,
Төрлө мәлдәр ингән уларға.
Диңгеҙ генә мәңгелеккә шаулай —
Беҙҙең ғүмер тора уҙарға.

## ЭСКЕСЕ ҠАТЫН

Бик йыш күрәм вокзал тирәһендә
Эскегә баш һалған ҡатынды.
Нимә эшләп шундай көнгә төштөң?
Күңелеңде нимә ҡатырҙы?
Ҡатыландың мәллә, һөйөүеңә
Яуап тапмай ғәмһеҙ күҙҙәрҙән?
Яҙмышыңды, ҡуйсы, һорашмайым —
Ниндәй йылы хәҙер һүҙҙәрҙән?
Һүҙҙәр, һүҙҙәр... Әллә түҙмәйенсә
Йылан ағыуындай ғәйбәткә,
Әрнеүҙәрең шарап менән баҫып,
Өйрәндеңме яман ғәҙәткә?
Ғәҙәтеңдең төбө башҡалалыр:
Тыя алмай аҙғын хистәрең,
Кейемеңдәй күреп, «мөхәббәт»те

Алмаштырҙың мәллә кис һайын?
Кистәр һайын, бәлки, бешергәндер
Ҡулдарыңды еңел аҡсалар?
Намыҫына көс килгәндә, күптәр
Араҡыға инеп ҡасалар.
Ҡасып ҡына ҡотолоуы ҡыйын,
Ҡара ҡайғы килһә башыңа.
Яҡын кешеләрең юғалтыуҙан
Ҡалғанһыңдыр шундай шаҡшыға?..
Ҡалғанһыңдыр, ахыры, мәхрүм булып
Һин әсәлек тигән бәхеттән?..
Маңлайыңа Әжәл мөһөр баҫҡан —
Көтә һине фәҡәт ләхеттәр.
Көтә һине һуңғы сәғәттәрең,
Һуңғы йотом шарап — шешәндә.
Тот бишлекте! Һине йыуатырға
Бүтән аҡса ла юҡ кеҫәмдә...

## КЕШЕ ҒҮМЕРҘӘРЕ

Нимәгә тиң әҙәм ғүмерҙәре:
Дөрләп янған ҡыҙыу утҡамы,
Тулҡынына ярһыу йылғаларҙың?
Нимә икән тормош тотҡаһы?
Оҡшаталар әҙәм ғүмерҙәрен
Бөрөләнеп сыҡҡан япраҡҡа:
Йәшеллеге һүнеп өҙөлөп төшкәс,
Әйләнә бит ул да тупраҡҡа.
Бер ҡараһаң, ғүмер — ҙур йыһанда

Баҙлап һүнгән йондоҙ шикелле.
Йәшәүҙәрең — бары бер мәл генә,
Эҙең ҡалыуҙары икеле.
Вулкан төҫлө шашып янырға ла
Тау йылғаһы кеүек ташырға;
Атылырға сағыу йондоҙ булып —
Мәңгелеккә, күккә ашырға!
Тупраҡ булып ерҙе ҡосҡансы,
Йыһанда саң булып осһамсы!

## ДИНИС УРАМЫ

*Сибай ҡалаһында яңы урамға*
*Динис Буләков исеме бирелеү айҡанлы*

Аҡманай күл буйы хозур ине
Йорт-баҡсалар ҡороп йәйләргә.
Динис атлы ир-уҙаман шунда
Сығыр ине атың бәйләргә.

Йөҙө ихлас, урамы киң булғас,
Бик күп дуҫтар унан үттеләр.
Ҡай бер иманһыҙҙар йәш үләндәй
Күңелкәйен тапап киттеләр.

Ҡыйғыр бөркөт ғорурлығы менән
Киләсәккә сая атланы.
Яҡын күрҙе бары ғәҙеллекте
Һәм саф намыҫ булды ҡалҡаны.

Арыçландың ярһыу арыçланы —
Булды аçыл йәндәр затынан.
Айҙай балҡып, килеп сығыр төçлө
Үҙе атлы урам сатынан...

## ЯҘЫЛМАЙ ҠАЛҒАН ШИҒЫР ХАҠЫНДА ШИҒЫР

Күпме йырым, бөрөләнгән көйө,
Төшмәйенсә ҡалды ҡағыҙға.
Һәр береһе йөрәк иттәремә
Ҡан-йәш, рәнйеү булып яҙылған.
Бер өлөшө — дача баҡсаһында:
Күршеләрҙән йортом кәм түгел.
Юҡ, кәм түгел мунса, ҡоҙоғо ла...
Яҙылманы шиғыр — кәм күңел.
Шиғыр яҙып ҡына тамаҡ туймай —
Бил бөгәмен тамаҡ хаҡына.
Һүнеп ҡала һибеләһе һүҙҙәр —
Ығы-зығы тағы табыла.
Буш шешәлә ята ҡайһы шиғыр,
Еңел-елпе кәйеф-сафала.
Һис файҙаһыҙ хаҡлыҡ даулауҙарҙа
Бөрөләнгән хистәр тапала.
Донъя, тиеп — күпме йырҙарымды
Яҙмайынса ҡулым тыямын.
Әйтерһең дә, әсә ҡарынында
Сабыйҙарҙың йәнен ҡыямын.

* * *

Шарап баҫмай, төтөн алмай,
Ахры, һағышты.
Үткән — ҡалмай. Белеп булмай
Алғы яңылышты.
Яҙмыш шаша, бәхет ҡаса —
Ниндәй гонаһым?
Шат йыр көтәм, ярһып бөтәм —
Ниңә гел аһым?!
Шарап баҫмай, төтөн алмай
Йәндең аҙабын.
Хата аша, яза аша —
Өмөт яҙамын.

* * *

Дуҫмын, тинең, әй, ихлас йән, күңел булды:
Моңдарыңдан рухыма бер үҙлек тулды.
Йәнтәслимләп вәғәҙә-һүҙҙәр биргәйнең дә —
Йөрәктәге бар ышаныс, өмөт һүнде.
Ирмен тигән ир-егеттәр — һүҙем хаҡтыр —
Һүҙен әйтһә, өҙөп әйтер — донъя балҡыр.
Тик бер генә юҡта ҡалһа әйткән антың,
Алтын инде алтын түгел: ялтыр баҡыр.
Дуҫмын, тимен: әй, шағирҙа юҡтыр үпкә,
Ә шулай ҙа моңһоулығым юҡтыр тиккә;
Бер бирелеп юҡ ләззәткә, һүҙең боҙҙоң —
Йөрәгемде һинең өсөн һалдым биккә.

Дуҫмын, тимәм ҡурҡаҡтарҙы, һүҙ юҡтарҙы;
Ҡылығың бит, һүҙҙе түгел, йән аҡтарҙы.
Шағир тигән изге йәнде хилаф ҡуйып,
Дуҫлыҡ йәмен, йәнен быраҡтырҙың.

## ОНОТОЛА...

Ҡаланың көн-төн шау-шыуынан
Ҡылған сыңы онотола.
«Видик»тар сәскән зау-зыуынан
Былбыл моңо онотола.
Ҡая-таш кеүек йорттарында
Тауҙар төҫө онотола.
Һөрөм-газ йоҡкас урттарыңа,
Таңдар еҫе онотола.
Ағыулы һыуға күнегелгәс,
Шишмә тәме онотола.
Төнөн дә утҡа өйрәнелгәс,
Шәмдең йәме онотола.
Аяҡтар ташта таҡылдайҙар —
Йәш үләндәр онотола.
Бөгөнгө менән ҡаңғыралар,
Ә үткәндәр онотола.
«Онотмам!» тигән ант һүҙҙәре,
Бында килгәс, — онотола.
Һығылып сыҡҡан йәш күҙҙәге
«Тама» тигәс, ул йотола.
Ауылдан аҡҡан аҡ балалар

Ҡалаларҙа онотола.
Үҫтергән-тапҡан сал далалар
Онотола...
Ут йотола!

## ДОНЪЯЛЫҠ

Һаҡламағыҙ мине,
туғандарым,
Ҡурсыламағыҙсы,
яҡындар:
Мин тыуғанмын
тик бер балҡыр өсөн,
Мин тыуғанмын
уттан, ялҡындан!
Тормоштағы барлыҡ
ығы-зығы —
Ул минеке түгел,
һеҙҙеке.
...Сикһеҙ күккә күпме
ынтылһаҡ та,
Беҙ барыбер бары
Ерҙеке.
Ут-ялҡыным,
янар вулкан төҫлө,
Ҡапыл һүнер, ҡапыл
тонсоғор.
Тик Ерҙәге һәр кем
йөрәгенә

Тейеп ҡалһа икән
осҡоно:
Донъя — фани, донъя
икһеҙ-сикһеҙ,
Беҙ — бер мәле генә
Йыһандың.
Онотмайыҡ шуға
үткәндәрҙе,
Ҡәҙерләйек шуға
бөгөнгөнө —
Тик бер бөртөк саңын
туҙандың.

## ӘРӘМ ТҮГЕЛ

Хан һарайы һиңә һалалманым,
Ҡайтартманым аҫыл келәмдәр.
Ә йондоҙҙар тиреп бирер инем,
Ҡәҙеремде әгәр белгәндә.
Ҡәҙерһеҙ бер бәндә күрҙең мине —
Малтабар ир генә сыҡманы.
Күпме йырҙар яҙҙым һиңә арнап —
Шиғыр сире барыбер йоҡманы.
Йоҡманы һәм миңә һинең сырхау:
«Фәләндәр бит алған төгәнде».
Һиҙҙең микән шул һүҙҙәрең менән
Йөрәгемде йөҙгә телгәнде.
Шиғриәткә мин үрелеп үҫкән,
Тамырымды киҫмә — үтенес.

Бергә үткән йылдар әрәм түгел,
Һөйөүебеҙ үлде — үкенес.

## МИҘГЕЛДӘР

Ашмай ҡалған алтын өмөт төҫлө,
Берәм-берәм төшә япраҡтар.
Һап-һарынан торған шул көҙләктә
Яҙҙар белмәҫ ғәжәп яңғыраҡ бар.
Яҙҙа сәскән орлоҡтарҙан инде
Йыйылаһы уңыш йыйылған.
Тыйылаһы хистәр тыйылғандар —
Ҡурпы ғына шытыр быйылға.
Быйылдан да ҡалмай, ҡурпыларға
Алдағы йыл ҡары һибелер.
Ә ул инде ирер килер яҙҙа,
Беҙҙең яҙҙа түгел — һиҙелер.
Һиҙҙермәй ҙә ғүмер үтә икән,
Үтә икән яҙҙар, көҙҙәре.
Алтын һүҙем һиңә әйтелмәне —
Аҡ ҡар ябыр минең күҙҙәрҙе.

## ҺАУМЫ, ТОРМОШ!

Мине әле исемлектән
Һыҙманыңмы, тормош?
Ҡабат ҡайттым, өҙҙөрөп тә
Һайрағанға бер ҡош!

Йырғанаҡтар ерҙең өҫтөн
Шундай таҙа йыуҙы!
Күңелемдән шик-ғазапты
Бергә шыпа ҡыуҙы.
Яҙ ҡошоноң таңғы йыры —
Йөрәгемә сихәт.
Мин ҡабаттан һиңә ғашиҡ,
Фани донъя, ни хәл?!
Мин яңынан тыуҙым төҫлө —
Һаумы, һаумы, тормош!
Һайрар ҡоштар,
Килер яҙҙар,
Алыр наҙҙар,
Һөйөр ҡыҙҙар өсөн
Мин йәшәргә тейеш!!!

## ХУШЛАШЫУ ЙЫРЫ

Хушығыҙ, быйылғы хәсрәттәр,
Алда бит шатлыҡлы йыр көтә.
Сигенә иң һуңғы сәғәттәр —
Тағы бер өр-яңы йыл етә.
Хушығыҙ, быйылғы болоттар,
Иртәгә ап-аяҙ көн килә.
Йүгерә иң һуңғы минуттар —
Ергә бит өр-яңы йыл елә.
Хушығыҙ, быйылғы сир-йоттар —
Сәғәттең телдәре шыуыша.
Елгәндә иң һуңғы секундтар,
Үткән һәм киләсәк ҡауыша.

* * *

Иң ышаныр дуҫтарға ла донъя
Инде ышанмаҫҡа өйрәтте.
Ваҡыт-ваҡыт тәртә һындырһа ла,
Мин теҙгендә тотам йөрәкте.
Үкһеп-үкһеп йәне илағанда —
Сыңғырлатып шулай көләргә
Тик шағирҙың, ахыры, көсө етә.
Ә тормошто, бына, белергә...
Эй сабый йән, эй һин, сабый йөрәк!
Телгеләнгәндең икән күпмегә?!
Юҡ, хыянат итмә ул сафлыҡҡа,
Үткәнгә лә, юҡ-юҡ, үкенмә!
...Шул йөрәкте бәйләп тотҡанғалыр,
Бөтмәйем дә, буғай, асылып.
Күсеп киткәс бүтән донъяларға,
Бер асылыр минең асылым.

## БӘНДӘ ТЫУА...

Бәндә тыуа фани был донъяға
Ирекле йән булып — бер тапҡыр.
Күпме әүрәткестәр көтә уны,
Күпме ләззәт көтә — гел ялтыр.
Тик бәндәне көтә күберәген
Тыйыуҙар һәм көн-төн һынауҙар,
Кешелектең тапҡан ҡанундары;
Иртә-кисен көтә — һорауҙар.

Мәңге бөтмәҫ үтеп кәртәләрҙе,
Бәндә бара ғүмер юлынан
Һәм кисергән барлыҡ михнәттәрҙе
Васыятлай ҡыҙы, улына.
Яңы быуын башлай өр-яңынан...
Шул ҡанунлыҡ — мәңге әйләнеш.
Быуаттарҙы теҙә быуаттарға,
Йәнде йәнгә — ошо бәйләнеш.
Тағы кеше тыуҙы.
Уның өсөн
Теҙелешкән ләззәт, аҙаптар.
Йәшәйештең эҙләп мәғәнәһен,
Мейе сүкеп бер уй ғазаплай:
Бәндәң ғүмерҙәрен, эй Хоҙайым,
Шатлыҡтарға төбәп ҡорһаңсы,
Тыуымынан һуңғы юлынаса
Яңылыштарҙан ҡурсып торһаңсы.

## ТӨШ КҮРГӘС

*Рәмил Ҡол-Дәүләт иҫтәлегенә*

Әсәй, мине шундай һағындыңмы?
Көн дә төштәремә керәһең.
Әрнеүҙәрем һиңә тынғы бирмәй
Бәхетлелектә, хатта, күрәһең.
Әсәй, мине улай йәлләмә һин:
Фани донъя күберәк — ғазаплы;
Хаталарым, гонаһтарым өсөн

Тик мин үҙем,
Үҙем яуаплы!
Әсәй, мине бала күрмә инде —
Ир уртаһы кеше мин хәҙер.
Бәхетле мәл, шат сағым да була —
Тормош түгел дәһә гел йәбер!
Әсәй, мине хафаларға һалма:
Рәнйеттемме элек ҡапылдан?!
Мин әҙермен, һорап кисереүҙәр,
Теҙләнергә рухың алдында!
Әсәй, мине төшләп ҡурҡытмасы!
Һин күренһәң, бер уй яфалар:
Ныҡ һағынһа, имеш, мәрхүмәләр
Балаларын янға алалар...
Шуға, имеш, хәйер һалалар
Ер өҫтөндә ҡалған балалар...

## ЯҠЫНДАРҒА

Тик изгелек миңә теләйһегеҙ,
Барлыҡ ыҙғыш-талаш шуғасы!
Йәнем әрней: ҡыйын мәлдәремдә,
Йә, берегеҙ серҙәш булһасы!?
Һәйбәт саҡта — дуҫ табыуы еңел,
Ул саҡта мин һеҙгә — фәрештә.
Шайтан булам: йәнем йәм тапмайса,
Моңһоулыҡҡа, зарға керешһәм.
Рәнйеп үҫтем — хаҡлыҡ тапмайынса,
Күңел һыҙлай: һаман донъяла

Өҫкә сыға алдаҡ менән мәкер.
Шуға йөрәк ҡанға тоҙ һала.
Шуға ғына ҡапыл тоҡанам мин.
Ауырлығы кемгә?
Яҡынға!
Ул ваҡытта йәнем генә түгел —
Аҡылым да була ялҡында!?
Тик изгелек һеҙгә теләйем мин,
Ғәфү һорау ауыр — шуғалыр.
Йәнем әсей: юҡтан ярһыуҙарым
Үҙем менән генә юғалыр...

## ЯҠТЫКҮЛГӘ МӘҘХИӘ

Яҡтыкүлем — яҡты өйөм минең,
Һин — наҙҙарым, татлы ғазабым.
Һиндә генә мин бер азат йәнмен,
Күңел тыныслығы табамын.
Өмөт тулы бында — иртәләрем,
Нурлы һағыш тулы — кистәрем.
Йәнем күккә осоп киткәнгәсә,
Илһам илем, тиеп иҫләрмен.
Мосолмандың Мәккәһеләй күреп,
Яҡтыкүлем, һиңә табынам.
Йәшлегемә ҡайтам бында ғына,
Асылыма ҡайтам яңынан.
Шиктәремдән шыпа таҙарынам,
Йөрәккенәм шундай сафлана.
Олимп тауындағы факел төҫлө,
Һөйөү утым һиндә һаҡлана.

## ҮКЕНЕСКӘ САЛАУАТ

Терһәк тешләп үкенерҙәй мәлдә
Мин күтәреп кәпәс ормамын.
Ерҙәр тырнап үкерерҙәй мәлдә
Күҙем йәшкәҙәтеп тормамын.
Булды, булды — тулы үкенестәр,
Йөрәк өҙгөләнер хаталар.
Минең менән улар иртән тора,
Бер мендәргә кисен яталар.
Ғәйепләмәм, хатта, ғәйептәре
Баштан ашҡан әҙәм заттарын.
Донъялыҡта яҙған минуттарҙың
Үпкәләргә әрәм саҡтары.
Хаталарҙан мине араларға
Мин үҙем дә, йәнә Хоҙай бар.
Ярылырға йөрәк етешһә лә,
Ирмен тигән ирҙәр сыҙайҙар.
Үкенесле, әммә сәмле һабаҡ —
Аманаты ҡала үткәндең;
Аҡ монары ҡала — хыялымдың,
Ап-аҡ көлө — аҙап көткәндең.
Йән үртәгес эсе үкенестәр
Юл сатында ятһын аҙашып.
Киләсәктең өмөт йәйғорона
Күҙем түгел, йәнем ҡамашыр.

* * *

Бүтән хурлап бер ауыҙ ҙа
Һүҙ әйтмәнем.
Һиҙмәй ҡалдым үҙ башыма
Һүҙ еткәнен.
Хаслыҡ уйлап, этлек ҡылмам
Һис бирәүгә.
Үҙ яҙмышым тороп ҡалған
Мәкер, хәйлә, алдаҡ тигән
Өс терәүгә.
Теләмәнем, ҡайғы-хәсрәт
Үҙе тапты.
Тоҙағына яуыздарҙың
Килеп ҡаптым.
Ғәйбәте лә, мәкере лә
Арттан ҡалмай.
Бәхет, һөйөү, дуҫ эҙләйем —
Юҡ, табылмай.

## АЙ ҺӘМ ЙОНДОҘ

Нисә аҙна айҙы күрмәгәнгә,
Нисәмә төн күктә ҡараңғы.
Ул да, ахыры, ситкә сығып киткән —
Таң йондоҙо наҙға һарандыр.
Нисәмә төн күктә ҡараңғы.
Айҙы эҙләп йөрөп ҡайтам әле,
Бер йыуатам әле, табылһа.

Бик ҡыйын ул наҙһыҙ йәшәүҙәре,
Бик ҡыйын ул — һағыш яғылһа.
Ҡыйын, йондоҙҙарға табынһаң.

## ШУЛ БУЛДЫМЫ?

Үҙем юраған яңғыҙлыҡ
Килеүе шул булдымы?!
Ап-аҡ күңелгә, артылып,
Шөбһә һәм шик тулдымы?!
Япа-яңғыҙым сит яҡта
Ҡалдым һис бер терәкһеҙ.
Ҡайҙа яндырғыс хистәрем?
Күңел буп-буш, теләкһеҙ.
Әллә йәнемде әйҙәнем
Зиндандай таш бүлмәгә?!
Йәнә йөрәгем елкенә —
Алда ниҙәр күрмәгә?..

## АРЫНЫМ...

Арыным мин. Өмөт өҙөләүҙән,
Хыял юғалтыуҙан арыным.
Сирле — тәнем. Йәнем — бигерәк тә.
Ос-ҡырыйһыҙ сүлгә тарыным.
Кешеләр ҙә, гүйә, унда юҡтар,
Тик шакалдар йөрөй теш шаҡып.
Саҡ-саҡ барам, һөйрәп көндәремде, —

Хәйер, шулай ауа эш аты.
Ынтылышлы саҡтар бар ине бит...
Ҡартайҙымы икән күңелем?
Их, кипмәгән булһа йөрәк йәшем! —
Аунап илар инем, түгелеп.
Халыҡ өсөн йәнем фиҙа, тиеп
Алдашмайым: юлын белмәйем.
Ә шулай ҙа алғы быуаттарҙа
Аҡ көндәр тик уға теләйем.
Яңы быуын тыуыр киләсәктә,
Юл-маҡсатты улар белерҙәр;
Ҡараңғы сүл аша бер саҡ үткән
Яңғыҙ юлаусынан көлөрҙәр.
Ҡаңғырған баш, һүнгән күңел менән
Киләм төҫлө сикһеҙ юл буйлап.
Оло маҡсат менән оло һөйөү
Мәңгелектә ҡалды ҡул булғап...

## УЛ САҠ, БЫЛ САҠ

Бала саҡ донъяһы
Хәтерҙә, хәтерҙә...
Ҡайтырға әҙермен
Мин уға хәҙерҙән.
Ул саҡтың сафлығы
Юғалған, юғалған...
Иң изге хыялдар
Йылдарҙан туралған.
Ул саҡта хөр күңел —

Бығауҙа, бығауҙа...
Ни файҙа яҙмышҡа
Үҙгәреш юрауҙан?!
Оло саҡ донъяһы
Ҡапланы ул саҡты...
Эстәге һағыштан
Намыҫҡа ут ҡапты.

## ҠАЙЫНЛЫҠ

Мин тотҡанмын һине иңеңдән,
Һин тотҡанһың мине билемдән.
Ҡайынлыҡҡа илтә юлыбыҙ,
Береккәндәр ике ҡулыбыҙ.
Көнләшәләр беҙгә ай ғына.
Беҙ барабыҙ ерҙән яй ғына.
Һин минеке генә, минеке!
Мин һинеке генә, һинеке!
...Йылдар ҡалай бик тиҙ үткәндәр.
Ҡайынлыҡта инде — бүтәндәр.
Беҙ булһаҡсы унда хәҙер ҙә...
Ә ятырбыҙ һалҡын ҡәберҙә.

## ИКЕ ИКЕҢ

Ике ерҙә ике туй шаулатып,
Ике дуҫ өйләнде — ике пар.
Йәнәш кенә ике өй һалынды,
Кәртә-ҡура. Һыйыр икешәр.

Икешәр ул тапты ике килен,
Икешәр ҡыҙ йортта иланы.
Ике икең — дүртме?! Ике ир
Боҙа алмаҫ инде йоланы:
Тәүге ике шатлыҡ килгәнендә
«Икешәр йөҙ» генә ҡаптылар,
«Ике икең — дүрт», — тип әйтергә
Ике тапҡыр һылтау таптылар.
Ҡыҙлы булыу нескә эш икәнен
Тиҙ аңланы ике ир-егет.
Икешәре ике «ярты» алғас,
Һелтәнеләр типә-тиң итеп.
Ике ҡатын, ике аҫыл ирҙән
Яуып торғас маҡтау һүҙҙәре,
Берен-бере ҡыҫтап, ике тапҡыр
Ирҙәр менән бокал түңкәрҙе.
Ике өй ҙә шул ике арала
Ике быуа ҡунаҡ һыйланы.
Тағы саҡырҙылар ике ҡабат,
Ике тиҫтә шешә — ҡуйғаны.
...Ике аршын һүҙҙәр теҙеү артыҡ:
Ике икең барыбер дүрт була.
Ике йомарт ир һәм ике ҡатын
Ике йыл гөрләйҙәр. Йорт туҙа.
Ике баш та ике муйын ғына
Күҙен ала алмай аҡбаштан.
Үгеҙ үлһә: «Ит!» — тип шатланалар,
Ҡайғы йыуа — себеш аҙашһа.
Йәнә ике йылдан ике йорттоң
Төтәмәне ике мөрйәһе.

Ике ирҙең бере һыуға батты,
Икенсеһе утта көйрәне.
Ике килен — ике килендәш тә...
Уларға һуң әле нисә йәш?
Бере хәҙер «Һары йорт»та ятһа,
Таш зинданда бере кисә йәш.
Ике икең... Дүрт ҡыҙ дүрт тарафта,
Ике икең... Ҡайҙа дүрт малай?
Берәү аҫылынған. Берәү эсә.
Кеме алйот. Буры йорт талай.
Ике мөхәббәттән — ике ус көл.
Ике һөйөү була икесә.
Ике икең нисәү икәнлеген
Ике һөйләү артыҡ, минеңсә.

## КӘБӘН ОСЛАУ

Ҡойоусыһы ниндәй булғанда ла,
Кәбән бер саҡ барыбер осланыр.
Күкрәкләгән мәлдә кәбәнемде
Уйҙарымдың юйҙым остарын.
Йәшәгәнем хаҡмы, хата микән —
Көс килмәне эммә намыҫҡа.
Шәфҡәтле һәм ғорур, ихлас булдым —
Билдәм буйынса мин арыҫлан.
Халҡым заңы гелән — күкрәгемдә,
Илдең ғәме алдан йөрөнө.
Һүҙем менән телде ҡурсаланым,
Именлеген — башҡорт еренең.

Атам-әсәм — изге йәндәр миңә,
Улар фатихаһы иң өҫтә.
Мәкер, ялған менән яғалаштым
Һәм табындым сафҡа, дөрөҫкә.
Үргә һелтәр күбәләрем байтаҡ,
Яҙа баҫып ҡына осмаһам.
Үкенескә ҡалмаҫ —
Кәбәнемде
Мин мөхәббәт менән ослаһам!

* * *

Киләсәккә башым ынтылһа ла,
Аяҡтарым ята үткәндә.
Аҡ хыялдар алда көтһә мине,
Һары һағыш эҙгә түккәндәр.
Ә ҡулдарым ҡосҡан бөгөнгөнө,
Бәхет кенә услап алһасы!
Был көнөмдән алғы бөгөнгөмә
Аҡ шатлыҡтар ғына барһасы!

## ...ТИМӘЙБЕҘ...

Әй кешеләр, мәңге килгән кеүек
Ошо гүзәл фани донъяға,
Сәсрәп китеп донъя ҡыуаһығыҙ.
Туҡтағыҙсы эҙгә булһа ла.

Һәм уйлағыҙ: бөйөк Мәңгелектә
Нимә генә кеше ғүмере?!
Ошо ғына мәлдә күпме ыҙғыш, —
Ай-һай, нескә бәндә түҙеме.
Һоҡланаһы сакта Ай, Ҡояшҡа,
Ер аҡтарып алтын эҙләйбеҙ.
Башҡаларҙан үткән ғүмеркәйҙәр
Беҙҙән дә бит үтер, тимәйбеҙ.
Күрше менән күрше үсләшәләр,
Бер ил менән бер ил һуғыша.
Бәндә ғүмерҙәрен ҡыйыр өсөн
Ҡорал менән ҡорал уҙыша.
Мин китермен бер саҡ. Һин үтерһең.
Фани донъя мәңге! — үҙгәрмәҫ.
Тик үҙенең яҡты ҡосағына
Беҙҙе инде ҡабат үткәрмәҫ...

## ШУНДАЙ ТОРМОШ

Үҙен даһи тойған һәр шағирҙай,
Һәр бер бәндә эстән — фәрештә.
Ҡылғанына һәр саҡ һылтау эҙләр,
Хатта, гонаһ ҡылған килеш тә.
Зина ҡылһа — ире эшкинмәгән,
Ҡатын насар — «һул»ға сапһалар.
Урлашыу ул беҙҙә — «алыу» ғына,
Ғәйебе юҡ, хатта, «ҡапһа» ла.
Һуғыш ҡупһа, ғәйеп — теге яҡта,

Ә был яҡтан — изге һуғыш ул.
Берәү ҡара янған оло бәлә —
Икенсеһе өсөн уңыш ул.
Һәр бер бәндә эстән — фәрештә.
Шундай тормош беҙгә килешкән.

## САБЫРЛЫҠ

Был донъяға, ахыры, әҙәм заты
Көтөр өсөн генә яралған.
Көтә-көтә көтөк булыуҙары
Быуын-быуын беҙгә ялғанған.
Ҡыштар етһә, күңел яҙҙы көтә,
Йәйҙе һағындыра — яҙҙарын.
Теләмәйһең, үҙе көтөп тора
Илаҡ көҙҙөң һалҡын айҙары.
Мөхәббәтле көтә — йылы ҡараш,
Хоҙай түҙем бирһен ғашиҡҡа,
Өмөттәрең селпәрәмә килә,
Һуңға ҡалһаң йәки ашыҡһаң.
Көтә белеү кемгә бәхеттер ул,
Йөрәгеңде ҡыҫып усыңа.
Тик мин быны татый алғаным юҡ —
Әллә ҡайҙа гелән осонам.
Яҙым үтеп, ғүмер йәйе етә,
Булырмы бер көткән сабырлыҡ?
Алмаштырыр инем мөхәббәткә —
Утта янып көлгә ҡалырлыҡ.

## АРАҠЫ ХАҠЫ

Ибраһим улы меҫкен Остап —
Бер миллион аҡса артынан —
Ниндәй ҡиәфәткә кермәгән дә
Күпме Ҡаф тауҙарын артылған!?
Килде заманалар!!!
Аҙым һайын —
Миллион тулы янсыҡ бәндәнең.
Сумаҙанлап аҡса йөрөтһә лә,
Ҡалтыранмай эммә йәндәре.
Шул ун ике ултырғысы өсөн
Шул миллионын әгәр түләһә?!
Аҡылынан яҙыр ине Бендер —
Был көндәрҙе әлдә күрмәгән!
Бахыр Бендер...
Беҙгә тиңме ни ул:
Миллионға беҙ күлдәк алабыҙ!
Меңәрлектән келәм тегәбеҙ беҙ.
Меңәрлектән хәйер һалабыҙ.
Бай булһаҡ та, хәмер бушҡа хәҙер —
Һемерәбеҙ таслап, күнәкләп.
Йырлай-йырлай ғына көн күрәбеҙ —
Шешәләштәр шундай күмәктәр.
Һиллек. Муллыҡ. Тулы — азатлығы.
Һәм араҡы һәр саҡ табыла.
Юлбашсыға рәхмәт ҡыҙыллығы
Беҙҙең танауҙарҙа сағыла.
Партияһыҙ һәм маҡсатһыҙ ғына

Билдәһеҙлеккә беҙ барабыҙ.
Аҡ һарыҡтар — ул инәбеҙ икән,
Аҡ араҡы — бөйөк бабабыҙ.
Ул хәмерҙе бушҡа тараҡансы,
Уйлап бер аҙ үҙенең ҡаҙнаһын,
Хаҡ ҡуйһа ла, алыр инексе беҙ —
Бигерәк йомарт инде батшабыҙ.
Ибраһим улы меҫкен Остап
Белмәгәндер ярлы үләһен...
Улдарыбыҙ миллиардер булыр —
Хәмер хаҡын улар түләһен!?

## ҮРТӘНЕҮ

Йомшарҙы рухым, кәмене дарман,
Көрәшергә лә ҡалманы көсөм.
Тормошҡа рәтһеҙ әҙәмдәй итеп
Тоям үҙемде мин шуның өсөн.
Ныҡыштар яулай үр артынан үр,
Күңелгә ҡыйын тороп ҡалыуы.
Яҙлыҡты юлым, төштө аҫҡа баш —
Юҡ-барҙан әллә арып-талыуым?
Түҙсе, түҙ, йөрәк! Ҡалҡып сығырмын:
Өмөт-хыялдар һүнмәгән әле.
Ғазаплы яна күңел усағым —
Был донъяларҙың бөтмәгән йәме.

## ҠЫШҠЫ ТЫШ

Боҙ ҡоршаған күлдәр, йылғаларҙы —
Балыҡтарға һауа етмәйҙер.
Ойоп ҡына торған ағастарға
Һыҙғырыҡ ел теймәй үтмәйҙер.
Япраҡ урынына ботаҡтарға
Суҡ-суҡ боҙбармаҡтар эленгән.
Бәҫкә батып тора бағаналар —
Гүйә, һыуға барған килендәр.
Йәлләүҙәндер инде: бөтә ерҙе,
Юрған булып, аҡ ҡар ҡаплаған.
Тик шыршылар ғына йәм-йәшелдән —
Йәйҙең төҫөн улар һаҡлаған.
Бар тәбиғәт әле ҡатып ҡалған,
Боҙҙа, гүйә, ерҙең йөрәге.
Был миҙгелдә айлы төндәр матур,
Ҡояштың юҡ төҫлө кәрәге.
Йөрәгемдең боҙға ҡатҡан сағы —
Әллә ҡышта ғына ҡалаһы.
Яҙ яһарлыҡ яҡты ҡояшыма
Бараһы ла әле бараһы.

* * *

Бер һыҙланыу тоймай тәнем —
Һурылған һуттары.
Баҙлап янмай күҙҙәрем дә —
Урланған уттары.

Яурындарым көйәнтәләй —
Гүйә, гер таҡҡандар.
Кисә генә аҡ йөҙөмә
Ер кершән яҡҡандар.
Онотмамын ғүмерҙә лә
Ҡышҡы был кисемде.
Кемдер һығып алған кеүек
Йөрәктән хисемде.

## ИШЕГЕМДЕ АСЫП...

Ишегемде асып сығайымсы,
Яҡты донъяны бер күрәйем.
Вайым ситлегенән сығайымсы —
Үләм икән, һөйөп үләйем.
Шик-шөбһәләр инде тонсоҡтора —
Емерәйем ситлек сиктәрен.
Һылайымсы, һағыш инмәһен тип,
Тишкесләнгән йәнем ектәрен.
Фани ғына бынау донъяларҙың
Ҡәҙерҙәрен белеп ҡалайым.
Һыҡрап торған йөрәк яраһына
Өмөт-хистән ямау һалайым.
Ишегемде асып сығайымсы —
Яҡты донъя күҙем сағылта.
Һине эҙләп юлға сығайымсы —
Өмөт-һөйөү йөрәк ярһыта.

## ҠАСАН?

Һиңә, беләм, минән бәхет кәрәк —
Ябай ғына кеше бәхете.
Мине ымһындыра ижадсының —
Ерҙә? Күктә? — илһам тәхете.
Был тормошта миңә йыр-моң кәрәк,
Һиңә — донъя көтөр ир генә.
Мин икегә инде бүленмәмен.
Һин дә бит йәшәйһең — бер генә.
Күрәһеңдер, көткән бәхетеңде
Сүкеп кенә бирер — мин түгел.
Шағирмынмы икән был донъяла??!
Донъя көтөр әммә ир түгел.
Рәнйетәмдер һине, яҡындарҙы —
Үҙ-үҙемде, хатта, аңламай.
Мин баҫырға итәм хистәремде,
Тик йөрәгем һис бер тыңламай.
Йылдар үтеп, ярһыу күкрәгемә
Ҡартлыҡ ятыр.
Ана шул саҡта
Күңелемдән, бәлки, шиғыр ҡасыр...
Һин булырһың микән ҡосаҡта?!.

## ЙӨРӘГЕМӘ НӘСИХӘТ

Иңрәүҙәрҙән бер туҡтарһың микән,
Эй йөрәгем минең, — буҙ бала?!
Юҡ шатлыҡтан һин осорға әҙер,
Юҡтан ғына енең ҡуҙғала.

Тормоштағы ығы-зығыларға
Төкөрәйек.
Улар үтерҙәр.
Оло ҡайғы күргән һыҙланыуҙар
Яҙғы һыуҙар кеүек китерҙәр.
Нимәнелер бөгөн юғалтһаҡ та,
Нимәнелер иртән табырбыҙ.
Һикәлтәле тормош юлдарынан
Беҙ барыбер
Алға барырбыҙ!
Үткәндәрҙе, әйҙә, онотайыҡ:
Булмағаны инде — булмаған.
Ниәтебеҙ гел кирегә сыҡмаҫ,
Уңмаҫ, тимә, иртән уңмаған.
Ғишыҡ ғазаптары артта ҡалды —
Сикһеҙ татлыларын татырһың.
Күп шашынһаң, мине һөлдә итеп,
Күкрәгемдә үлеп ятырһың.
Был тормоштоң мәкер-ялғандарға
Ҡоролғанын күптән беләбеҙ.
Сәсрәп йығылғанса, уртты сәйнәп,
Әйҙә, йөрәк, алға еләбеҙ!

## БЕЛМӘҪМЕН

Кем мин был донъяла?
Мин нейгә кәрәкмен?
Уйланып шул хаҡта
Һыҙлатам йөрәкте.

Яралтып, Хоҙайым
Мине бик ҙурлаған.
Тимәк, Ул үҙенсә
Нимәлер уйлаған.
Кемдер бит булырға
Мин тейеш булғанмын?!
Яҙмыштан уңдыммы,
Әллә, тим, туңғанмын?
Шәп фекер уяна,
Уйланғас оҙаҡлап:
Мин аша Ул ергә
Изгелек оҙатҡан.
Намыҫ та ҡушҡан Ул,
Ғәрселлек өҫтәгән.
Ниңә мин һағышлы —
Гел бәхет көҫәгән?
Былары — үҙемдән,
Былары — тормоштан.
Ә, бәлки, ниңәлер
Хоҙайым орошҡан?
...Барыбер белмәҫмен
Үҙемдең кемлекте:
Ниңә мин тыуғанмын?
Ник үҫеп етлектем?..

* * *

Хыялымдың ҡанаттары киҫек,
Ҡараланған күңел пәрҙәһе.
Бөгөнгөмдә шатлыҡ урап үтә,
Һағындырмай йәшлек йәрҙәре.

Киләсәгем алға тормай әйҙәп,
Ә үткәнем күпкә йәлкерәк.
Үткән — үткән инде. Кисәгемдән,
Юҡ, бөгөнгө хәлем көлкөрәк.
Киләсәкте аҡыл өнәп бөтмәй,
Бөгөнгөмдө үҙем емерҙем.
Ҡулды һелтәп аҡыл-ырымдарға,
Үткәнемә ҡабат елдерҙем...

* * *

Юҡ, етте! Бөтәһен
Түңкәрә һуғам.
Яҙмышты юлларға
Мин юлға сығам.
Ҡайҙарға тәгәрләр
Йом(о)ро йомғаҡ?
Донъя ул — алдата,
Донъя гел — йомаҡ.
Кәрт һалһын ҡарт әбей:
Бәхеткә булыр.
Йә еңер йөрәгем,
Йә шунда һулыр.
Яҙмыштан уҙмышты —
Тик ятып көтмәм.
Юлдамын ҡабатлап —
Ҡапылдан бөтмәм.

## ЯҘ МЕНӘН КӨҘ

Көҙ хаҡында яҙғаным юҡ,
Яҙам бына.
Тышта — һалҡын, күңелдә — боҙ,
Ыҙа ғына.
Яҙҙы һөйгәс, яҙҙым гелән
Яҙ айында.
Ҡояш булды, һөйөү көлдө
Йырҙарымда.
Шыттылар ҙа, бөрөләнде
Бар тереклек.
Ҡарына ла, һыуына ла
Ер етерлек.
Шатлығынан шашып йырлай
Тәбиғәте.
Сәйер бер сәм солғап алған
Йәмғиәтте.
Йәшем белмәй, йәшнәп торҙом
Мин үҙем дә.
Һөйөү тигән илдең инем
Иң түрендә.
...Көҙҙә көндәр көҙгө кеүек
Һалҡын икән.
Ишек асып, йөрәгемдән
Ялҡын киткән.
Йыл буйына арығанмы —
Ҡояш һүлпән.
Урман, ялан, тау буйҙары
Түгел күркәм.


9 — 711

Дәртем һүнеп, ҡәләм тартмай
Ул йырҙа ла.
Итәм ғәжәп: күҙ һалмайым
Бер ҡыҙға ла.
Аптырайым: ни әйтергә,
Ни уйларға?
Белмәйем шул: ни көлөргә,
Ни иларға?!

## ҮҘЕМӘ

Мин элекке түгел инде хәҙер,
(Ябайлығым, хәйер, бөтмәгән.)
Донъя һынауында уҫалландым —
Әүәлгесә булмам бешмәгән.
Алсаҡлығым, ихлас күңелемде
Күп таланы мәкер, көнсөлдәр.
Мин йәшәрмен үткән алданыуым,
Талғын киләсәгем өсөн дә.
Бер ҡасан да дошман эҙләмәнем,
Үҙҙәре бит килеп таптылар.
Шыҡырыҡлап йөрөп һайыҫҡандай,
Ғәйбәт менән хөсөт яҡтылар.
Мин йылмайҙым һаман кешеләргә,
Айырмайса аҡты, ҡараны.
Таяуҙарым ауғас берәм-берәм,
Ҡараҫҡыға ғына яраным.
Юҡ, юҡ, ышанманым, таҫма телдәр
Башты ашай бит ул, тигәнгә.
Яҡын тейешең дә ситкә типһә,

Әйләнерһең тере үлгәнгә.
Рухым көслө, камил иманым да,
Сығасаҡмын өҫтөн өрәктән.
Күҙҙән түгел, ул саҡ йәшем, бәлки,
Һырҡырап та сығыр йөрәктән.

## БЕР ҠАРАҺАҢ...

Әллә ниндәй булды беҙҙең быуын:
«Алла юҡ!» тип үҫтек кескәйҙән.
Ә үҙебеҙ ҡурҡтыҡ, «Ен-пәрей!» тип,
Күҙе янған ҡара бесәйҙән.
Дәрестәрҙә мулла-мәзиндәргә
Ниндәй генә ләҡәп таҡманыҡ.
Һыҙланғанда «Алла!» тинек әммә,
«Бисмилла»һыҙ тәғәм ҡапманыҡ.
Халыҡ алдаған ул, тиеп, хатта,
Изге Мөхәммәткә яғындыҡ.
Ә үҙебеҙ ябай һары урыҫҡа,
Мәңге тере, тиеп табындыҡ.
Һәр нәмәлә совет кешеһенең
Өҫтөнлөгөн күреп өйрәндек.
Ә барыбер, еткәс тейеш мәле,
Никах уҡыттырып өйләндек.
Әллә ниндәй шуға беҙҙең быуын:
Тамаҡ ас та — эшкә илһам юҡ;
Күктәргә лә инде табынабыҙ,
Мәсет һалып, — әммә иман юҡ.
Бер ҡараһаң, бар ул беҙҙең быуын,
Бер ҡараһаң, килә төҫлө тыуып...

## ИРҘӘРСӘҺӨЙЛӘШЕҮ

Төкөр донъяһына!
Йә, бөтәйтеп,
Береһе уны ҡыуып еткәнме?
Иҫкә алып кемдер, күрер тиңме
Һинең менән минең киткәнде!
Кемгә беҙ кәрәкбеҙ бынау илдә,
Бынауындай ҡара заманда.
Ғүмер буйы Рәсәй —
Рәсәй булған,
Сабаталы ҡалыр һаман да.
Кешегә юҡ ҡәҙер беҙҙең илдә,
Беҙ — икәүһе генә шуларҙың.
Китәйексе алыҫ сәйәхәткә,
Юрап булмаһа ла уңырҙы.
Бында бәхет, ахры,
килмәҫтер, тим, —
Бүтәндекен күреп уҙайыҡ.
Батшаларҙан беҙ һуң кәм түгел дә —
Хәйер һорап ҡулды һуҙайыҡ.
Бөтә ҡитға өсөн ике кеше —
Эҫкерт эсендәге сүп кенә.
Ашау — байҙан, үлем —
Хоҙайҙан, тип
Ер күрербеҙ шуның өҫтөнә.
...Ике ир-азамат төн буйына
Ҡыҙып-ҡыҙып план ҡорҙолар.
Иртәгәһен кухня иҙәненән
Баштар сатнап килеп торҙолар.

* * *

Шиғриәт ул — хыялыйҙар иле,
Айыҡ фекер менән килмәгеҙ.
Тормош үҙе шау хыялдан тора,
Тормош — бәхет кенә, тимәгеҙ.
Әммә бер саҡ, башҡа һуға-һуға,
Хыялдарҙан тормош айыра.
Аңлағанды бай ҙа көслө итә,
Тыңлауһыҙға — ҡанат ҡайыра.
Шиғриәт ул — шул уҡ тормош үҙе:
Аңлағанды илтә шөһрәткә.
Хыялына тоғро байғоштарҙың, —
Уттан — һыуға, һыуҙан утҡа һалып,
Ғазап-хәсрәт тулы тотҡа табып, —
Мейе шөрөптәрен йүнәтә.

## АЙ

Күктә салт аяҙ. Унда — Ай.
Көмөш батмустай тулған Ай.
Ураҡтандар көмөш йондоҙҙар —
Ултырмаға килгән йәш ҡыҙҙар.
Йондоҙҙары иҫәпһеҙ-һанһыҙ,
Үҙҙәре бик шаяндар, иманһыҙ.
Йыһанда берҙән-бер бит ул,
Яратҡаны — беҙҙең Ер бит ул.
Ул мәңге Ерҙе күҙәтә,
Үҙен йондоҙҙар йөҙәтә.

Ярата шул уны бөтәбеҙ,
Мөғжизәләр гелән көтәбеҙ.
Шуға Ай түгел һис кемдеке,
Көмөш Ай — бөтәбеҙҙеке.
Әммә ул Ай — тик минеке,
Уныҡы һәм тик һинеке.
Күктә йөҙә Ай талғын ғына,
Үҙенән илаһи нур ағыла.
Мәңге-мәңге яңғыҙаҡ ул.
Мәңгелектең таңында ул.

## ӘЙТМӘ МИҢӘ

«Дуҫым» тиеп әйтмә миңә,
Дуҫтар ул һирәк була.
Шатлығына ҡарағанда
Ҡыйында терәк була.
Һинең менән беҙ тантана,
Табындарҙа йәнәшбеҙ.
Әллә минең хәтер насар:
Ҡасан булдың кәңәшсем?
Бергә хәмер эсһәк эстек,
Бер бот тоҙ ашаманыҡ.
Йыһанда бергә булманыҡ,
Полюста ҡышламаныҡ.
Ә унан һуң — дуҫлыҡҡа мин
Үтә лә һаҡ ҡарайым.
Дуҫтар, былай, осрап тора,

Үҙем һирәк ярайым.
Иң насар дуҫ — битараф дуҫ,
Хыянатҡа тиңләйем.
Бүтәнсәрәк дуҫлашырға
Һис кенә лә белмәйем.

## ЮЛАУСЫ

Йәшлек менән ара йырағайған,
Төшкөлөктә ғүмер ҡояшым.
Мин үҙемде йылға ярындағы
Бер юлаусы итеп тоямын.
Быға тиклем, нисек булғанда ла,
Юл үтелгән инде бер талай.
Алда — йылға. Күпер-баҫма ла юҡ.
Сығырға һуң уны ҡайһылай?
Шундай мәлдә — бер аҙ арылған да —
Тын алаһың туҡтап саҡ ҡына.
Уҙған юлым нисек булды әле:
Тура микән? Ҡара? Аҡ ҡына?
Ҡайғы-хәсрәт аҙ төшмәне инде,
Әммә аҡ көндәрем күберәк.
Юлдаштар ҙа булды яҡшыларҙан —
Килдек, бына, иңгә-иң терәп.
Рәнйеү менән үкенестәр байтаҡ —
Үҫкәнгәлер, бәлки, атаһыҙ.
Йүнәлеште боҙған саҡ та барҙыр —
Ниндәй әҙәм булмай хатаһыҙ.

Ғүмер дәфтәрҙәре сыбарланған,
Ҡайҙан табырға һуң таҙаһын?
Ә шулай ҙа ҡай саҡ бик тә килә
Аҡҡа ғына күсереп яҙаһы!

* * *

Тиктомалдан туҙынамын —
Хаҡ түгелмен.
Намыҫ, тиеп күп һөйләйем —
Аҡ түгелмен.
Юҡ өсөн дә тондорҙолар —
Хаҡ булғанмын.
Юҡ-бар хөсөт тараттылар —
Аҡ булғанмын.

* * *

Йәнем нескә, әллә үҙем холоҡһоҙ —
Юҡтан-барҙан рәнйей күңелем.
Йөҙөм, бәлки, көләп торалыр ҙа,
Мин илайым эстән түгелеп.
Ир кешеләр ныҡ булырға тейеш!
Шиғри йөрәк быны һанламай.
Ҡәҙимгесә йәшәү ситенлеген
Яҡындарым, юҡ шул, аңламай.
Шиғри донъя — минең бар булмышым,
Табынғаным — шиғри һүҙ генә.

«Ҡул һелтә лә йәшә бүтәндәрсә!» —
Тип өндәшәм ҡай саҡ үҙемә.
Юҡ, барыбер эстән юлдар теҙәм,
Ҡул ынтыла йәһәт ҡәләмгә.
Тормош өсөн генә кәрәк булһам,
Һанамағыҙ мине әҙәмгә.

## НИ МӘҒӘНӘ?

Ни мәғәнә Ерҙән йондоҙ күҙләп,
Үҙең унда осоп бармағас?
Ни мәғәнә телдән осҡан һүҙҙән,
Күҙ терәр ҙә өмөт ҡалмағас?
Йондоҙом да итеп, өмөтөм дә
Ниңә генә һине күтәрҙем?!
Ғәйепләмен үҙем, бары үҙем —
Алдап булмай икән күктәрҙе.
Ни мәғәнә, сәсте йолҡа-йолҡа,
Йөрәгемә яра һалыуҙан?
Иң ауыры — йондоҙ-өмөт һүнеп,
Япа-яңғыҙ тороп ҡалыуҙа...

## АТАЙҘЫ ҺАҒЫНЫУ

Хоҙай, ниңә һин атама минең
Шундай ҡыҫҡа ғүмер биргәнһең?
Күбәләктәй ғүмерен утта үртәп,
Һынау кәртәләре киргәнһең.

Үҙем хәҙер күптән ир еткәнмен,
Ә күңелем китек һаман да.
Күҙҙәремдә гелән һағыш ята,
Атаҡайҙан иртә ҡалғанға.
Атайымдың оло устарының
Йылыһын, их, тағы татырға!
Әллә инде ҡара ер аҫтынан
Эҙләп кенә алып ҡайтырға?
Мин сыҙармын, тәҡдир шулай ҡушҡас,
Һағыныуҙарым баштан ашһа ла.
Йәтимлектең ауыр яҙмыштарын
Татымаһын инде башҡалар.

## ДОНЪЯ ХӘЛЕ

Беҙ донъяла — ҡунаҡ ҡына,
Мин дә, бәлки, оҙаҡ тормам.
Юҡҡа йөҙҙәр йыртышмайыҡ,
Күңелдәрҙе йығышмайыҡ,
Беҙ донъяла — ҡунаҡ ҡына.
Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны:
Бөтөр ҙә ул, килер тағы.
Донъя ҡыуыр мәнем дә юҡ,
Кеше талар хәлем дә юҡ.
Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны.
Донъя хәлен белеп булмай,
Алдан ҡоршап, йышып булмай.
Һау саҡтан да алтыны юҡ,
Ҡәберҙән дә һалҡыны юҡ.
Донъя хәлен белеп булмай...

## КӨҘ ЕТКӘНДӘ

Ҡуй, йөрәгем, гел моңайма,
Булсы бер аҙ түҙем.
Был донъяны данларға ла
Бар бит минең һүҙем.

Ниндәй йәмле ғәзиз ер-һыу —
Күрсе шуны, күҙем.
Тыуған илде, Салауаттай,
Маҡта әле, һүҙем!

Ҡара һөрөм болоттарын
Таратһанһы, йөҙөм.
Изге хис һәм яҡты уйҙы
Һөйләп бирсе, һүҙем!

Тоғро дуҫлыҡ, саф һөйөүҙе
Биҙәккә төр, һүҙем!
Минең көҙөм еткән икән,
Ул — тик минең көҙөм.

## ЙӘШЛЕК МЕНӘН ХУШЛАШЫУ

Мөғжизәләр, аҡ хыялдар иле!
Хушлашырға килдем мәңгегә.
Мин былай ҙа һиндә оҙаҡланым —
Юҡ, киткеләр килмәй әле лә.

Китмәç инем (кеше ни һөйләмәç!) —
Һөйгәнемде һиндә юғалттым.
Уны эҙләп күпме юл үтелде,
Һин, табылыр, тиеп йыуаттың.

Табылманы. Әллә элегерәк
Аймылышты беҙҙең һуҡмаҡтар.
Әллә бөгөн, әллә алдараҡ ул —
Һиндә мәңге сисмәç йомаҡ бар.

Бар ғүмерем үтте шул йомғаҡты —
Мөхәббәтте генә тағатып.
Йәшлек, йәшлек! Беҙгә хушлашырға, —
Мин туйманым һаман яратып.

Яратам мин уны — һылыуымды,
Тыуған ерем өҙөлөп яратам.
Атам, әсәм, телем, халҡым минең, —
Хистәремде һеҙгә таратам.

Ошо хистәр, йәшлек, йөрәгемдә
Ҡабат-ҡабат килеп йәшәртә.
Мин, ахыры, һинән китә алмам —
Беҙгә мәңге бергә йәшәргә!



# *Әйт, Илаһым:*
# *Ҡайҙа ярты йәнем?..*

## ЯРТЫ ЙӘНДӘР

Әйт, Илаһым: ҡайҙа ярты йәнем?
Мәңге һөйөр — мине тартыр Йәрем?
Әй Илаһым! Йәнем әрней...

Байтаҡ инде фани ғүмер йәшем —
Бүлек йәнем! Тамды күҙем йәше.
Әй Илаһым! Кәрем кәмей...

Әйт, Илаһым: ярты йәнме Ул да?
«Эҙләй!» тиһең... Кәре кәмеп ҡуйһа?!?
Әй Илаһым! Табыш Йәрҙе...

Әйттең, беләм: сабыр төбө — алтын.
Йөрәккә бит ҡабыр төҫлө ялҡын!
Әйт: йөрәктәр ҡауышырмы?..

Әйт, Илаһым: ерҙә ысын бармы
Ярты йәнем? Миңә насип Йәрме?!
Әй Илаһым! Өмөт Йәрме?

Әйт, Илаһым: ҡайҙан эҙләйемме?!
Өмөтөмдө тамам өҙәйемме???
Әй Илаһым! Йәнем әрней...

## БЕРӘҮГӘ

Күҙҙәреңә күҙем төшһә,
Нурлана күңел.
Аяҙ күктәй зәңгәрлеген
Байҡарлыҡ түгел.
Иңдәремдә ике ҡулың —
Аҡҡош ҡанаты.
Ошо ҡулдар күңелемдән
Һағыш таратты.
Тараттың һин әрнеүҙәрҙе,
Аҡҡошом минең!
Илаһиәм, фәрештәм һин,
Яҙмышым, тинем.
Яҙмышымды яҡтыртыусым,
Илһам биреүсем;
Бәләләрҙән йолҡоп алып,
Елкән киреүсем!
Ал елкәнле ҙур карап мин
Тормошта хәҙер.
Сығам даръя уртаһына —
Алышҡа әҙер!
Алышырмын, изгелекте
Ҡурсып ямандан.
Мин азатмын ҡара уйҙан,
Бысраҡ, ялғандан.
Ялғандыҡ беҙ бөтөн булып —
Йөрәктәр бергә.
Һине, ахыры, Алла ғына
Ебәргән ергә.

## ҠЫҢҒЫРАУ СӘСКӘ

Сыңғыр-сыңғыр итеп
Бер көлдөң.
Таңғы ысыҡ еҫе
Бөркөлдө.
Ҡыңғырау сәскә әллә
Йыр йырлай —
Күкрәгемдә ярһып
Моң сыңлай.
Зәңгәр күҙең төҫө
Бар унда.
Телем көсһөҙ, йөрәк —
Ялҡында.
Ынйы булып тама
Йәшкәйең.
Һинһеҙ, йәнем, нисек
Йәшәйем?!!

* * *

Ике нәмә мине иҫертә:
Мөхәббәт һәм шарап тилертә.

Айнығанда башың сатнаһа —
Анттарыңды ҡабат ятлаһаң,

Шарап ҡына булыр ғәйептә.
Үҙ-үҙеңде инде ғәйеплә.

Йөрәгенде тотоп йығылһаң,
Ғазап-һағыштарҙан уйылһаң —

Иҫергәнһең һөйөү хисенән.
Айнымаҫһың унан һис кенә.

* * *

Ул ни ғәжәп: йәш ҡыҙҙарҙа
Күңелең һаман, тиһең.
Бәлки, үҙем ҡартмындыр ҙа —
Хисем бит йәп-йәш минең!
Ул хистең юҡ һис ҡасан да
Шиңгәне, өҙөлгәне.
Минең дә юҡ ғүмеремдә
Һөйөүҙән төңөлгәнем.
Йәш күңелдә — иң ихлас дәрт,
Саф нур бөркә күҙҙәре.
Шул йәшлеккә — йәш хис тыуа,
Хаҡтыр шуға һүҙҙәрең.

## ДУҪҠА ӨНДӘШЕҮ

Иҫеңдәме, дуҫҡай: ҡышҡы селлә.
Тулы айҙың һалҡын нурынан
Иҫ-аҡылын юйған йондоҙҡайҙар
Күҙ ҡыҫалар ине. Шул ғына

Сайпылдырҙы, ахыры, йөрәктәге
Мөлдөрәмә тулы хистәрҙе —
Күрше ауылдағы һылыуҙар ҙа
Моңаялыр ошо кистәрҙә,
Тинек тә беҙ, уҫал бригадирҙың
Шелтә-янауына ҡарамай,
Кешнәп торған колхоз арғымағын
Сығарҙыҡ та ектек санаға.
Беҙ ул төндә ҡыҙҙар ҡарашынан,
Тәүге үбешеүҙән иҫерҙек.
Ҡыш икәнен тышта —
онотҡайныҡ,
Онотҡайныҡ таңдың етерен.
Иҫеңдәме, дуҫҡай?..
...Оҙаҡ сәфәр йөрөп, таң мәлендә
Асып индем ауыл ҡапҡаһын,
Иҫкә төштө йәшлек шаянлығы,
Һәм күңелде... һағыш ҡапланы.
Беҙ-тилене зәңгәр хыялдарға
Алып осҡан ерән бейәнең
Ҡолонсағы — аҫау айғыр
булып —
Көтөп тора сая эйәһен.
Моңһоу төҫлө. Кимерһә лә үҙе
Алдындағы ағас улаҡты,
Әйтә кеүек: ниңә оҙаҡлай һуң,
Ҡайҙа китеп егет олаҡты?
Икебеҙ ҙә ҡапыл тертләп киттек,
Мин һыйпағас ялбыр ялынан...

Эйәр тора.
Алыҫ ҡыш мутлығын
Ҡабатларға мәллә яңынан?!
Күктә — йондоҙ,
                ярһыу ат — эргәлә...
Тик һыртына эйәр һалмамын:
Маңлай — йыйырсыҡлы, ә үҙемде
Һис кем көтмәгәнен аңланым.
Күҙ ҡыҫышып, айҙың нурҙарынан
Һикрәндәшкән саҡта йондоҙҙар,
Тулышмаймы егет күкрәктәре,
Көтмәй әллә таңда шуҡ ҡыҙҙар?
Саялары беҙҙең ҡустыларҙың,
Мөрхәтһенмәй ярһыу толпарҙы, —
Заман аты, тиеп, матай менән
Үлсәй икән дәһә юлдарҙы!
Ҡарап ҡалдым: ҡасан ғына әле
Тал сыбыҡта елгән Мөхәрләм
Арт ҡапҡанан сыҡты тауыш-тынһыҙ,
Атаһының «ИЖ»ын етәкләп...
Ҡарап ҡалдым:
Күрше ауыл юлын
Яңы заман тапай. Һүҙем юҡ,
Тик эргәмдә һин һәм
                ерән бейә,
Һеҙҙең менән — йәшлек үҙе юҡ,
Ҡарап ҡалдым, дуҫҡай...

## ҠАСАНДЫР

Мин ҡасандыр һине
Һөйә инем.
Йөрәктәге уттан
Көйә инем.
Мин ҡасандыр һине
Йәнем күрҙем.
Ғүмерлеккә яҙған
Йәрем күрҙем.
Мин ҡасандыр һине
Донъям тойҙом.
Аҡ хыялдан бәхет
Ҡорап ҡуйҙым.
Мин ҡасандыр һине
Аллам иттем.
Мөхәббәтте беҙҙең
Ялған иттең.
Мин ҡасандыр һине
Онотормон.
Тамырынан хисте
Ҡоротормон.
Ғүмер буйы үҙем
Ут йотормон.

## БЕЛӘҺЕҢ БИТ

Ай тулғанда — күңел тула,
Нилектән — беләһеңме?
Ай ҙа аңлай көләс йөҙөң
Күрергә теләгәнде.

Теләгәнде элеккесә,
Иңләп-буйлап урамды,
Ай нурында йөҙә-йөҙә
Икәүләшеп уҙғанды.
Уҙғандыр шул заманалар,
Урамдар ҡалған бушап.
Түп-түңәрәк ай ғына тик
Элекке айға оҡшаш.
Оҡшатып һөйкөмлө Ерҙе,
Шулай хискә тулышҡан.
Минең генә күңел тулған
Мөлдөрәмә һағыштан.
Һағышланам ай тулғанда,
Нилектән — беләһең бит!
Хыялымда, айҙай балҡып,
Янына eләмен бит!
Һағындым — беләһең бит...

## БӘҒЕРКӘЙЕМ

«Бәғерем» тип кемгә өндәшергә?
Хәлдәремде шунан үҙең бел дә:
Үткәндәрҙән килеп сарпыу тейә.
«Бәғерем» тип кемгә өндәшергә...

Йәшәгәнем әллә хата булды?
Ятҡаным гелән яттар булды —
Йөрәгемде тымыҙырлыҡ көс булһасы?!
Йәшәгәнем, ахры, хата булды.

Бәғзе көнөм тик сырхауҙан тора.
Яҙмыш ҡына шулай уйын ҡора:
Мәңге тапмам ул Мөхәббәт тигәндәрен.
Тотош көнөм тик сырхауҙан тора.

«Бәғерем» тип кемгә өндәшергә?
Тиң түгелмен һиңә йәрәшергә —
Шып-шым үтер Йәнбәк донъялыҡтан.
Бәғеркәйем, кил һин ерләшергә...

## ҠЫУАНАЙЫМ...

Бәхет көтмәй инем, Мөхәббәт тә...
Ташландыҡ бер баҡса — күңелем.
Һандуғасы киткән шул баҡсала
Ҡарасҡылай тойҙом үҙемде.

Ынйы-хистәрҙән дә йөрәккенәм
Арынғайны инде. Һүнгәйне
Бар донъяма йылы бирер усаҡ.
Тормошомдо сүп-сар күмгәйне.

...Булдың, ахыры, яҙмыш биргән бүләк —
Күңел гөлкәйҙәрем балҡыны.
Күҙ һирпһәң дә, йөрәк тертләп китә —
Тоҡанамы хистәр ялҡыны?!

Юҡ, тергеҙмә күңелем баҡсаларын,
Һайрамаһын унда былбыл да.
Уйҙарымда дауыл ҡупҡас ҡына,
Китерһең бит ҡабат юлыңдан.

Бөтәһе лә ҡалһын элеккесә:
Йөрәк шымыр, дулап арығас.
Ситтән генә ҡарап ҡыуанайым,
Ҡыуанайым һинең яҙыңа.

## НИҢӘ УҘҘЫҢ ЯНДАРЫМДАН?

Тығыҙ балтыр, сейә төҫлө ирен,
Асылырға торған иҙеүҙәр...
Һиңә ҡарап, абау, мөхәббәтһеҙ,
Теймәҫ, тимә, һөйөү-киҙеүҙәр.
Тешең — ынйы, ҡара болот — сәсең,
Буйҡайҙарың зифа тал ғына...
Әллә ниндәй уйға төшөрөрһөң,
Күтәрелеп күҙҙе һал ғына.
Утлы ҡараш, йөҙөң — яҙғы ҡояш;
Бер ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ.
Йөрәгемде быңдай гүзәллектән
Көс булырмы тыйып тоторлоҡ?!
...Текә баҫып яндан уҙғаныңда,
Нисә төрлө хистәр татыным.
Быны уҡып, өйҙә сәстәремде
Бөртөкләүен көтәм ҡатындың.

## ҠАТЫНҒА ӘЙТЕР СЕРЕМ

Бик һағынам һине, бик һағынам,
Һин янымда көйө һағынам.
Күҙҙе наҙлар күпме һылыуҙар бар,
Ә мин бары һиңә табынам.
Табынырға хоҙай түгелһең дә...
Илаһиә түгел... Ябайһың!
Илаһиә булһаң, һөймәҫ инем —
Ябайлығың менән арбайһың.
Арбайһың һин минең зиһенемде,
Күңелемде нурға күмәһең.
Һыуһынымды әммә ҡандырмайһың —
Сарсай бирһен, тиһең, күрәһең.
Йәнем дә һин минең, йәрем дә һин,
Йән өрөүсе миңә — һүнгәндә.
Туҡтатыусым — артыҡ шашынғанда,
Наҙ биреүсем — һағыш күмгәндә.
Наҙҙарыңды йәшлек яҙҙарынан
Бағышланың миңә, тилегә.
Мин ҡабатлап һине һөйөр инем,
Йәшлек ҡайтһа әгәр киренән!

## ҒОРУР ЙӘН

Өнөңдәме, иркәм,
Төшөңдәме икән —
Бер һүҙ сыҡты һинең тешеңдән.
Рәнйеп һыҙланырға,

Юҡтан ҡуҙланырға —
Күпме генә кәрәк кешегә.

Яңылыштыр был һүҙең,
Беләһең тик үҙең —
Төйөлдө йөрәккә таш булып.
Әрнеү-ғазаптарым
Миңә ҡайтты тағы —
Ултыртып алып кит, аҡ болот!

Ҡасайым йыраҡҡа,
Һинһеҙ бер ҡыр яҡҡа
Осорһон яҙмышым елдәре.
Ағыулы һүҙ атҡан,
Йәнемде илатҡан
Ирендәр наҙларҙар кемдәрҙе?!

Һағынып үҙеңде,
Онотоп һүҙеңде,
Йөрәгем һағышҡа тулһа ла,
Йәнем ул бик ғорур,
Антында ныҡ торор —
Ялынып йығылмаҫ тупһаңа.

## АПТЫРАҒАНДА

Һәр кешенең һүҙе — күҙҙәрендә,
Күҙҙәреңде күтәр, бәғерем.
Тик яңылыштан ғына, юҡ, яҙмыштан
Йөрәгемде шулай телерең.

Һәр кешенең һүҙе — күкрәгендә,
Күкрәк ярып сыҡҡан моңонда.
Мәңгелеккә талған хистәремде
Туҙғытаһың инде тағын да.

Һәр кешенең һүҙе — ҡулдарында,
Ҡулҡайҙарың кемде иркәләр?
Күҙҙәреңде, ҡулдарыңды һағынып
Ҡыҫыр үтә минең иртәләр.

Һәр кешенең һүҙе — күҙҙәрендә...
Ҡулҡайҙарың кемде иркәләр?!

## ҒАШИҠ БУЛМАМ...

Мин, ахыры, ҡабат бер ҡасан да,
Бер кемгә лә ғашиҡ булалмам.
Ҡара ҡайғы, һары һағыш ҡына —
Йөрәгемә инеп тулғандар.

Мине, ахыры, ҡабат хисләндермәҫ,
Тилертмәҫтер таңы яҙҙарҙың.
Минең һүҙҙе һиңә башҡа әйтер,
Һәм башҡаға булһын наҙҙарың.

Мин ялыҡтым һүҙһеҙ һөйөүҙәрҙән,
Һинһеҙ һөйөүҙәрҙән ялыҡтым.
Һиңә булһын йәмле яҙҙары ла,
Бүләк итәм беҙҙең таллыҡты.

Мин яҙҙарҙа ҡала алмам, ахыры,
Йәйҙәремә, әйҙә, юлланам.
Күҙ йәштәрем ҡар һыуылай аҡһын —
Мәңгелеккә һине юғалтам.

* * *

Ник моңһоуһың, тип һорама —
Һандуғастар һайрай бит!
Һандуғастар һайрағанда
Ҡыҙҙар беҙгә ҡарай бит!
Һандуғас ҡына ғәйепле —
Мин һиңә ярманым:
Өҙҙөрөп һиңә ҡараным —
Һандуғас һайраманы.
Һандуғастар оя ҡорҙо,
Ҡабат һайрамаҫ микән?
Күҙҙәремдең моңһоулығын
Иркәм аңламаҫ микән?
Аңлашыуҙан ни мәғәнә —
Һандуғас һайрамаһа?
Әгәр йөрәк леп-леп тибеп,
Һөйгәнең ҡарамаһа?!
Ҡарамаһа ҡарамаһын,
Үҙенә — ҡарамаһы.
Һандуғастың — моңо моңло,
Тик миңә ярманы.

* * *

Һине ҡабат осратмамын төҫлө —
Муйыл күҙҙәреңде һағындым.
Түгелеп тә торған керпегеңдән
Ап-аҡ нурҙар, гүйә, ағылды.
Аҡ нурҙарҙан ғына тораһыңмы —
Һинең йәштә һәр кем саф ҡына.
Мин үҙеңә тиң булалмам инде —
Керләндем дә. Ҡартмын саҡ ҡына.
Тилертерлек хисең, көсөң булһа,
Аҡылымдан яҙҙыр һуңғы ҡат.
Йәшлегемә, юҡ-юҡ, йәшлегеңә
Етәклә лә мине алып ҡайт.
...Һине ҡабат осратмамын төҫлө —
Муйыл күҙҙәреңде һағындым.
Йәшлегеңә мине индермәҫтәр.
Йөрәгемә һағыш ағылды.

* * *

Тәҙрәм төбөнән поездар
Үтәләр туҡтауһыҙ.
Ҡаршы сығырға шуларға
Нисәмә уҡталдым.
Һиңә яҙылған хаттарға
Вагонда урын юҡ.
Бәлки, урыны табылыр —
Һалырға уйым юҡ.
Ғүмер иҫәпле — көндәрем
Үтәләр туҡтауһыҙ.

Ҡаршы сығырға үҙеңә
Нисәмә уҡталдым.
Һиңә әйтелер һүҙҙәргә
Күңелендә урын юҡ,
Йәндәй аяулы хисемдән
Көлдөрөр уйым юҡ.

## АЙ БУЛМАМ...

Күктән инде йондоҙ эҙләмәйем,
Беләм йондоҙомдоң һүнгәнен.
Күҙҙәреңдән һөйөү эҙләмәйем,
Алыҫ йондоҙ төҫлө күҙҙәрең.
Ай яҡтыһы миңә нурлы түгел,
Ул бит бары — ҡояш сағыла.
Шатлыҡтарға тулы һинең күгең —
Бүтән мөхәббәте яғыла.
Ҡояш һымаҡ, айҙың яҡтыһы ла
Кемдәргәлер бирә йыуаныс.
Ай булмамын.
Ҡайҙа һиңә яҡшы —
Ошо үҙе миңә ҡыуаныс...

## ҺИНЕ УЙЛАҒАНДА

Ҡояш та юҡ күктә,
Бер әҫәр болот та.
Айы ла ҡалҡырға
Онотҡан.

Иртәме, кистерме
Офоҡта?
Ҡар яуған — һалҡынын
Һиҙмәйем.
Ҡарайған тау башын
Күҙләйем.
Ҡышмы был, яҙ микән —
Белмәйем.
Ҡояш ни, болот ни —
Бошонмам.
Ни файҙа яҙынан,
Ҡышынан?
Хәлемде аңларһың
Ошонан.

### БЫЛАЙ ҒЫНА

Үкенес — үткәндә,
Киләсәк — өмөт.
Башыңды юғары
Тот әле, егет!
Моңайма, уйҙар ул
Уҙғанға ҡайта.
Алдыңда ал таҫма —
Ғүмерең ята.
Юлыңда бер һылыу —
Фәрештә төҫлө.
Донъяла ни бар һуң
Һөйөүҙән көслө?!!

## НИМӘ КӘРӘК?

Һый-ниғәмәт тора өҫтәлдә,
Утлы шарап тулы шешәмдә.
Ер һылыуы наҙлай күҙемде,
Әммә тыям, тыям үҙемде.

Тоноҡ нурын һибә май шәме.
Асайыҡтыр инде шешәне.
Талғын бер көй башты томалай,
Күҙен ҡыҫа күктән тулған ай.

Тағы нимә кәрәк ирҙәргә?!
Әммә бынан йыраҡ ерҙәрҙә
Мин яратҡан бүтән һылыу бар,
Йөрәгемдә шуға урын тар.

Өҙөлөп һөйәм ошо һылыуҙы,
Тик һөйөүем өнһөҙ, ҡыйыуһыҙ.
Үҙ-үҙемдән, хатта, йәшерәм.
Бөтәһен дә эстән кисерәм.

Талда — былбыл, һыуҙа ҡондоҙ ул,
Минең буйым етмәҫ йондоҙ ул.
Хыялымдан, ахры, ҡасалмам,
Был шешәне, ай-һай, асалмам.

## КИЛӘСӘК ҠЫҘЫНА

Һин донъяла әле юҡһың,
Тик томанда һынланаһың.
Хатта әсәң тыумағандыр —
Минең бары хыялдаһың.
Һин ҡыҙ булып өлгөрөрҙән
Ярты быуат — быуат әүәл
Мин бит һиңә ғашиҡ инем...
Юҡ, юҡ, иҫем минең теүәл.
Нисә көндәр, нисә айҙар —
Ерҙән алып күккә ҡәҙәр —
Тиҫтә йылдар, быуаттарҙан
Эҙләп таптым һине хәҙер.
Һылыулығың һөйләмәйем —
Мәңге йәш ай көнләшерлек.
Ҡараштарың һөймәлекле —
Таң йондоҙға тиңләшерлек.
Сыңғырлатып һин бер көлһәң,
Гәлсәр сыңы ишетелә.
Ҡушлап үргән сәстәреңдән
Хушбуй, баҙыян еҫе килә.
Һинең аяҡ атлауҙарың —
Ҡояш нуры балҡыуҙары.
Шәкәрҙән аҡ тәнкәйҙәрең —
Һыҙылып ята ҡалҡыуҙары.
Тыумағандыр өләсәйең,
Биләүҙә юҡ һәм әсәйең,
Көн күрерҙән быуат элек
Әммә инде һин йәшәйһең!!!

## ЙЫУАНЫС

Һин яҙ менән,
Көмөш ҡар һыуылай,
Йөрәгемә инден селтерәп.
Бар булғаның,
Тап булғаның өсөн
Хаҡ Хоҙайға рәхмәт еткерәм.
Һинең наҙҙар
Яҙҙың үҙе төҫлө:
Боҙҙай туңдым, яндым ҡояштай;
Елдәй шаштым,
Ҡабат йәшәрҙем мин —
Игеҙәктәй һеҙ бик оҡшаштар.
Һин — ҡамсылар
Тамсы күңелемдә,
Йән тоймаған саҡта яҙ йәмен.
Сарсағанда —
Тере һыуым булдың:
Йөрәгемдә, юҡһа, наҙ кәмей.
Һин һуғарған
Ошо ҡара ерҙә
Умырзая моңһоу йылмайыр.
Яҙҙар менән
Үтер һинең наҙҙар,
Күңел йыуатырға йыр ҡалыр.

## ҮҘӘККӘЙЕМ ӨҘӨЛӘ

Был йөрәгем ҡырҡҡа теләнә,
Үҙәккәйем ҡырҡҡа өҙөлә.

Берегеҙҙә — шундай ҡупшы һын,
Оҙон толомло тик ул булһын.

Зәңгәр күҙҙәр — өсөнсөгөҙҙә,
Ҡарлуғас ҡаш — дүртенсегеҙҙә.

Ынйы кеүек теҙмә тештәргә
Балдай һүҙҙәр теҙер тел кәрәк.

Ҡурсаҡ ҡына, әммә һалҡын йөҙ —
Тетрәндермәй икән ялҡынһыҙ.

Һәммә сифаттарға ҡағылмай,
Һүҙ әйтмәксе инем... Табылмай.

Ҡырҡығыҙҙы бергә теҙәйем —
Бергә ҡуша алмай йөҙәйем.

## ҠАЙҘА?

О, һин, мөхәббәтем!
Һуң һин ҡайҙа?
Эҙләйем бит ғүмер буйына.

Тапҡан төҫлө булам — юғалтамын.
Мин ышандым һинең юғыңа.
Юғалдың һин ығы-зығыларҙа,
Һин юғалдың эҙләп — мәңгегә.
Миңә ҡалды валсыҡ-ҡыйырсыҡтар,
Йыйып алырға тик кәмһенәм.
Кәмһенәм мин ваҡ яратырға,
Һөйөү була һәр саҡ юғары!
Тик мөхәббәт мине теҙ сүктерҙе,
Бөркөт булып осҡан юҡ әле.
Юҡ шул мине күккә күтәреүсе —
Хыялыйҙар мине итәһе.
Оло мөхәббәтте татымайса,
Был донъянан килмәй китәһе!

* * *

Ҡайғырғанда — йәш күрмәҫһең,
Мин эстән һығылырмын.
Үлгәндә лә — сирләп үлмәм,
Мин ҡапыл йығылырмын.

Үпкәләһәм — йылмайырмын,
Һүҙем сыҡмаҫ тешемдән.
Рәнйеүҙәрем, ҡусҡар кеүек,
Төпкә инеп йәшенгән.

Сыуаҡ көнөм үтә һирәк,
Үтә аҙ шатлыҡтарым.
Ул сағында таңғы ысыҡ —
Күҙемдән йәшем тамыр.

Тынҡышлана бара йөрәк,
Барыбер — донъялары.
Мөхәббәттән яҙған күңел —
Еңелгән яу яланы.

* * *

Мөхәббәт — гәлсәр быяла,
Һаҡһыҙ тейһәң, ыуала.
Ҡоршап булмай ярсыҡтарын:
Ҡоршаһаң, йөйө ҡала.
Гәлсәр һауыт төштө ҡулдан,
Күҙемә йәшем тулған,
Донъяға һыймай шашыуым
Үкенестәргә булған.
Гәлсәр һауыт — быяла,
Зиһендәрем тарала.
Селпәрәмә өмөт кенә
Ята беҙҙең арала.

## ЯҘМЫШ ҺӘМ ҺИН

Яҙмыш иркәләүен аҙ күрһәм дә,
Юҡ, мин уға ләғнәт уҡымам,
Ләззәттәре фани донъяларҙың
Һағыш менән ҡуша туҡыла.
Яҙмышыма сикһеҙ рәхмәтлемен:
Һиңә илтер мине бер заман!
Ерҙә барлығыңды йәнем тоя,
Һине генә көтәм мин һаман.
Баш эйәмен һине бар итеүсе
Ғәзиз атаң менән әсәңә.
Яҙғы наҙҙар, бөтмәҫ өмөт өҫтәп
Килереңде уйлап йәшәрәм.
Әгәр яҙмыш яҙлыҡтыра ҡалһа
Беҙ ҡауышыр көндә юлдарҙы, —
Татлы һағышыма сәсәй-сәсәй, —
Мин донъянан көләс уҙармын.

## ҠАЙҘА ЛА БЕР

Африкала ғәҙәт бүтән, тиҙәр:
Ҡыҙҙар һайлай, тиҙәр, егетте.
Аҡса йыйып, шунда китергәме —
Кәләш һайлай-һайлай елһетте.
Ризалығын бирмәй береһе лә,
Мин шулай уҡ бөткән әҙәмме?!
Юҡ, юҡ, китәм — һатып һыйырымды,
Һарығымды, туҡал кәзәмде...

Тегендә бик шәп, ти: түбән ҡарап,
Һин оялсан ғына йөрөйһөң.
Таштан түгел — урман ҡамышынан
Кәләшеңә фатир төҙөйһөң.
Негр ҡыҙы һөйә белә микән,
Хисләнәме икән, һағынһа?
Ярай ҙа, тим, ете ят тарафта
Мине һайлаусыһы табылһа?!
...Яратмайса йәшәп булмайҙыр ул
Һәр урында, хатта айҙа ла.
Бер-береһен һайлай — ике йөрәк:
Мөхәббәтһеҙ ауыр ҡайҙа ла.

## КӨНБАҒЫШ СӘСКӘЛӘРЕ

Ниңә һары була икән
Көнбағыш сәскәләре?
Төндә ҡояшын һағынып,
Һағышын сәскәнгәлер.
Ниңә мин дә, шул сәскәләй,
Һарғаям һағынғанда?
Һағыш төҫө бер үк икән —
Йөҙҙәрҙә сағылғанда.
Уртаҡ булһын һағыштар тип,
Көнбағыш сәстем әле.
Әрнеүҙәр эсемә һыймай —
Уға ла күсһен әле.

Көнбағышым сәскә ата,
Сәскәһе тағы һары.
Һин, ҡояшым: «Ник һарғайҙың?» —
Тиеп бер һорарһыңмы?!

## ҺИН САҠЫРМА МИНЕ ТУЙЫҢА

Туйың булһа, миңә әйтмәй ҡалма —
Мин ағайың булып барырмын.
Кейәүеңде күҙем менән түгел,
Ә күңелем менән танырмын.
Ул, моғайын, миңә оҡшаш булыр,
Тик ул булыр күпкә йәшерәк.
Аптырама, ниңә ҡарамай, тип,
Күҙҙәремде һинән йәшерһәм.
Был шатлыҡлы көндә ҡарашымдан
Һағыш күсеп ҡуйыр үҙеңә.
Муйыл күҙең күрһәм, йөрәкһеүем
Сығыр, тиеп ҡурҡам, һүҙемә.
Туйың булһа, ҡуй саҡырма мине —
Һөйөүемде булмаҫ йәшереп.
Балҡып китеп, туйҙы шартлатыр ул,
Икебеҙгә тейер йәшене.

* * *

Һин минеке түгел — башҡаныҡы,
Мин үҙем дә түгел һинеке.
Ниңә беҙҙе яҙмыш һыңлатҡан һуң —
Ҡауыштырмай ҡалған тиң итеп?..

Һөйөү уты йөрәгемде үртәй —
Һыу һибергә микән үҙенә?
Ҡосағыма ярһып ырғымасы —
Беҙ тейешбеҙ, иркәм, түҙергә.

Ирендәрем әйтер иркә һүҙҙәр,
Ә күҙемдә торор башҡа һын.
Һин наҙларһың минең биттәремде —
Бармаҡтарың иҫләр башҡаны.

Хушлашайыҡ, иркәм, мәңгелеккә,
Оло гонаһҡа беҙ батмайыҡ.
Мөхәббәт тә аҡ, пак көйө ҡалһын —
Күрәләтә ҡара яҡмайыҡ,
Һөйөүебеҙ ваҡлатмайыҡ.

## ЯЛБАРЫУ

Алыштырҙың мине
Бүтәнгә.
Үкенмәмен барыбер
Үткәнгә;
Һине наҙлап, һине
Һөйгәнгә;
Мөхәббәт илендә
Йөҙгәнгә;
Өҙгәнгә йөрәкте
Һағышым.

Һин булдың ғүмерем,
Яҙмышым.
Тик ҡайтма яныма
Яңынан!
Китмәсе бүтәнгә —
Ялынам...

* * *

Йөрәгемде семеттереп
Тағы яратһам икән!
Уңалып килгән ярамды
Ҡабат ҡанатһам икән.
Иҫке өйҙө һиплəп кенə —
Яңыртып булмай микән?
Бер янып һүнгән йөрәктәр
Яңынан ҡуҙлай микән?
Баҙлап янған ҡыҙҙарға ла
Йөрәк ник һалҡын икән?
Тығылған төйөр үтмәгәс,
Ул ниндәй алҡым икән?!
Көнләшкәнде көнләштереп —
Ҡыланыу ҡалды микән?
Йөрәгем көлгә сыҡҡанмы,
Йылдарым янды микән?
Йөрәгем дә, һөйгәнем дә —
Улар үткәндәр икән.
Дөрләп-янып яратыуҙар —
Янып бөткәндәр икән...

## СЕР

Уйымдағын яҙыр инем — ҡурҡамын:
Ғаләм белер көнделдә ни ятҡанын,
Күҙ йомдормай, ирекһеҙләп төн буйы,
Йәнгә ниндәй дөрләткес ут ҡапҡанын.

Ошо серҙе һиңә асһам... Аңларһың?!
«Мин дә һине...» тиеп микән алдарһың?
Ни тиһәң дә, күнер йәнем — ҡол бит ул —
Нурлы йөҙ һәм күҙең менән арбарһың!

Бикләп ҡуйһам оло Хисте? Түҙмәм шул.
Йөрәгем дә, телем дә бик һүҙсән шул.
Бүтән ирҙе, бәлки, Аҡыл тыйырҙыр —
Шағир ирҙең йөрәге бик үҙсән шул.

Нимә булыр — ошо серҙе
асмаһам?
Нимә булыр — башты алып
ҡасмаһам?
Хаҡ бер кәңәш бирер инең: ошо мәл
Үҙең дә бит юҡ янымда, исмаһам?!

## КИСЕР, ҺЫЛЫУ!

Һин йылмайып ҡарап уҙҙың тағы,
Йә, ниңә һуң серле ҡараштар?
Мөхәббәттән мин төңөлөп бөттөм,
Ә хистәрем китеп аҙашҡан.

Шул хистәрҙе ҡабат йыйнамайса,
Ҡайтмайынса ҡабат хыялға —
Һин теләгән наҙҙар бирә алмам,
Наҙһыҙ һөйөү булыр зыянға.
Зыян түгел, хыял менән тулып,
Бер килермен. Әммә көтмәҫһең.
Бүтән наҙлар был саҡ һине, иркәм,
Миңә инде толом һүтмәҫһең.
Тән наҙлауы ғына етмәй миңә,
Хистәремдән шашып һөймәгәс.
Бөтә донъя ишетерлек итеп:
«Берҙән-берем — һин ул!» — тимәгәс.
Һөйәм икән, йыһан балҡып торһон!
Мин аҫтыртын һөйә белмәйем.
Кисер, һылыу, йәшер ҡарашыңды —
Үҙемде мин ерҙә эҙләйем.

* * *

Ҡыҙарып бешкән бит алмаң:
Баҡсаңда — йәй уртаһы.
Алһыу ғына иренеңде
Еләк итеп йотаһы.
Сөм-ҡара муйыл күҙеңдең
Тиргем килә нурҙарын.
Маңлай һыҙыҡтарың ғына —
Гүйә, баҡса бурҙары.
Өлгөргән баҡсаң, өлгөргән —
Уңышын йыяһы бар.

Көҙ еткәнсе, емешеңдән
Кинәнеп туяһы бар.
Ҡойма аша һикерергә
Тиҙерәк ҡыяһы бар.

## АҠ ЯЛАН

Сылт аяҙ төн. Ап-аҡ ҡар яланы,
Күктән яуа мамыҡ сәскәһе.
Аҡыҡтай ай ем-ем емелдәтә
Бихисаплы көмөш тәңкәһен.
Мең төҫтәге баҫып тәңкәләргә,
Шырҡылдашып юҡҡа-барға ла,
Етәкләшкән бер ҡыҙ менән егет
Киләсәккә атлап баралар...
Ап-аҡ тундан, ап-аҡ шәл ябынған —
Ҡарһылыуым, был бит һин инең.
Ап-аҡ тундан, ап-аҡ бүрек кейгән —
Ә быныһын хәтер, мин, тине.
Шул аҡ төндөң яҡты хыялдарын
Ыжғыр буран боҙға ураны.
Унын эйәрсәне — хөсөт елдәр
Ҡуйынымдан һине урланы.
Ҡарһылыуым, бөгөн ҡайҙарҙа һин?
Кем иркәләй? Ниндәй ҡайғың бар?
Ниҙәр уйлап, ниҙәр кисерәһең
Ап-аҡ төнлө ғинуар айында?
Моғайын да, ҡыҙың — йәш Ҡарһылыу
Ул саҡтағы һинең йәштәлер.

Төҫ-фиғеле һиңә тартҡанмы һуң,
Бармы әле унын иш-йәре?
Үҫеп етте улым. Аҡ төндәге
Минең менән үҙе типә-тиң.
Ап-аҡ ҡарҙар яуып, айҙар тулғас,
Аҡ яланға һаман киләм мин.

## ТАБЫРМЫН

Аҡ сәскәләр үҫкән,
Күбәләктәр осҡан
Болондарҙан һине эҙләнем.
Мәк сәсәгеме һин,
Күбәләгем минең, —
Тапманылар унда күҙҙәрем.

Былбыл һайрап торған,
Муйыл сатыр ҡорған
Туғайҙарҙан килмәй тауышың,
Һайрар былбыл мәллә,
Муйыл шәле эллә —
Ишетмәнем йөрәк һағышың.

Ҡаҙҙар ҡанат ҡаҡҡан,
Ҡыҙҙар һыуға сыҡҡан
Йылға буйҙарында юҡ һының.
Аҡ ҡанатлы ҡаҙмы,
Пар күнәкле ҡыҙмы —
Үҙәгемде өҙә юҡһыныу.

Тулы айы ҡалҡҡан,
Йондоҙҙары баҡҡан
Сикһеҙ күккә ҡарап табындым.
Ай һылыуы һинме,
Аҡ йондоҙом, тимме, —
Мин барыбер һине табырмын.

## ДОНЪЯ ТОТҠАҺЫ

Өс инаныу тота был донъяны:
Аҡса, дәрәжә һәм мөхәббәт.
Тәүге икәүһенә табынмайым,
Өсөнсөһө бирмәй мәрхәмәт.

Мәрхәмәтһеҙ булды миңә яҙмыш.
Мөхәббәтһеҙ үтте көндәрем.
Мин йәшәнем юҡҡа.
Бушҡа ғына —
Бер йоҡоһоҙ уҙған төндәрем.

Төндәр буйы һиңә табындым мин,
О, мөхәббәт, — юҡҡа сығыуым.
Һин тип янды һәр бер күҙәнәгем,
Һинең өсөн — һәр бер тыныуым.

Тындым инде оло һөйөүемде
Ваҡ-ваҡ көйө йыйып алыуҙан.
Аҡса, дәрәжә юҡ.
Мөхәббәтем —
Бер услам көл мәңге яныуҙан.

## ЯРАТАМ!

Мин, әсәһе, тағы ғашиҡ булдым!
Беләм, мәңге ғәфү итмәҫһең.
Ҡарғарһың да, хатта, ҡыҙып китеп,
Бәлки, хатта өйгә керетмәҫһең.

Мин, әсәһе, ғашиҡ булдым уның
Нәҙек ҡаштарына, күҙенә.
Буй-һынына, атлап йөрөшөнә —
Ғашиҡ булдым уның үҙенә!

Мин, әсәһе, түҙә алмам, ахыры,
Ишетмәйсә уның тауышын.
Һарғайырмын, көҙгө япраҡ төҫлө, —
Яҙмағанын беләм ҡауышыу.

Мин, әсәһе, изге фәрештәне
Яратмаҫҡа көстәр тапманым.
Кисер, тиеп, һиңә әйтеү ҡыйын,
Намыҫымды әммә һатманым.

Мин, әсәһе, йәшлегеңде күрҙем
Ошо моңһоу, ихлас ҡараштта.
Саф сағыңды, шат сағыңды күрҙем —
Бәлки, уны шуға яратам.

Мин, әсәһе, һиңә ҡара ҡайғы,
Йәлләһәм дә, юҡ, юҡ, алдамам!
Йөрәгемде әрлә, күҙҙәремде —
Матурлыҡҡа ғашиҡ мин һаман!
Мин донъяны шашып яратам!

## ДИҢГЕҘ БУЙЫНДА УЙЛАНЫУ

Йыраҡтарҙан урап, шашып-ярһып,
Арып ҡайта диңгеҙ ярҙарға.
Тулҡындарын һалып ял иттергәс,
Ташлана ул ҡабат дауҙарға.
Диңгеҙ кеүек, мин дә был донъяла
Аҡ күбеккә батып,
Тындарыма сәсәп йәшәйем!
Арыуҙарым баҫыр ярым ҡайҙа?
Ярһыуымды ҡайҙа сәсәйем?
Текә ярҙар була алманың һин
Ажарымды тыйып тоторлоҡ,
Талсыҡҡанда ҡеүәт, көсөң өҫтәп,
Һағыш-ғазаптарым йоторлоҡ.
Әрнеүҙәрҙән йәнем йәнселгәндә,
Килһәм икән һинең һиллеккә!
Сисһәм икән һиңә хистәремде —
Һай, был тормош үтте елеккә!
Елеп кенә үтер ярһыу ғүмер,
Диңгеҙ булып мәңге шауламам,
Хистәрем дә тыныр шашыныуҙан,
Һинән инде ярҙар дауламам.
Диңгеҙ булып мәңге шауламам.

* * *

Һаумы, тиеп өндәшмәйем,
Башҡанан да көнләшмәйем.

Күҙ ҡарашың тетрәндермәй,
Йөрәгем дә һис әрнемәй.
Ваҡыт, ай-һай, бик тиҙ үткән:
Балалар ҙа үҫеп бөткән!
Хушлашайыҡ тыныс ҡына...
Күҙ һирпһәңсе сиҡ-сиҡ ҡына!

## КЕМ БЕЛӘ...

Дөрләү юҡ шул хәҙер шиғырымда...
Тик мөхәббәт элек йөрөткән.
Барлығынан уның төңөлгәнгә,
Ҡуҙын йөрәк,
эйе,
һүрелткән.

Яратманым түгел, күп яраттым:
Һәр сибәргә ғашиҡ саҡтарым
Бына-бына ғына тора кеүек —
Һәр беренең исемен ятланым.

Яттар яҡын булды — ялҡынымда
Имшеттергәс туңған йәндәрен.
«Һеҙ ҡайҙарҙа хәҙер», йәш саҡтағы
Һөйөп кенә туймаҫ йәрҙәрем?!?

Иҫәүәнлек бөттө шиғырымда...
Тик мөхәббәт мине йөрөткән.

Оло һөйөү, ысын һөйөү тапмай,
Ҡуҙын йөрәк,
эх-ма!
һүрелткән.

Бәлки, Берәү булыр терелткән...

## ТУЛЫШЫУ

Ерҙе әрсеп ҡарҙан,
Ҡабат ҡайтты яҙҙар —
Бөрөләргә ағас тулышҡан.
Һыуға тулы ярҙар,
Ҡараш тулы наҙҙар —
Йышая шул яҙын һулыштар.

Күлдә йөҙгән ҡошмо?!
Ала инде һушты —
Күҙҙәр яна ҡыҙҙар үткәндә.
Үҙе, гүйә, бөркөт,
Ай-һай, сая егет —
Үтә аҙҙыр уға еткәндәр.

Ерҙә ҡанун ғәҙел:
Һөйөү уты хәҙер
Ялмап алыр оло, кесеһен.
Яҙҙар бик тиҙ үтер,
Көҙ ҙә килеп етер —
Мөхәббәттә кеше йәлсеһен.

* * *

Түҙеп тә төңөлдөм —
Өмөт юҡ.
Ҡайҙалыр йыраҡта
Һөйөү-ут.
Шаптырҙап күңелем
Кипкәйне.
Балҡышын йөрәгем
Көткәйне.
Саҡма таш сағыусым
Килмәне.
Ә мин ут, бары ут
Теләнем.
Хәҙер һуң: үкенес
Үткәндәр.
Йөрәк тә, дым тартып,
Мүкләнгән.
Төңөлгән күңелдең
Түле юҡ.
Һөймәгән егеттең
Йүне юҡ.

## АҘАШҠАН ХЫЯЛ

Болан ҡыҙы кеүек текә баҫып,
Сәстәреңде сәсеп елдәргә
Уҙғаныңда гөлтләп ҡабынамын —
Танһыҡ йәрһең икән кемдәргә?!

Керпегендең кинәт һирпелеүе,
Асыҡ зәңгәрлеге күҙендең
Сайпылдыра йөрәк хистәремде —
Һынамасы минең түҙемде!
Яҙғы ҡояш күтәреләкеүек:
Шундай балҡый йөҙөң, йылмайһаң
Тештәреңдә аҡ нур сағылдырып —
Тиң булырмы, арнап йыр яҙһам?
...Сәстәреңде ҡулым наҙлап тарай,
Төпһөҙ күкте айҡай ҡарашым,
Аҡ нурҙарҙы һурам иренеңдән...
Осраштыҡмы әллә аҙашып?!
Бүтән икән сәстәреңдең еҫе,
Икенсерәк төҫ бар күҙеңдә...
Мин күрергә алыҫ хыялымды
Теләгәнмен, ахыры, үҙеңдә.

## ҺУНЛАНЫҠ БЕҘ

Йәш бал мөлдөрәмә кәрәҙ төҫлө
Татлы өмөт тулып күңелем,
Һине генә уйлап, һине эҙләп
Тыуған яҡтарыңа мин килдем.
Килдем беҙгә тылсымлы төш менән
Әкиәт бүләк иткән урынға.
Ошонда бит балдай наҙҙар эстек
Һәм ҡойондоҡ хистәр нурында.
Ул хистәрҙе онотмамын һис тә,
Һыныңды ла япмаҫ бүтән һын.

Бөтәһе лә эммә — үткәндәрҙә,
Бында хәҙер һиллек, күптән тын.
Һағышлы был тынлыҡ,
Әрнеп-тулап
Ситлегендә йөрәк тибешә.
Уның төҫө, еҫе ҡалған, тиеп,
Барыбер килер, тиеп еңешә.
Еңмешләнмә, йөрәк!
Һуңланыҡ беҙ.
Ул киткән шул, бөткәс түҙеме.
Һәм ҡалдырып киткән икебеҙгә
Әрнеү-ғазаптарын үҙенең.

## ВАҠЫТЛЫСА

Бөтәһе лә, беләм, ваҡытлыса:
Беҙ ҡабыҙған уттар һүнерҙәр,
Бокалдағы шарап һалҡынайыр,
Ярҙарына хистәр инерҙәр.

Ә хәҙергә — ҡойсо шарабынды,
Ҡан уйнаһын беҙҙең тамырҙа.
Килгәйнем дә һиңә һөйөү эҙләп,
Яҙҙы ялған биҙәк табырға.

Шарап баҫһын йөрәк әрнеүҙәрен,
Тымыҙһын ул мыжыҡ хисемде.
Ҡабул итсе мине нисек бармын —
Тойғоларҙың тоғо сиселде.

Вағытлыса туҡтап ҡалды ваҡыт,
Ваҡытлыса ҡайтты яҙҙарым.
Ваҡытлыса — беҙҙең бөтә ғүмер,
Мәңге төҫлө бары наҙҙарың...

### ЮҒАЛТЫУ

Тағы — һиҙмәмеш,
Тағы — күрмәмеш.
Йөрәк алданмай:
Унда — моң-һағыш.

Ялған — күҙҙәрең,
Алдаҡ — һүҙҙәрең.
Түҙеү бик ҡыйын:
Һары йөҙҙәрем.

Түҙермен — яҙмыш,
Йотолор һағыш.
Янырмын янһам,
Теләмәм ҡарғыш.

Ҡайтыр, тип, һөйөү
Кәрәкмәҫ көйөү.
Ҡайтмаҫҡа мәңге
Юғалған һөйөү.

Бер ни һиҙмәйем,
Бер ни күрмәйем.
Һиңә ихластан
Бәхет теләйем.
Һинһеҙ йәшәргә
Генә белмәйем.

* * *

Барыр юлым оҙон һиңә, иркәм,
Инде тонокланa хистәрем.
Һине эҙләп донъя гиҙә торғас,
Йәшлек ҡояшым да кисләне.

Кис булһа ла, килсе яндарыма,
Хатта — ғүмеремдең һуңында.
Күҙҙәреңә бер ҡараһам — етә,
Бары тап бул, осра юлымда!

Уҙған юлдарымдың һәр сатында
Йөрәгемдән билдә ҡаҙармын.
Һөйөү сәскән шул уттарға ҡарап,
Бәлки, мине үҙең табарһың.

## ҺҮҘ УЙНАТЫУ

Һин — хыял, төндәге
Төш кенә.
Йышыраҡ иҫемә
Төш кенә.

Көн тыуғас, аҡ һының
Сигенә.
Еткәнмен тилереү
Сигенә.
Һағынып һарғайҙым
Тағы ла.
Һөйөүгә үкенес
Тағыла.
Йондоҙом бул миңә,
Бул айым.
Һин — Ләйлә, мин Мәжнүн
Булайым.
Осрашыр юлдарҙы
Һыҙамын.
Тик эстән, тик эстән
Һыҙамын.

## ЙӘШ ҠЫҘҒА

Яҙғы ҡыяҡҡа оҡшашһың:
Һутҡа тулышҡан тәнең.
Кем генә татыр, туймайса,
Был һуттың бөтә тәмен?
Үҙең дә, түҙмәй, көтәһең
Шул берәү — һөйөклөңдө!
Яҙһын һиңә аңлар егет
Шул мәлдең бөйөклөгөн!
Ниндәй булыр көткән мәлең?

Оло хис? Әллә ҡарғыш?
Ҡорбан аңдыған йыртҡыстай,
Һағаламаһын һағыш.
Һығылып түгел, һағынып
Иҫләсе шул таңынды!
Һеҙҙе ҡотлап, моң ураһын
Гөрләшкән ҙур табынды!
...Яҙғы һуҡмаҡтан, атлығып,
Яҙмышыңа сабаһың.
Әллә бәхет көтә һине,
Әллә утҡа ҡабаһың?..

* * *

Ҡараштарың, һылыу, бигерәк моңһоу.
Һөйөү көтөп, ахыры, талсыҡҡан.
Әҙерһеңме ымға эйәргерә,
Яңғыҙлыҡтан арып ялыҡҡас?!

Был донъяла мин дә япа-яңғыҙ,
Мин дә ялыҡҡанмын һөйөүһеҙ.
Күҙмә-күҙ бер ултырайыҡ әле,
Табайыҡсы бәйләр төйөн-һүҙ.

Күкрәк ситлегендә ташып барған
Моң-зарҙарҙы, зинһар, тыяйыҡ.
Кемдер өсөн тотҡан тойғоларға,
Ишек асып, ирек ҡуяйыҡ.

Моңло күҙҙәреңә утлы ирендәрем
Татлы өмөт менән наҙ бөркөр.
Тик бер мәлгә донъя ҡалып торһон,
Һағыштарың ситкә ат, төкөр!

Онотолоп, мин дә түштәреңә
Алйып ҡатҡан башым һалайым.
Һинең ҡосағыңда йөрәгемә
Тик бер мәлгә һиллек табайым.

## ДУҪТЫҢ ҠАТЫНЫ

Былбыл һиңә моңло тауыш биргән,
Керпек бүләк иткән ҡамыштар.
Күҙҙәреңдә төпһөҙ диңгеҙ ятһа,
Йөҙөңдә ай, ҡояш ҡауышҡан.
Буйың нескәлеген алғанһыңдыр
Һин, ахырыһы, ап-аҡ ҡайындан,
Алһыу ирендәрең — һутлы сейә,
Ҡаштарыңа бәрхәт ҡайылған.
Аҡҡош йөҙә — атлап йөрөүҙәрең,
Ә ҡулдарың — ике ҡанаттай.
Толомоңа алла ебәк ҡушҡан,
Түшең алма итеп яратҡан.
Тыштан, бәлки, тыныс күренәмдер,
Әммә эсем тулы ялҡын-ут.
Минең һиңә, ғашиҡ булыу түгел,
Һоҡланырға, хатта, хаҡым юҡ.

## ХЫЯЛ

Һине юллап килдем был тарафҡа,
Эҙҙәрең юҡ — яңы ҡар күмгән.
Элеккесә сағыу түгел йәш ай:
Тоноҡланған — гүйә, ул һүнгән.
Әкрен генә төшә ҡар тәңкәһе —
Тик ҡойолмай инде сылтырап.
Сыңғырҙатып көлмәй йондоҙҙар ҙа,
Йылғаһы ла аҡмай йыр йырлап.
Йән өшөткөс — ялтыр йылға боҙо,
Һин булғанда ул бит ҡуҙ ине.
Ошо һуҡмаҡ буйлап һинең менән
Элеккеләй тик бер уҙ ине...

## ЙӘРИӘ

Ҡулдарыңа тик бер ҡағылайым,
Шундай йомшаҡ, ап-аҡ ҡулдарың.
Был яҙмыштар бик йыш осраштырмай,
Һирәк илтә һиңә юлдарым.

Күҙҙәреңә тик бер бағайымсы,
Төпһөҙ күлдәй һинең күҙҙәрең.
Йөрәк серең улар һөйләй төҫлө —
Кәрәге юҡ артыҡ һүҙҙәрҙең.

Ирендәрең һурып үбәйемсе,
Һутлы сейә бит ул иренең.
Мин ашҡынып тағы юлға сығам —
Ҡуйынында һинең ирермен.

Ҡуңыр күҙле, көләс йөҙлө һылыу, —
Берҙән-берем бит һин, Сәриә!
Донъяларым, гүйә, онотола,
Һине күрһәм, йәрем, йәриә.

* * *

Күҙем төшкәйне лә бер ҡыҙға,
Ултырманым шиғыр яҙырға.
Шашып талпыныуым күп ваҡыт
Төшөп бармай хәҙер ҡағыҙға.

Үтә уяу берәү табылыр,
Һүҙе уның — дары ҡабылыр.
Шиғыр түгел, хатта, ул саҡта
Уйҙарымдың юлы ябылыр.

Ышанмаҫтар "хыял" тигәнгә,
Моңһоулыҡтан елкән киргәнгә.
Хаҡ Тәғәләм, һиңә рәхмәтем —
Хис йоморға һәләт биргәнгә.

## НИҢӘ?

*Мин үлгәнмен, имеш...*

Ә. Атнабаев

Мин үлгәнмен, имеш... Ҡышмы, йәйме,
Көҙмө, яҙмы — эммә үлгәнмен.
Һуңғы һулышымды алғанымда
Йәш аралаш моңһоу көлгәнмен.

Табут тора. Таныштар һәм дуҫтар,
Онотоп минең әсе телемде,
Маҡтап телмәр тота бер-бер артлы:
Шәп булғанмын, ҡыйыу, түҙемле.

Илтеп һалғас мәңге ятыр йортҡа,
Бөтәһе лә инде ҡәҙимге:
Тәүҙә доға уҡыр мулла абзый,
Аҙаҡ...
Һуң мин иҫкә алмаҫ әҙәмме?!

Ә был ваҡыт һомғол һынлы ханым,
Эшләпәһен баҫып күҙгәрәк,
Сәскә һалыр минең ҡәберемә...
Донъя ник һуң һуңлап үҙгәрә??!

## ҺАҒЫШЛЫ ЙЫР

Һөйөп өлгөрмәнем,
Һөйөп бөтөрмәнем —
Йәшлек төшөп ҡалған атымдан.

Күпме ынтылһам да,
Күпме йотлоҡһам да —
Юҡ, дөрләмәҫ йөрәк ялҡындан.
Өмөт инде бөткән,
Тимәк, ситләп үткән
Миңә яҙмыш ярты йәнгенәм.
Һин дә көйәһеңдер,
Мине һөйәһеңдер,
Таныш булмаһаҡ та, йәргенәм.
Яңғыҙ йөрәк кенә
Бөгөн терәк миңә —
Һиңә илтер юлдар бик оҙон.
Көтөп алмайынса,
Балҡып янмайынса, —
Һүнер, ахры, ғүмер йондоҙом.

## МИН АҢЛАЙЫМ...

Елп-елп килде серле ҡараштарың...
Юҡ! Күрәһең, улар аҙашҡан.
Әүрәтмәгеҙ, ҡуйсы, йөрәгемде —
Бик әрнеүле булыр аҙаҡтан.

Аңлайым мин серен күҙҙәрҙең,
Алһыу алған сағын йөҙҙәрҙең;
Һәм төшөнәм йыш-йыш тын алыуҙы,
Мәғәнәһен ҡыҫҡа һүҙҙәрҙең.

Алдатмаһын сәсем ҡараһы:
Йылдар менән йылдар араһын

Ҡыҫҡартырға беҙгә тәбиғәт тә
Ҡалдырмаған һис бер сараһын.

Тик күнергә ҡала яҙмышҡа —
Осраштырған беҙҙе яңылыштан.
Йәнем әрнеп, күңел дауыллана
Күкрәгемә тулған һағыштан.

## ТАТЛЫ ҺАҒЫШ

Һинең менән үткән ул көндәрем
Әллә тик хыялда булдымы?
Татлы һағыш, ғәзиз хәтерләүҙәр
Күкрәгемә яңылыш тулдымы?

Хәтеремдә һаман эҫе тының,
Ҡулдарыңдың иркә naҙлауы.
Шат әрнеүле бышылдауың иҫтә,
Күҙҙәреңдең — дымлы баҙлауы.

Тулы айлы шул төнөбөҙ иҫтә,
Ваҡыт юйған йөҙөң хәтерҙән.
Бар булмышым шатлыҡ тулы ине —
Тулҡынланып ҡуям хәҙер ҙә.

Теләһәк тә, ул саҡ кире ҡайтмаҫ,
Татлы һағыш инде йәл генә.
Донъялыҡта йәшлек — бер көнлөк шул,
Шатлыҡ менән бәхет — мәл генә.

## АКСИОМА

Кеше араһында көйө
Үҙеңде юғалтҡанда;
Тәҡәттәрең ҡороп бөтөп,
Үҙеңде һынатҡанда;
Рәнйеү йәки ғәҙелһеҙлек
Ахмалға төшөргәндә;
Тормош тигәненән биҙеп,
Күңелең өшөгәндә —
Йылынырға усаҡ кәрәк,
Һыйынырға ҡосаҡ кәрәк.

## КӨНЛӘШЕҮ

Һине инде күптән көнләшмәйем,
Һөйләһәм дә ҡай саҡ юҡ-барҙы.
...Ошо һүҙем ҡапыл күңелемдә
Ел-дауыллы хистәр ҡуптарҙы.
Йәш ваҡытта һиңә күҙем төшкән
Тәү мәлдәрҙе ҡабат иҫләнем.
Ҡасан ғына һөйөү таңы атты,
Ни арала шулай кисләне?
Тағы көнләштем мин: бөгөнгө "мин"
Ул саҡтағы "мин"дән көнләште.
Ике аралағы үткән йылдар
Сират күперенә тиңләште.

## ҮТЕП БАРЫШЛАЙ

Бер йылмайҙың үтеп барышлай:
Шуҡлыҡ та бар унда, һағыш та.
Һин йылмайҙың үтеп барышлай.

Күктән төшкән мәллә фириштә?!
Һәр тарафтан һының килешкән.
Күктән төшкән, ахры, фириштә.

Шундай зәңгәр ине һауалар.
Йөрәгемде ни һуң дауалар?
Шундай зәңгәр ине һауалар.

Бер мәл генә булды — юғалдың,
Йөрәгемә осҡон-ҡуҙ һалдың.
Бер мәл генә — мәңге юғалдың...

## БӘХЕТ ЙЫРЫ

Яратыуың — үҙе бәхет бит ул,
Ҡауышыуҙар яҙмай һәр кемгә.
Бер-беребеҙҙе беҙ һөйәбеҙ икән,
Йөрәктәр ҙә бергә — беҙ бергә.

Мөхәббәттең татлы ғазаптары
Йәнебеҙгә ялҡын өҫтәһен.
Берсә — утҡа, берсә һыуға һала,
Һөйөүҙең бит бик күп төҫтәре.

Күрешмәүҙәр еңел булмаһа ла,
Йөрәк йылың тоям, ҡәҙерлем.
Һине бит мин айҙар, йылдар буйы
Көтөп алырға ла әҙермен.

Нишләр инек, йөрәк парым минең,
Юлдарыбыҙ әгәр яңылышһа?
Осраштырған, табыштырған өсөн
Мең-мең рәхмәт беҙҙең яҙмышҡа.

## ФӘРЕШТӘ

Һығылмалы һынлы, ап-аҡ тәнле,
Оҙон толомло һин, һөйкөмлөм.
Күңелкәйең зирәк, буйың тирәк —
Ошондай ҙа һылыу, һин кемһең?

Күҙкәйҙәрең ҡара, нурҙар тама
Керпек остарынан, гүзәлем.
Бер көн күрмәй торһам, һинһеҙ булһам,
Өҙөлә шул минең үҙәгем.

Тешкәйҙәрең тигеҙ, ҡулың етеҙ,
Һин уңғанһың, иркәм, һәр эштә —
Үҙем уйлап тапҡан донъялағы
Үҙем уйлап тапҡан фәрештә.

## ҠАБАТТАН ҠАБАТЛАУ

Бөтәһе лә ҡалды үткәндәрҙә,
Бөгөнгөлә — бары һағыш бар.
Икебеҙ бит ике тарафтарҙа,
Ник аяуһыҙ икән яҙмыштар?!

Яҙмыштарҙан ғәйеп эҙләмәйек,
Беҙ үҙебеҙ боҙҙоҡ ғүмерҙе.
Ошоғаса һөйөү һаҡланғайны —
Янып бөтмәйенсә һүнерме?

Һүнмәһенсе йәшлек осҡондары,
Тоҡанһынсы ялҡын ҡабаттан!
Тыямын да — йөрәк, тыңлашмайса,
Исемеңде мең ҡат ҡабатлай.

Ҡабатлана яҙмыш, ҡабатлана,
Беҙҙә түгел — йәштәр түҙемһеҙ.
Кеше һөйә икән, тимәк, йәшәй —
Ҙур Мөхәббәт мәңге үлемһеҙ!

## МӨХӘББӘТТЕҢ БАРҘЫР...

Бергә саҡта йылы хис-тойғолар
Юғалғайны һымаҡ — ялған был.
Йөрәгемдең иң-иң түрҙәрендә
Тик саф һөйөү һиңә ҡалған, бел.

Алыҫ ҡояш булып йылытаһың,
Меңәр саҡрым ятҡас арала.
Беҙ танышҡан аҡ көн күңелемдә —
Үткәндәргә хәтер юл ала.
Һыуҙан алып утҡа һала мине
Элеккесә бер ҡыҙ һипкелле.
Маңлайҙарға эҙен һыҙған йылдар
Балҡып тора йондоҙ шикелле.
Юғалмаған һөйөү алыҫтарҙа,
Булмаған да уның киткәне.
Мөхәббәттең барҙыр киләсәге,
Мөхәббәттең юҡтыр үткәне.

# *Әлләзаман —*
# *Ни һуң яман?*

## ИСЕМ

*Поэма*

### Инеш

...Әкрен генә аҡҡан көй ыңғайы
Төшөп киттек вальс әйләнеп.
Һүҙ башлауы ҡыйын: әйтер һүҙҙәр
Тел осонда тора бәйләнеп.
— Шунан, ҡыйыу егет? Танышайыҡ! —
Һарыҡай сәс башлап һүҙ ҡатты. —
Оля булам... — Унын ҡыйыулығы
Уйҙар сеймәлешен тағатты.
— Захар! — тинем вальс ыңғайына.
— Инженермын. Кеçә аҡсала.
— Ысын исемегеҙ нисек? — тиеп
Бәйләнә был. Ай-һай, нык саға.
— Һуң, барыбер түгелме ни? Ниңә?
— Юҡ, барыбер түгел, йәш кеше!

Алдашҡанды минең йәнем һөймәй.
Әлеге хәлем — шуның емеше.
...Ҡаушап ҡалдым.
— Зиннур булам... — тинем.
Һары сәстең күрәм ҡыҙғанын.
— Юҡ инде, юҡ. Бер алдашҡас — булмай!
Шул ялғандан күрҙем ыҙаны.
Һары сәсте илткәс урынына,
Кәйеф төшөп, сыҡтым урамға.
"Вәт, үсексән! Кисте әрәм итте.
Әллә бер йөҙ грамм һуғырға?.."
Һыра алып, клуб буфетында
Мин ултырҙым ул кис оҙаҡлап.
Оҙон уйҙарымды әле һеҙгә
Урап бирмәк булам йомғаҡҡа.

### Беренсе бүлек

...Тағы юлға. Тағы — оҙон юлға.
Яратам мин юлда йөрөргә,
Төрлө халыҡ менән танышырға,
Төрлө яҡтар, ер-һыу күрергә.
Себерҙәге бер N ҡалаһына
Әле бына китеп барышым.
Силәбенән икән — бер ҡарт менән
Купела уҡ алдыҡ танышып.
Ҡасандыр ул, әле минең һымаҡ,
Номерлы бер ерҙә эшләгән:
"Мордовия!" — тине. Өндәшмәне.
Әйтерһең дә, телен тешләгән.

Аңлап торам: “ябыҡ” урындарҙа
Телде кәрәк тыйып тоторға.
Шулай ҙа мин бер аҙ һөйләп алдым —
Теге “шайтан һыуы” ҡоторта.
— Өфөнәнмен, — мәйтәм. — Беҙҙең завод
Бик йәшертен әйбер сығара.
Талап ҡаты, эммә аҡсаһы мул —
Ай-һай, кәрәк инде сыҙарға.
Өйләнгәнмен. Фатирым бар. Бала.
Тағы нимә кәрәк кешегә?
Йәнә бер “эш” эшләп йөрөп ҡайтһам,
Машинаға аҡса етешә.
..."Тейәп" алғас, йоҡомһорап киттек,
Ваҡыты ла инде һуң ғына.
Свердловскиҙа, шау-гөр килеп,
Десантниктар керҙе купеға.
Аяғөҫтө генә берҙе “һытҡандары”,
Оҙатышҡандары аныҡтыр.
Ә береһе, ҡалып урынлашҡас,
Тиҙ үк танышырға ашыҡты:
— Николай! — тине ул, етеҙ генә
Өҫтәлгә бер “ярты” ултыртып.
Гөрләп торған ҡалын тауышы менән
Бөтә купе эсен тултырҙы.
Мин әйткәнсе, һорау яңғыраны:
— Ә нисек һуң ысын исемең?
Был Семеныч, “һалған” баштан әйтеп,
Үпкәләтә инде кешене.
— Ысыны ла шулай. — Һалдат көлдө.
— Туҡта, егет, — ҡартлас еңешә. —
Һин, национал, үҙеңдекен ата,

Беҙҙең исем — беҙгә килешә.
Коля етдиләнде:
— Ну, һин, батя,
Юҡҡа ғына улай ҡыҙаһың.
Мин урыҫмын. Тапап ҡайтып киләм
Афған тауҙарының туҙанын...
Ипле генә итеп күҙ һаламын:
Ҡаплаған да ҡуйған мосолман!
— Мин бирермен һеҙгә, азиаттар! —
Семеныч ҡарт әҙер осорға.
— Беҙ Афғанда, — һалдат ағарынды, —
Быныдай тонды ғәфү итмәнек.
Ҡарт булмаһаң һәм эсмәгән булһаң... —
Коля һүҙен әйтеп бөтмәне.
— Төкөрҙөм мин һиңә.
Ваҡытында
Һиндәйҙәрҙән ҡамыр яһаныҡ! —
Ҡарттың ауыҙ ябылып өлгөргәнсе,
Көслө ҡулдар уны ҡарманы.
— Тыңла, ҡартлас! — Паспорт пәйҙә булды. —
Быны бында нимә яҙылған?
Тик бер юлға ғына ғәфү итәм.
Ә хәҙер вон бынан! Вагондан!
Мин араға керҙем.
Тыпыр-тыпыр
Йүгерешеп килде кондуктор,
Милиционер, йәнә бригадирҙар:
— Туҡта, десант, етте. Тороп тор!
Ҡыҫҡаса шул: теге Семеныч ҡарт

Бүтән бер вагонға күсенде.
Һалдат бик оҙаҡлап тынысланды.
Тик ултырҙы бер аҙ. Сисенде.
— Ярар, брат! Беҙҙең һаулыҡ өсөн!
Бына, Афғанды ла үткәрҙек. —
Мөлдөрәмә тулы стаканын
Бер тынала ғына күтәрҙе.
— Ҡайһы яҡтан үҙең? — һүҙ ҡыҫтырам.
— Детдомдан мин, брат.
— Шулай ҙа?
— Интернатский, тиһең... Беләһеңдер...
Беҙҙән разве улай һорайҙар?!
Телем тиҙ тешләнем:
— Ғәфү, Коля! —
Ҡулға стаканды алғанмын. —
Минең — атай... Әсәй иҫән әле.
Шуға, эскәс, һуңлап аңланым...
Һине лә бит барыбер әсә тапҡан.
Шуға — ҡуя күрмә һүҙгә үпкәләп —
Мин был тосты, дөрөҫ аңла...
Мин ...Әсәләр өсөн күтәрәм!
Тағы уйға ҡалды Николай дуҫ...
Хәйер, аңлашыла хәлдәре.
Эстән генә үҙ-үҙемде һүгеп,
Ошо мәлдә уны йәлләнем.
— Әйҙә! — тине ҡапыл. Күҙҙәрендә
Һаран йәше китте ялтырап.
Төп күтәрә һуҡты. Тағы эсте.
Мин ултырам тамам аптырап.

— Һин хаҡлыһың, брат. Бүтән саҡта
Был тост өсөн... Үҙең беләһең.
Ғүмер ни икәнен... Э-эх, күп үлтерҙек...
Үҙебеҙ ҙә... үлемдән... Күрәһең...
Их, минең дә ауылым булһа икән...
Бәлки, барҙыр?.. Бәлки, барҙыр ҙа... —
Башы төшөп, Коля йоҡлап китте —
Һуң, әлбиттә, ҡаты арыған.
...Иртәнсәк ул төштө. Хушлашҡанда:
— Ауылыңды, — тине, — онотма.
Детдомыма барам. Шунда хат яҙ.
Әсәйеңде ҡара. Йонсотма.
Ә купеға әллә ниндәй ҡара
Кавказлылар килеп тулдылар.
Ишетмәйем бер ни. Һағыш менән
Ауылымды уйлап ултырам.

## Икенсе бүлек

Ғифрит-һуғыш урып ҡына түгел,
Турап-ҡырып үтте ауылды.
Фронт менән бергә унын көсө
Туҡтатышты ялҡын-дауылды.
Күп илауҙан шешенешкән сабый —
Һуғыштан һуң ауыл шул инде.
Еңеүселәр, ҡайтып, теҙген алды,
Һалып тормайынса шинелде.
Еңеүселәр ҡайтты. Ә ҡалғандар?
Улар — еңеүселәр түгелме?!

Ҡайтмай ҡалған шул һалдаттар менән
Ғүмер буйы өйкәй күңелде.
Күптәр улар беҙҙең ауылда ла,
Юйыла бара хәҙер исемдәр.
Исемлеккә кермәгәндәр байтаҡ:
Яҡындары ғына иҫендә
Йәшәй әле улар. Тиҫтә йылдан
Юҡҡа сығыр, хатта, һындары.
...Шатлыҡлы ла, әрнеү-ғазаплы ла
Булды һуғыш тымған йылдары...
Еңеүселәр инде ауылдағы
Һәммә кеше — башлап ҡарттарҙан;
Еңеүселәр инде ҡатын-ҡыҙҙар,
Бала-саға, хатта, аттар ҙа;
Кәңгер-кәңгер итеп донъя көткән
Әбейҙәр ҙә инде еңеүсе;
Көн оҙоно имсәк күрмәй ятҡан
Сабыйҙар ҙа инде еңеүсе.
Еңеүселәр ҡайтты... Күптәр зәғиф,
Зәғиф булһалар ҙа — ҡайттылар!
"Ҡара ҡағыҙ" килгән ҡай берәүҙәр
Ҡара таңда тәҙрә ҡаҡтылар.
Шуға күрә көттө һәр ғаилә,
"Үлгән" тигәнде лә көттөләр.
Ундайҙарҙың зарлы ҡараштары
Ҡайтҡандарҙың йәнен өттөләр.
Өс мәртәбә "үлгән" атайым да
Ҡайтып ҡотон алған әсәйҙең.
Фашист пленын үткән шул яугирҙең

Беҙ дауамы булып йәшәйбеҙ.
...Тик бер өйҙә генә берәүҙе лә
Көтмәнеләр көндөҙ, таңда ла.
Һалам башлы ситән өйҙә йәшәй
Өммөгөлсөм тигән ҡыҙ бала.
Ауыл кулактары, хаслыҡ яһап,
Атаһының ғүмерен ҡыйғандар.
Коммун тиеп, үҙен зыяратҡа
Ерләтеүҙән, хатта, тыйғандар.
Ире менән бергә туҡмалыуҙан
Иртә бала тапҡан ҡатыны.
Күҙгә зәғиф, аҡһаҡ Өммөгөлсөм
Этлектәрҙе аҙаҡ татыны.
Ағыуланған башаҡ ашап үлде
Һуғыш осоронда әсәһе.
Һере бала, ай-һай, күп тәмләне
Аслығын да, ҡайғы кәсәһен.
Хәйер, ул да — үҙе аңғармаҫтан —
Эй ҡыуанды Ғәйфи ҡайтҡанға.
Аҙаҡ күрҙе: күрше Хәлимәнән
Егет сыҡты ал таң атҡанда.
Былай ҙа аҙ һүҙле Өммөгөлсөм
Бөтөнләйгә эскә йомолдо.
Күктәге ай — һуҡыр шәм шикелле,
Көнө ҡара төндәй тойолдо.
Йәштәр уйнап күңел асҡанда ла,
Зәғиф ҡыҙға тейә туҡмаҡтар.
Анау Хәлимәһе, бейей-бейей,
Алдына уҡ килеп таҡмаҡлай:

— Баҫ әле, Өммөгөлсөм,
Иҙәндәре бөгөлһөн.
Баҫа белмәй баҫкандарҙың
Үҙәктәре өҙөлһөн.
Өҙөлә шул, өҙөлә үҙәктәре,
Тик бахыр ҡыҙ ниҙәр эшләһен?
Урындыҡта аунап, үкһей-үкһей,
Мендәр тышын ғына тешләне:
"Мин тыуғастин әсәм ниңә мине
Ағым һыуға бәйләп һалмаған?
Кешеләрҙе Хоҙай кеше иткән,
Миңә генә бәхет ҡалмаған..."
...Ете йәш сағымда атайымды
Гүр эйәһе итте яралар.
Әсәй итәгенә тотоношоп
Етем ҡалдыҡ беҙ ҙә — балалар.
Ҡарт ҡыҙ ине инде Өммөгөлсөм,
Гелән булды колхоз эшендә.
Һәр берәүҙә ҡайғы — баштан ашҡан,
Кемдең эше булһын кешелә.
"Өммөгөлсөм ҡапыл сирләгән, ти",
Имеш-мимеш — һүҙҙәр тиҙ китте.
Атын егеп, ситән өй янына
Килеп еткән шымтый Ғәйфетдин.
Ә апайға ошо китеүенән
Кире ҡайтыу насип яҙманы.
"Бала таба алмай үлгән икән!" —
Һис кем белмәй бынан ҡалғанын.
Тәбиғәткәме ул башын эйгән,
Бәлки, бәхетем ошо, тигәндер.

Был йәшертен һөйөү серҙәрен дә
Белһә ҡара мунса белгәндер.
Был сәйер хәл аҙаҡ онотолдо,
Ситән өйҙө һүтеп яҡтылар.
Һирәк-мирәк ҡай бер инәйҙәрем
Иҫкә ала ине аптырап.
Бер аҙҙан мин Өфө сығып киттем,
Ә эргәлә күмер таптылар.
Беҙҙең ауылға ла шул заманса
"Киләсәкһеҙ" мөһөрө таҡтылар.
Хәҙер бөтөп бара инде ауыл,
Нисә тиҫтә генә өй ҡалған.
Көньяҡтамы, төньяҡтамы икән —
Бәлки, адресы ла юғалған...

## Өсөнсө бүлек

Бик күп йылдар үтте ул замандан,
Мин, әлеге, һаман юлдамын.
Эркелешкән күҙ йәштәрен тыйып,
Таныш юлдар буйлап уҙамын.
"Ҡайтам, ҡайтам!
Ауылыма ҡайтам.
Урмандарым мине көтәлер.
Бейек тауҙар! Һеҙҙе күргем килә,
Һағындым мин ерҙе — бөтәһен".
Көйләй-һыҡтай ошо шиғри һүҙҙе,
Аяҡ баҫтым тыуған еремә.

Яҙмыш тигәндәре һөйрәмәһә,
Бер ҙә китмәҫ инем кирегә.
Бәй, әйткәндәй, кем тота һуң мине:
Заводыбыҙ күптән ябылды;
Эшһеҙ булғас, минән ҡотолорға
Ирочкаға һылтау табылды.
Кеше һымаҡ, алыпһатар булып,
Төркиәнән тауар ташыным.
Бер тараҡан булып "яңылар"ҙың
Уртаһына төштөм ашының.
Байтаҡ инде, бер ҡарасҡы һымаҡ,
Дөйөм бер ятаҡта көн итәм.
Аҙ булһа ла "калым" төшөп тора,
Бик асыҡһам, икмәк ебетәм.
Әсәйем дә күптән вафат булды:
Атай эргәһендә ҡәбере.
Шуға ауыл миңә бик тә яҡын,
Шуға икеләтә ҡәҙерле.
48-ҙәге атам ҡабул ҡылды
84 йәштәге ҡарсығын.
Һуғыш менән уйын ҡорғандарға
Нәфрәтләнәм шуға — асынып.
Ошоларҙы уйлап, ауылыма
Ҡайтып килгән булам тупылдап.
Иртә менән улар руҡҡайына
Муллабыҙҙан ҡөрьән уҡытам.
Ауыл тормошон да нык үҙгәртеп,
Әйләндереп кире ҡоралар:

Бар колхозға өс трактор,
Биш машина менән торалар.
Бишәүһенән икәү — рәйестеке,
Бере — матур, бере — йонсоуҙа.
Шул “йонсоу”ын миңә торҙо биреп
Колхоздағы хужа Нур ҡоҙа.
Ауыл кешеләре әрләй үҙен,
Минең өсөн — һәйбәт етәксе:
“Ярты” ҡуйғас, кире китергә лә
Ул яңынан УАЗ бирмәксе.
...Үҙгәргән шул ауыл, ныҡ үҙгәргән:
Әбей булған минең еңгәләр.
Ағайҙарым — харап олпат төҫтә —
Сиккән таҡыялар кейәләр.
Ҡалмағандар мине көтөп торор
Алсаҡ һәм һөйкөмлө инәйҙәр.
Танымайым күп йәштәрҙе хәҙер,
Улар иһә — мине белмәйҙәр.
...Әруахтар рухына ҡорьән тамам,
Таралыша әбей-еңгәләр.
Ағайҙарым килеп һөйгән була,
Ә мин тора бирәм һеңгәҙәп.
Сауап алдым, әллә юҡмы икән —
Йоланан тик ҡала алманым.
Шулай инде, бөтә быуыныңды
Үҫтергәстәр итеп аллаһыҙ.
Зыяратта йөрөп, сәскә һалып
Ҡайтып инеүгә, һуң, ни ғүмер!

Машинаны көтәм. Китәм әле.
Барғас инде унда — күҙ күрер.
О, ниһайәт, Оҙон һырт яғынан
Колхоз УАЗ-игы күренде.
Ҡара-ҡара, шофер эргәһендә
Ят бер кеше лә бар түгелме?!
Килеп туҡтанылар минең янға.
Төшә былар. Текләп ҡарайым.
Күрешергә ҡулын һуҙған мәлдә —
Бар йөрәгем менән аңлайым:
— Николай, һин?!.
— Захар, нисек бында?
Тамаҡтарға төйөр ултырҙы.
Ҡапыл шымып ҡалған тирә-йүнде
Себен безелдәүе тултырҙы.
...Минең яҙған хаттар, күрәһең дә,
Унын детдомына бармаған.
Барһа барғандыр ҙа. Һәр хәлендә
Ул хаттарҙы Коля алмаған.
БАМ-ға эшкә китеп, ошоғаса
Себер киңлектәрен буйлаған.
Беҙ хушлашҡан теге көндән бирле
Тыуған тамырҙарын юллаған.
Эйе, эйе, дөрөҫ, уҡыусы дуҫ:
Өммөгөлсөм апай, үлһә лә,
Яңы йәнгә ғүмер бүләк иткән —
"Нәғим" исеме торған биркәлә.
Асы һөйөү емешкәйен тапҡас,
Вафат киткән шул уҡ кисендә.


14 — 711

Нәғим — Нәғим... Имсәк бала йорто...
Кем ҡараған тиһең исемгә...
...Беҙ йөрөнөк был көн ауыл буйлап,
Ололар ҙа, белгәс, шаҡ ҡатты.
Бер-ике алыҫ туған тапҡан булдыҡ.
Ҡарап сыҡтыҡ шунан аръяҡты.
Аръяҡтағы ситән өй урыны
Шаңғытҡандыр Нәғим-Коляны:
Үҙе тәпәй баҫыр үләндә ул
Тәгәрәп ятып үкһеп иланы.
Ә һуңынан ағайымда "йыуҙыҡ"
Николайҙың ҡабат тыуғанын;
Ҡырҡ йыл үткәс, милләт алыштырып,
"Башҡорт" әйләнергә ҡыйғанын.
— Миңә, брат, — тине, икәү ҡалғас, —
Яҙҙы инде, яҙҙы күрергә.
Ә бер мәлде, камерала саҡта,
Уйлағайным, хатта, үлергә.
— Камерала?! Ниндәй камера?
— Шул характер инде, һорама:
Бөтә Себер буйлап легендалар
Йөрөй хәҙер минең турала.
БАМ төҙөнөк башта. Ситтән тороп
Вуз бөтөрҙөм һөнәр буйынса.
Кәләш алғас, фатир өсөн тиеп
Аҡса йыймаҡ булам — уйымса.
Бер Ғәббәсов тигән прораб әҙәм
Шул исемем менән ҡаңғыртты:
"Мосолманһың, ниңә Николай һин?"

Күтәрҙем дә бәрҙем — шаңғыттым.
Тауыш сығарманы. Әммә ҡабат
Унның менән борсаҡ бешмәне.
Урлашҡанын күҙгә бәреп әйткәс,
Был аҫтыртын этлек эшләне.
Эштән аҙаҡ — мин бригадир инде —
"Калым" ала инек частниктан.
Бригадала төрлө бәндә була —
Был, ҡыҫҡаһы, шуны ишеткән.
Ишеткән дә "калым" эргәһенә
Ауҙарттырған яҡшы таҡталар.
Иртәгеһен инде был ЧП-ны
Тулыһынса миңә япһара.
Ну, алдылар мине. Тикшергәнсе
Камераны миллион ураным.
Бер һорауға яуап бирмәйенсә,
Тик адвокат ҡына һораным.
Еңеп сыҡтыҡ: бахыр, теге бәндә,
Аҙаҡкаса уйлап етмәгән;
Баҡтыниһәң, теге таҡталары
Контор нарядынан үтмәгән.
Ә үтмәгән икән — урлашыу юҡ.
Ғәббәсовтың үҙен яптылар.
Эйе, брат, беҙҙең халыҡ шулай
Яуыздарҙың үҙен ҡаптыра.
Прораб — мин хәҙер төҙөлөштә.
Эштәр китте уңай юлынан.
Бирешмәйбеҙ!

Бөтә нәмә килә
Детдомовскийҙар ҡулынан.
...Таң менән беҙ икәү юлға сыҡтыҡ,
Сөкөрҙәшеп кенә, һүҙ ҡатып.
Ә бер аҙҙан яңы туғанымды
Аэропортта ҡалдым оҙатып...

## Эпилог

Ҡайҙа йөрөһәм дә, хәҙер инде
Кешеләргә ныҡлап ҡарайым:
Бүтән исем менән йөрөмәйме
Берәй башҡорт ҡыҙы, малайы?
Һуғыш тигәненә нәфрәт кенә —
Үҙ ҡаныма кереп ултырған.
Хәйер, минең хистәр генә — нимә?!
Ер шары һуң ҡасан тын торған?..
Яҙмыш — яҙмыш менән. Ә шулай ҙа
Кеше үҙе яһай яҙмышты.
Бәхете лә, бөтәһе лә — беҙҙән:
Яҙмыш ғәфү итмәй яңылышты.
...Һүҙем тамам. Һыраһы ла бөттө.
Буфетты ла, ана, ябалар.
Ә-ә, һүҙем ҡалған икән. Шуны
Әйтеп бөтәйемсе ҡабалан:
“Ҡырҡ йәштән ҡарттар” клубына
Әүәҫләнеп алдым йөрөргә.
Бөгөнгөһө генә ҡалһын инде

Һеҙҙең менән бергә көлөргә.
Бәхетемде бер табырмын әле,
Ниңә улай алдан бөлөргә...

## БӨГӨНГӨ ХӘЛЕБЕҘҘӘН КҮРЕНЕШТӘР

### Сәсәндең ил хаҡында әйткәне

Ай, ил ине, иле ине,
Балҡып торған ил ине.
Бар йыһанда йондоҙ булып
Ҡалҡып торған ил ине.
Ай, ил ине, ил ине,
Сәскә атҡан ер ине.
Аҫыл һүҙле, зирәк күҙле
Сәсән маҡтар ер ине.
Ай, ил ине, ил ине,
Дуҫ халыҡлы ил ине.
Ер йөҙөндә солох һаҡлар
Ҙур хаҡлыҡлы ил ине.
Фәрештәләй ир-аттарҙың
Иблес булған күңеле:
Шанлы илде төн эсендә
Тарҡаттылар түгелме?
Тарҡаттылар түгелме лә
Тараттылар түгелме?
Ил байлығын йомдорорға
Яраттылар түгелме?
Ай, ил ине, ил һаман!
Бер тигәс тә, ни яман?

Быуат-быуат нығытылған
Ил тарҡатыу — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Ике тигәс, ни яман?
Тәхет тиеп үҙ халҡыңа
Туп аттырыу — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Өс тигәс тә, ни яман?
Талаттырып, үҙ ҡәүемең
Асҡа ҡаҡлау — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Дүрт тигәс тә, ни яман?
Эшһеҙ итеп ғәм халыҡты,
Алкаш яһау — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Биш тигәс тә, ни яман?
Ярлы, наҙан, кәрһеҙ ир ҙә
Түлһеҙ ҡатын — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Алты тигәс, ни яман?
Ил инәһе, әсә булыр
Ҡыҙҙар аҙҙы — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Ете тигәс, ни яман?
Ил тотҡаһы, ата булыр
Егет мәшәү — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Һигеҙ тигәс, ни яман?
Оло маҡсат булмайынса,
Вайым йәшәү — шул яман.

Ай, ил ине, ил һаман!
Туғыҙ тигәс, ни яман?
Ер-һыу тулы байлыҡ көйө
Хәйер һорау — шул яман.
Ай, ил ине, ил һаман!
Ун тигәс тә, ни яман?
Урыҫтан да, башҡорттан да,
Татарҙан да, удмурттан да,
Мари менән сыуаштан да,
Уҫал менән йыуаштан да,
Ямандан да, яҡшынан да,
Изгенән дә, шаҡшынан да —
Боҙоп маҡсат-теләгенән,
Илдең һәммә милләтенән
Маңҡорт яһау — шул яман.

Ай, ил булыр, ил булыр!
Ҡабат шанлы ил булыр.
Ҡасан ғына ил тупларлыҡ
Азамат бер ир тыуыр?
Ай, ил балҡыр, бер балҡыр,
Яңы быуат юл асыр.
Беҙ ҡалҡытһаҡ эйгән башты,
Күңелдәге ҡол ҡасыр.
Яҡшы батша килеп кенә,
Бөтмәҫ илдең нужаһы.
Килә-китә торор батша,
Беҙ бит — илдең хужаһы,
Беҙ бит — ерҙең хужаһы!

## Ата менән ул әйтеше

Улы:

Эш һөймәйһең, ялҡау, тинең,
Һөйләгәнһең, атай, юҡты.
Ялҡау кеше күҙ йомғансы
Йыямы һуң был байлыҡты?!
Әлепте лә таяҡ итеп
Белмәйһең бит, наҙан, тинең.
Доллар тулы чек-ҡағыҙҙа
Ҡултамғалар ҡайҙан минең?!

Атаһы:

Улым, улым, эңер етһә,
Үткер күҙ ҙә бәйләнә бит.
Иҫке тунды әйләндергәс,
Ул яңыға әйләнә бит.
Уңғанлыҡтан түгел байлыҡ,
Мутлыҡ күҙең бәйләгән бит.
Бәндәләрҙең ҡан-йәштәре
Доллар булып әйләнгән бит.

Улы:

Аңламағас был донъяны,
Атай, һиңә бер кәңәш:
Был киленең ологайҙы —
Әйттер миңә йәш кәләш.

Йәнә киленең булыр,
Минең күңелем булыр.

Атаһы:

Ялҡаулығың үтмәгән дә
Наҙанлығың бөтмәгән.
Еләк кеүек ҡатының бар,
Һиңә нимә етмәгән?
Аҙғын күңелең, улым, —
Ҫисә ҡайышты ҡулым.

Улы:

Мин бит хәҙер — хаҡ мосолман,
Дин зиһенде яңырта.
Байыҡҡас ни, бисә алам...
Әләү-әләү, ауырта.
Атай! Әсәй ҙә оло,
Ҡыҙҙар — ҡалабыҙ тулы.

Атаһы:

Әллә заман, әллә балам —
Нимәлер ныҡ үҙгәрҙе.
Яман тиһәм, һүҙең яҡшы —
Күңелемде күтәрҙең.
Һиңә әйттерәм кәләш,
Беҙҙең берекһен кәңәш!

Икеһе бергә:

Бер олоно, бер кесене
Тыңлауҙары мең алтын.
Иртән тороп, кис ятабыҙ —
Ҡуйында шул бер ҡатын.

Улы:

Йәнә килененң булыр,
Нурға күңелем тулыр.

Атаһы:

Һиңә йәш әсәй булыр,
Өйгә йәм сәсеп торор!

## ЕГЕТ МЕНӘН ҠЫҘ ӘЙТЕШЕ

Ҡыҙ:

Һайып бөткән күлдә өйрәк йөҙә,
Мәргән генә булһаң, ат, егет.
Өҫ-баштарың, былай, нисауа, тим,
Кәләш итеп алып ҡайт, егет.

Һин дә урта белемле,
Мин дә урта белемле.
Һөйҙө ни ҙә һөймәне ни —
Булһын бай ҙа килемле.

Егет:

Һай булмағай, күлең тәрән булһын —
Өйрәгеңде барыбер атмайым.
Йәшәгәнең — ятаҡ, атаң ярлы —
Офисыма алып ҡайтмайым.

Үҙең урта белемле,
Бер ҙә түгел килемле.
Долларҙарға күмәм һине,
Асһаң минең күңелде.

Ҡыҙ:

Алыҫ-алыҫтарҙа төтөн сыға,
Быҫҡый, ахры, ферма мөрйәһе.
Ҡалаларҙан инде айырылмам...
Табып ҡуйыр берәй мәрйәне.

Һиндә аҡса мул икән,
Миндә, эһем... мул икән.
Бала бағып, ир көткәнсе,
Һөйәркәһе бул икән.
Һөйәркәһе бул икән!

## Сәсән менән мулла әйтеше

Сәсән:

Илде золом ҡапланы,
Хаҡлыҡ йөҙөн тапланы.
Заман хәлен һөйләшергә
Бер әҙәм-зат тапманым.
Илем тиеп йүгергән,
Телем тиеп йөрөгән
Ир-азаматтар ҡайҙа?
Әллә бар(ы)һы тилергән?

Мулла:

Көфөр һүҙ әйттең, мулла кем,
Ир-азамат бөтмәгән.
Ғүмер буйы мир тип сабам —
Миңә нимә етмәгән?!
Сәүит барҙа, партияның
Һәр һүҙен үтәп торҙом.
Ҡара халыҡ — ҡара һарыҡ.
Юлдарын йүнгә борҙом.
Демократтар түргә менгәс,
Халыҡты йәлләнем шул.
Әҙәпкә иман килһен тип,
Сәлләләр бәйләнем шул.

Сәсән:

Яҙғы елгә еленләп,
Ялтыр боҙға ҡолонлап,
Тәхеттәге һәр батшаны
Майлап-яйлап, ҡупылап
Иҫкән елгә боролған,
Һәр ҡырауҙан ҡурылған
Бәндәләр ерҙә тулы.
Һин — хәйләгә ҡоролған.
Коммунизм төҙөргә,
Әмерикте уҙырға
Биргән антың оноттоңмо?
Өлгөрҙөмө туҙырға?
Яҡшы, яман ярыша,
Мулла, байҙар табыша.
Һиндәй бәндә, күлдәк күреп,
Көн дә иман алыша.

Мулла:

Һүҙең, ҡартлас, тағы көфөр.
Халыҡты онотаһың.
Үҙ-үҙемде йәлләмәйсә,
Шулар тип ут йотамын.
Миңә яҡын һин йөкмәгән
Ил ғәме һәм бурыстар.
Аҡ мәсеттәр төҙөтәм бит
Бай башҡорт, бай урыҫтан.

Сәсән:

Халыҡ башын бутаған,
Аҡса тиеп уҡталған,
Алан-йолан күҙ уйнатып,
Һәр ымға ла туҡталған

Бер бәндә түгелме һин?
Бер йәлләд түгелме һин?
Мулла атын ҡара иткән
Бер йән дә түгелме һин?

Әҙәм алдар һүҙеңде,
Йөрәк арбар йөҙөңдө
Ишетмәйем, күрмәйем —
Һынамасы түҙемде —

Изге Ҡөрьән таплама,
Кеше күҙен ҡаплама.
Изге мәсет тупһаһына
Ике аяғың атлама!

## Еңгә менән бикәс әйтеше

Ҡыҙ:

Алты егет бергә килгән,
Инһендәрме, еңгәкәй?
Уҡып диплом алды микән? —
Береһе бигерәк бәләкәй.

Еңгә:

Алтау алмаҫ, бере алыр,
Алтауһын да йөрөтмә.
Көтөүсенең рәте бармы? —
Рәжәпте керетмә.

Ҡыҙ:

Үҙе ут та күҙҙәре мут,
Һайлайым Исмәғилде.
Тәндәремә эҫе ҡабып,
Йөрәккә хистәр инде.

Еңгә:

Исмәғилдә бисә тормай,
Һайлама Исмәғилде.
Хөснөтдиндең мөшкөллөгөн
Үҙең бит кисә белдең.

Ҡыҙ:

Өсәү китте, өсәү ҡалды,
Инһендәрме, еңгәкәй?
Уларҙан да ҡолаҡ ҡаҡһам,
Кем алыр һуң, сәнәкәй?

Еңгә:

Ағайыңа сыҡҡан булып,
Хурға ҡалдым ғүмергә.
Бынауҙың да мал-йорто юҡ,
Бара күрмә Ғүмәргә.

Ҡыҙ:

Был икәүҙең береһе карлик,
Һайлайым бишенсеһен.
Ҡалала кейәү тапманым,
Йә бында исем сығыр!

Еңгә:

Үпкән-ҡосҡан — елгә осҡан,
Үкенмә үткәнеңә.
Йәш сағыңда типтереп ҡал,
Эләкмә сиргә генә.

Ҡыҙ:

Яҙ етеүгә диплом алам,
Кемеһе миңә яҙған?
Уҡыр инең, «спонсорҙар»
Итмәһә шунда «ярҙам!»

Еңгә:

Ғәйнуллаһы, ай-һай, сибәр,
Эшкә лә уңған, йүнһеҙ.
Уны һиңә тоторҙинһәм,
Йөрәгем нисек түҙһен?!
Крандарҙан һыуҙар аға,
Шуға мин көйәнтәһеҙ.
Был ғүмерҙә нисек итеп
Түҙәйем һөйәркәһеҙ?!
Ир нимә ул! Һөйәркәһеҙ
Йәшәмә, йөрәккәйем.
Дипломы бар, атаһы бай —
Һайла шул бәләкәйен!

## Егет менән еңгә әйтеше

Еңгә:

Ҡай арала үҫеп, буй еткерҙең —
Ҡәйнешкәйем, ҡолға булғанһың.
Зыр һелкетеп донъя көтөр саҡта,
Йөҙөң бойоҡ, зарға тулғанһың.

Егет:

Әрмеләрҙә йөрөп сәс еткерҙем,
Сәскенәйем етте үрмәгә.
Кис еттеме, йөрәк олотабыҙ —
Бер ҡыҙ ҙа юҡ, хатта, күрмәгә.

«Һөйәм», «Көтәм» тигән сибәркәйҙәр
Ҡалаларҙа рәхәт көн күрә.
Беҙҙең ише ауыл малайына
Өҫтән генә улар төкөрә.

Еңгә:

Буй еткергәс, үҫһен аҡылың да —
Зар-интизар илап йөрөмә.
Дәртең түҙҙермәһә, кәңәшем шул:
Бер утарҙа ҡортҡа көн күрә —
Булмаһа, һин шуға йортҡа кер ҙә,
Байлыҡ һәм дә наҙға сумырһың.
Һәлпелдәтеп урам ҡыҙырғансы,
Йылы ҡосаҡ тойоп ҡунырһың.

Егет:

Һай, яһилһың икән, еңгәкәйем,
Һүҙең барып тейҙе зиттарға.
Ағай үлеп, еңгә, тол ҡалдинһәң,
Һис ебәрмәм һине яттарға.

**Ике ҡыҙ хыялы**

1-се ҡыҙ:

Уф, ҡотолдом тағы бер зачеттан!
Тағы алты зачет... Имтихан!
Баш күтәрмәй көн-төн китап кимерәм,
Бер ял күргәнем юҡ. Их, туған!

2-се ҡыҙ:

Бигерәк томанаһың, әхирәткәй,
Белем эстәп бөгөн кем байый?
Ҡаш һикертеп, бер тик күҙеңде ҡыҫ —
Профессор бит шуға, эй, алйый.
Шөкөр, тимен, ошо көнөмәсә
Бер имтихан уҡып бирмәнем.
Ҡартлас кисә һинән күҙен алмай,
Ә һин, хатта, шуны һиҙмәнең.

1-се ҡыҙ:

Юҡ, юҡ! Нисек инде, уҡымайса
Ниндәй генә белем алайым?
«Ҡыҙыл диплом» нисек эләкһен дә,
Аспирантка нисек булайым?

2-се ҡыҙ:

Бер «шестерка» биреп вузға керҙем,
Диплом ғына ала белермен.
Иҫән булһа минең «ағаҡайым»,
«Мерседес»та ғына елермен.

### Ярлы егет хыялы

Әллеү-бәллеү итермен,
Мораҙыма етермен.
Фарт сыҡтинһә, мин дә бер саҡ
Сереп байып китермен.
Ете диңгеҙ кисәрмен,

Ете төйөн сисәрмен.
Бай тол ҡатын табылһасы,
Үҙем, былай, сибәрмен.
Бизнес итергә микән?
Эшкә инергә микән?
Меңәр доллар түләйҙәр, ти, —
Чечен китергә микән?
Сабата шәп атлата,
Иманыңды ятлата.
Алма ҡыҙҙы, ал ҡарт бисә,
Бисәләр май ашата.
Йөҙөрмөн караптарҙа,
Йөҙөрмөн шараптарҙа,
Барыһына ҡул һелтәр ҙә
Йөҙөрмөн балда, майҙа!

## Сәсәндең йомғаҡлау һүҙе

Һай, ҡыҙҙарым, уландар,
Яҡындарым, туғандар!
Борон аҡһаҡалдар һүҙен
Тыңлай торған булғандар.
Һәр кемгә бар һүҙҙәрем,
Шуны әйтмәй түҙмәмен.
Өмөт менән бөтәгеҙгә
Төбәлгәндер күҙҙәрем.
Асылһасы аңыбыҙ!
Кәңәш тотоп барыбыҙ,
Илде көрсөктән сығарһаҡ,
Яҡты атыр таңыбыҙ.
Бөтә бәлә — юҡлыҡтан,

Бөтә бәлә — бурлыҡтан.
Белем эстәп, иман туплап
Ҡотолайыҡ хурлыҡтан.
Эске баҫты ирҙәрҙе,
Иблес баҫты илдәрҙе.
Бергә хәмер һемергән
Ҡатын ирен тиргәрме?
Аҙғынлыҡҡа саҡырып,
Мыйылдап йә аҡырып,
Телевизор тигән шайтан
Аңды ҡуя яптырып.
Урал тигән илем бар,
Башҡорт тигән телем бар.
Ялҡау менән яуыздарға
Һауам харам, ерем тар.
Уян, халҡым, йоҡоңдан,
Ҡотол һәлкәү холҡоңдан.
Хөр илеңдә хөр йәшәргә
Йөрәгеңдә ялҡын бар.
Аҫабалыҡ хаҡың бар!

## РӘМИГӘ ХАТ

*Һайрап үлә һандуғастар,*
*Йөрәктәре ярылып.*

Халыҡ йырынан

«Рәми» йәки «Рәмил» тиһәм һиңә,
Аптырама, данлы аҙашым.
Быйыл миңә һинең йәшең тула:
Ҡырҡ биш йәштә һүнде ҡарашың.

Ҡырҡ биш йәштә һине оҙатҡайныҡ
Мәңге ҡайтмай торған тарафҡа.
Ҡырҡ бишеңдә булдың һин аҡһаҡал —
«Ҡартлас» итеп Алла яратҡан.
Аҡыллы ла, сабыр һәм көслө лә —
Имән төҫлө инең баһадир!
Шул кешене беҙҙән алып китте —
Хоҙайыңа үҙең баһа бир.
Хәйер, ниндәй шағир үҙе теләп
Кергәне бар ҡара гүрҙәргә?!!
Киткәнеңә артыҡ үкенмә һин —
Бер нәмә юҡ беҙҙә үҙгәргән.
Шул уҡ ғәйбәт менән хөсөт тулы,
Дарыу тиеп ағыу бирәләр.
Выждан, сафлыҡ — сүплек эргәһендә,
Үс һәм мәкер күкрәк кирәләр.
Тар маңлай һәм текә елкәлеләр
Әүәлгесә хаким донъяла.
Ижад илен сүп-сар ҡаплап китте,
Талант унда саҡ-саҡ тын ала.
Яңылыҡ шул: яҡты тандан ҡасып,
Беҙ тәртәне борҙоҡ ҡирегә.
Баҡтыниһәң, капитализмда
Бөтмәҫ бәхет, муллыҡ бирелә.
Шул сәбәптән бөтә коммунистар
Социализмдан баш тартты.
Әйләндереп кейгәс иҫке тунды,
Хәҙер демократик таң атты.
Ә элекке ҡыҙыл комсомолдар
Кибеттәрҙә — алып һаталар.

(Һинең замандағы спекулянт
Инде шулай тиеп атала.)
Ҡеүәтле һәм шанлы киң илебеҙ
Ун биш йәш ил булып бүленде.
Бүленештең ғәжәп шәп икәне
Беҙгә бөгөн асыҡ беленде:
Илде генә түгел, ерҙе, телде
Бүлешәбеҙ шашып, ҡабалан.
Байлыҡ туплай ҡараҡ һәм йылғырҙар —
Көслөнөкө килде замана.
Океан аръяғы һәм Көнбайышта,
Һарыҡ йыҡҡан бүре шикелле,
Тамаҡларға, гүйә, көтәләр бит —
Биткә бәреп тора ипкене.
...Ҡорҙаш тиеп һиңә өндәшһәм дә,
Малай төҫлө тоям үҙемде.
Арабыҙҙа булһаң, ҡалмаҫ инең
Әйтмәйенсә олпат һүҙеңде.
Ҡыуып еттем һине: мин дә хәҙер
Ҡырҡ биш йәштә, Рәмил аҙашым.
Заманыңда һин — аҡһаҡал булдың,
Заманымда ә мин — аҙаштым.
Хуш бул, шағир! Һиңә көнөбөҙҙән
Бер кәлимә сәләм еткерҙем.
Йәшкә һинән өлкән булырмынмы? —
Юрап булмай ҡасан китерҙе...
Һиңә ерҙән сәләм еткерҙем,
Белеп булмай ҡасан китерҙе...

## АВТОР ТУРАҺЫНДА БЕЛЕШМӘ

Рәмил Йәнбәк (Йәнбәков Рәмил Әхмәт улы) Күгәрсен районының Дауыт-Ҡайып ауылында тыуып үҫкән. 1969 йылда Өфөләге 1-се интернат-мәктәпте (1-се Республика башҡорт гимназияһы) тамамлағас, тыуған яғындағы «Ҡыҙыл байраҡ» колхозында эшләй. 1970—1975 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый.

Бишенсе курста уҡып йөрөгәндә Рәмилде «Башҡортостан пионеры» («Йәншишмә») гәзите редакцияһына эшкә саҡыралар. Бында ул 18 йыл эшләй, һуңғы алты йылда — баҫманың мөхәррире. Артабан «Китап» нәшриәтендә баш мөхәррир, директор, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, «Ватандаш» һәм «Тамаша» журналдарында баш мөхәррир урынбаҫары була. Әлеге көндә «Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары.

Рәмил Йәнбәк — Яҙыусылар союзы ағзаһы. Уның «Оҙон яҙ», «Билдәһеҙ һағыш», «Тик һиңә табынам», «Цветы во сне», «Аҙашҡан хыял», «Аҡ ялан» исемле шиғри йыйынтыҡтары баҫылып сыҡты.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*ФаkиҺа Туғыҙбаева.* Бөркөт булып саңҡыр сағың . . . . 5

**Ҡарт тарих өп-өр яңынан**
**Башлана бөгөн**

Ике арала уйланыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 16
Тыуған көн . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 18
Мәңге балҡы, Башҡортостан! . . . . . . . . . . . . 19
Яҙғы ергә мәҙхиә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 20
Ҡарт уҙамандың әйткәне . . . . . . . . . . . . . . . 21
Мин кем? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 22
Һуғыш яралары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 22
Әрме яҙы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 23
Мөхәббәтһеҙ шиғыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 24
Яңы паспорт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 25
Яҙғы йыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 25
«Аҡ ҡарҙарҙы яҙҙар ала инде...» . . . . . . . . . 26
Батшалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 27
Бөркөт саңҡыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 27
Йәшен алдан йәшнәй . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 29
Күгәрсенем — ғәзиз ерем . . . . . . . . . . . . . . . 30
Ҡабырғайтауҙы данлау . . . . . . . . . . . . . . . . . 31
Ергә һүҙем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 32
Кем ҡотҡарыр? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 33
Беҙ үҙебеҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 34
Күңел рәнйегәндә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 35

Шифаханала «Бәләкәй Вера» фильмын ҡарағас . . . . 36
Ә шулай ҙа... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 37
Оран . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 38
Аптырашта — юрамыш . . . . . . . . . . . . . . . . 39
Боронғо йыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
Әгәр ҙә мәгәр... . . . . . . . . . . . . . . . . . . 41
Ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 41
Ҡурҡаҡлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
Милләткә кәлимә һүҙем . . . . . . . . . . . . . . . 43
Менгән атың... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 45
Тарих . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 46
Капитализмға барышлай . . . . . . . . . . . . . . . 47
Асырғаныу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 48
Буталыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 49
Ҡот ҡойоу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
Ирек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 51
Өйрәнеү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 52
«Ҡайтам, ҡайтам!..» . . . . . . . . . . . . . . . . 52
Ос һәнәге . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 53
Осар ҡоштар ҡайта . . . . . . . . . . . . . . . . . 54
Ямғыр нимә шыбырлай? . . . . . . . . . . . . . . . 55
Һай, был ғүмер! . . . . . . . . . . . . . . . . . . 56
Ике тарих . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 57
Йыр тыңлағанда . . . . . . . . . . . . . . . . . . 58
Ауыл егеттәре йыры . . . . . . . . . . . . . . . . 59
«Боронғола күпме серлелек бар...» . . . . . . . . . 60
Бер һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 60
Ҡайып ҡамғағы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 61
«Ауылым яланы...» . . . . . . . . . . . . . . . . . 62
Ҡайтырмын . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 63
Башҡорт йыры . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 64
Кемгәлер . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 65
Дон Жуан үлеменә . . . . . . . . . . . . . . . . . 66

**Һағындыра һеҙҙе, бергә үҫкән**
**Таҡыр башлы ихлас малайҙар...**


Сәхәр сәйе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 68
Атай булһа... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 69
Малайҙарға . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 70
Диңгеҙ һәм йөрәк . . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
Шәүлә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 72
Азатлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 73
Хакимға . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
Күреп сығам әле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
Тынмаҫ күңел . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 75
Һынамыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 76
Яңы йыл балҡышы . . . . . . . . . . . . . . . . . 77
Саптар тураһында әкиәт . . . . . . . . . . . . . 78
«Юҡ, мин һиңә ауыр һүҙҙәр әйтмәм...» . . . . . . . . 78
Тоғролоҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 79
Бәхет көткәндә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 80
Бәхет килгәндә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
«Күңел эҙләнмәй...» . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
Ҡар яуғанда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 82
Сумам тәрән күлдәргә... . . . . . . . . . . . . . . 83
Онотмағыҙ мине . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Тол ҡатын ауыҙынан . . . . . . . . . . . . . . . . 84
Йәшлек хаҡында нәсихәт . . . . . . . . . . . . . 85
Ғүмер араһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Мин үлгәндә... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 86
Мин дә еләм... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 86
Йомро-йомро йомғағым... . . . . . . . . . . . . . 87
Шаярыу ҡатыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 88
Көтөүсе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 89
Яңғыҙлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 89
Шағирҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 90
Төндө маҡтау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 91
Бер иларға ине . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 92
«Яр ситендә — ҡая ташта үҫкән...» . . . . . . . . . 93

Ҡабырғай шишмәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . 94
Дуҫлыҡ хаҡында . . . . . . . . . . . . . . . . . 95
Ғүмер яҙы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 96
Тулҡындар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
Эскесе ҡатын . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
Кеше ғүмерҙәре . . . . . . . . . . . . . . . . . 98
Динис урамы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 99
Яҙылмай ҡалған шиғыр хаҡында шиғыр . . . . . . . 100
«Шарап баҫмай, төтөн алмай...» . . . . . . . . . . 101
«Дуҫмын, тинең, әй, ихлас йән...» . . . . . . . . . 101
Онотола... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 102
Донъялыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 103
Әрәм түгел . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 104
Миҙгелдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 105
Һаумы, тормош! . . . . . . . . . . . . . . . . . . 105
Хушлашыу йыры . . . . . . . . . . . . . . . . . . 106
«Иң ышаныр дуҫтарға ла донъя...» . . . . . . . . . 107
Бәндә тыуа... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 107
Төш күргәс . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 108
Яҡындарға . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 109
Яҡтыкүлгә мәҙхиә . . . . . . . . . . . . . . . . . 110
Үкенескә салауат . . . . . . . . . . . . . . . . . 111
«Бүтән хурлап бер ауыҙ ҙа...» . . . . . . . . . . . 112
Ай һәм йондоҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . 112
Шул булдымы? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 113
Арыным... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 113
Ул саҡ, был саҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . 114
Ҡайынлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 115
Ике икең . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 115
Кәбән ослау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 117
«Киләсәккә башым ынтылһа ла...» . . . . . . . . . 118
...Тимәйбеҙ... . . . . . . . . . . . . . . . . . . 118
Шундай тормош . . . . . . . . . . . . . . . . . . 119
Сабырлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 120
Араҡы хаҡы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 121
Үртәнеү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 122

Ҡышҡы тыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 123
«Бер һыҙланыу тоймай тәнем...» . . . . . . . . . . 123
Ишегемде асып... . . . . . . . . . . . . . . . . . 124
Ҡасан? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 125
Йөрәгемә нәсихәт . . . . . . . . . . . . . . . . . 125
Белмәҫмен . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 126
«Хыялымдың ҡанаттары киҫек...» . . . . . . . . . . 127
«Юҡ, етте!» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 128
Яҙ менән көҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 129
Үҙемә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 130
Бер ҡараһаң... . . . . . . . . . . . . . . . . . . 131
Ирҙәрсә һөйләшеү . . . . . . . . . . . . . . . . . 132
Ай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 133
«Шиғриәт ул — хыялыйҙар иле...» . . . . . . . . . 133
Әйтмә миңә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 134
Юлаусы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 135
«Тиктомалдан туҙынамын...» . . . . . . . . . . . . 136
«Йәнем нескә, әллә үҙем холоҡһоҙ...» . . . . . . . 136
Ни мәғәнә? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 137
Атайҙы һағыныу . . . . . . . . . . . . . . . . . . 137
Донъя хәле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 138
Коҙ еткәндә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 139
Йәшлек менән хушлашыу . . . . . . . . . . . . . . 139

## Әйт, Илаһым: Ҡайҙа ярты йәнем?..

Ярты йәндәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 142
Берәүгә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 143
Ҡыңғырау сәскә . . . . . . . . . . . . . . . . . . 144
«Ике нәмә мине иҫертә...» . . . . . . . . . . . . 144
«Ул ни ғәжәп...» . . . . . . . . . . . . . . . . . 145
Дуҫҡа өндәшеү . . . . . . . . . . . . . . . . . . 145
Ҡасандыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 148
Беләһең бит . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 148

Бәғеркәйем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 149
Ҡыуанайым... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 150
Ниңә уҙҙың яндарымдан? . . . . . . . . . . . . . 151
Ҡатынға әйтер серем . . . . . . . . . . . . . . . . 152
Ғорур йән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 152
Аптырағанда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 153
Ғашиҡ булмам... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 154
«Ник моңһоуһың, тип һорама...» . . . . . . . . 155
«Һине ҡабат осратмамын төҫлө...» . . . . . . . 156
«Тәҙрәм төбөнән поездар...» . . . . . . . . . . . 156
Ай булмам... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 157
Һине уйлағанда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 157
Былай ғына . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 158
Нимә кәрәк? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 159
Киләсәк ҡыҙына . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 160
Йыуаныс . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 161
Үҙәккәйем өҙөлә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 162
Ҡайҙа? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 162
«Ҡайғырғанда — йәш күрмәҫһең...» . . . . . . . 163
«Мөхәббәт — гәлсәр быяла...» . . . . . . . . . . 164
Яҙмыш һәм һин . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 165
Ҡайҙа ла бер . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 165
Көнбағыш сәскәләре . . . . . . . . . . . . . . . . 166
Һин саҡырма мине туйыңа . . . . . . . . . . . . 167
«Һин минеке түгел — башҡаныҡы...» . . . . . . 167
Ялбарыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 168
«Йөрәгемде семеттереп...» . . . . . . . . . . . . . 169
Сер . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 170
Кисер, һылыу! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 170
«Ҡыҙарып бешкән бит алмаң...» . . . . . . . . . 171
Аҡ ялан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 172
Табырмын . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 173
Донъя тотҡаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 174
Яратам! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 175
Диңгеҙ буйында уйланыу . . . . . . . . . . . . . 176
«Һаумы, тиеп өндәшмәйем...» . . . . . . . . . . . 176

Кем белә... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 177
Тулышыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 178
«Түҙеп тә төңөлдөм...» . . . . . . . . . . . . . . . . 179
Аҙашҡан хыял . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 179
Һуңланыҡ беҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 180
Ваҡытлыса . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 181
Юғалтыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 182
«Барыр юлым оҙон һиңә, иркәм...» . . . . . . . . 183
Һүҙ уйнатыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 183
Йәш ҡыҙға . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 184
«Ҡараштарың, һылыу, бигерәк моңһоу...» . . . . . . . 185
Дуҫтың ҡатыны . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 186
Хыял . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 187
Йәриә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 187
«Күҙем төшкәйне лә бер ҡыҙға...» . . . . . . . . . . 188
Ниңә? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 189
Һағышлы йыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 189
Мин аңлайым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 190
Татлы һағыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 191
Аксиома . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 192
Көнләшеү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 192
Үтеп барышлай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 193
Бәхет йыры . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 193
Фәрештә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 194
Ҡабаттан ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . 195
Мөхәббәттең барҙыр... . . . . . . . . . . . . . . . . 195

## Әллә заман —
## Ни һуң яман?

Исем *(поэма)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 197
Бөгөнгө хәлебеҙҙән күренештәр . . . . . . . . . . 213
Рәмигә хат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 229
Автор тураһында белешмә . . . . . . . . . . . . . . 232

Литературно-художественное издание

**ЯНБЕКОВ Рамиль Ахметович**

**(Рамиль Янбек)**

# КЛЁКОТ БЕРКУТА

Стихи, поэма

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Д. А. Талхина*
Биҙәүсе мөхәррире *Ф. Ф. Ислахов*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректоры *Ә. Ғ. Телəмова*

**Нәшр. лиц. № 04380 от 26.03.01. Йыйырға бирелде 28.04.02. Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.07.02. Форматы 60x90$^1/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Таймс гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 7,5. Шартлы буяу отт. 7,69. Иҫәп-нәшер таб. 8,32. Тиражы 1500 дана. Заказ № 711.**

**Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы. 450001, Өфө ҡалаһы, Левченко урамы, 4а. Әҙерләп бирелгән диапозитивтарҙан баҫылды. Өфө полиграфия комбинаты дәүләт унитар предприятиеһы. 450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.**